*✓ Әгәр ҙә кеше, хатаһын аңлап, донъяны тар-мар итеүен туҡтатһа, уға Ожмахта йорт төҙөләсәк. Әгәр ҙә кеше, хаҡлы була тороп та, дошманлашыуҙан баш тартһа, уға Ожмахтың иң бейек урынында йорт төҙөләсәк.*

*(Хәҙистәрҙән).*


# Киске Өфө

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

10 - 16 СЕНТЯБРЬ (ҺАРЫСАЙ) 2011 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡлы ирекле

№37 (455)



## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Ирҙе ир иткән дә,** хур иткән дә - ҡатын...



3

**Кредитыңды түләү яйын...** банк менән бергә эҙлә



5

**Үҙгәрешһеҙ килеп еткән,** сөнки "Урал батыр"ҙы ҡанбабалар һаҡлаған



6-7

**Уҡыусыңды ышандыра алһаң...** ысын әҙип булырға ла күп ҡалмай



8-9

14 **ТВ-программа**


ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## РФ һаулыҡ һаҡлау һәм социаль үҫеш министрлығы "Халыҡ сәләмәтлеген тәмәке тартыу эҙемтәләренән һаҡлау тураһында" закон проектын ҡарауға тәҡдим итте. Ә һеҙ тәмәкенән  ҡотолоу юлын нимәлә күрәһегеҙ?

*Салауат ИШБИРҘИН, уҡытыусы, тәмәке тартмай, араҡы эсмәй:* Студент саҡтарҙа егеттәргә эйәреп көйрәткеләп ҡараным, тик, бәхеткә күрә, күңелгә ятманы был ғәҙәт, тәмәкегә өйрәнеп китә алманым. Ә бына атайым мәрхүм көнө-төнө көйрәтә ине. Шуның арҡаһында оҙаҡ йылдар буйы үпкә сиренән һәм аяҡтарындағы ҡан тамырҙары сиренән яфаланды, ахыр сиктә, инфаркттан ваҡытһыҙ үлеп китте. Ағайым да тарта, был өлкәлә уның  50 йыллап стажы барҙыр. Шулай уҡ көнө-төнө өйөндә төтәтергә яратҡан бер ҡәрҙәшемдең ҡатыны үпкә яман шешенән донъя ҡуйҙы. Бына бит ниндәй аяныс: тәмәкесе үҙенә генә зыян яһап ҡалмай, ә иң насары - эргәһендәге яҡындары һаулығы өсөн дә ҙур хәүеф сығанағы булып тора.

"Халыҡ сәләмәтлеген тәмәке тартыу эҙемтәләренән һаҡлау тураһында" закон проектын ҡарауға тәҡдим итеп, РФ Һаулыҡ һаҡлау һәм социаль үҫеш министрлығы бик дөрөҫ эшләй. Тик ул ҡабул ителгән хәлдә лә (депутаттарҙың кире ҡағыуы йә уны күпкә йомшартыусы төҙәтмәләр индереүе лә бар, сөнки улар араһында тәмәке сәнәғәте әһелдәре менән "дуҫтарса" бәйләнештә тороусылар байтаҡ), беҙҙә закондарҙың нисек ғәмәлгә ашырылыуы һәр кемгә мәғлүм: ул эшләмәйәсәк, сөнки был алама ғәҙәт күптән тәмәкеселәрҙең йәшәү рәүешенә әүерелгән. Бер аҙ тыйылырҙар, бәлки, ләкин уны бөтөнләй тыйыу тиҙ арала мөмкин булмаясаҡ. Закон проектында, һәр төрлө транспорт сараларында, вокзалдарҙа, күп фатирлы йорттарҙың баҫҡыс майҙансыҡтарында һәм мәғариф, мәҙәниәт учреждениеларында тартыу тыйыласаҡ, тиелә. Оҙайлы рейстарҙы иҫәпкә алмағанда, самолеттарҙа был йәһәттән проблема юҡ, буғай, сөнки унда электәлектән "no smoking" ҡағиҙәһе ҡәтғи үтәлә килде, өҫтәүенә, салонда тәртип булдырыу өсөн яуаплы бортпроводниктар бар. Ә бына ҡайҙа даими контроль юҡ - унда тәмәкеселәргә ожмах. Уларҙы кем ҡарап торор ҙа, кем тыйыр һуң? Әйткәндәй, мәктәп, колледж, вуздарҙа уҡыусыларҙың тәнәфескә йүгереп сығып, тартып инеүҙәрен тыйыуҙан башларға кәрәк эште. Йылдар буйы быҫҡытып, төтөнгә ыҫланып бөткән стажлы тәмәжниктәрҙе түгел, йәштәрҙе ағыуҙан аралап ҡалыу еңелерәк тә, һөҙөмтәлерәк тә булыр ине, тип уйлайым.

*Марат ВӘЛИШИН, 15 йыл стажлы тәмәкесе, юрист:* Беҙҙең илдә берәй эшкә тотоноп китһәләр, бер сиктән икенсеһенә һуғылыуҙан ары булдыра алмайҙар. Тәмәке тартмаусыларҙың үҙ хоҡуҡтарын яҡлауға хаҡы булған кеүек үк, тәмәкеселәр ҙә үҙ хоҡуҡтарын яҡлауға мохтаж. Тартыуҙы сикләү йә булмаһа уны бөтөнләй тыйыу беҙҙең конституцион хоҡуҡты боҙоу булмаймы ни? Уның 54, 55, 57-се статьяларында, граждандарҙың хәлен насарландырыусы закондар ҡабул итеү тыйыла, тип әйтелә бит. Аңлайым, хәҙер минең был һүҙҙәргә, бәй, тәмәке тартыу хәлде уғата насарландыра түгелме һуң, тип ҡаршы төшәсәктәр. Эйе, был да хаҡ һүҙҙәр. Ә бит дәүләтебеҙ ошоға тиклем ҡыҫтап-маҡтап (тәмәкенең хәҙер ниндәйе генә юҡ, тартмаҫ ерендән тартып китерлек!) тиерлек тартырға тәҡдим итеп, асылда, тәмәке изделиеларын етештереүгә лә, ҡулланыуға ла юлды шар асып торҙо ла, хәҙер килеп тотҡан урындан һындырырға самалай. Улай бер һуғыуҙа мәсьәләне хәл итеп булмаҫын аңлайбыҙ ҙа бит, беҙҙә һәр ваҡыт шулай инде: ваҡытлыса шаулап алабыҙ ҙа... онотабыҙ. Әле үк мин ошо сираттағы шау-шыуҙың да тиҙҙән барыбер беҙҙең, тәмәкеселәрҙең, файҙаһына һүнеп ҡаласығын алдан күреп, ҡыуана биреп тә ҡуям, юғиһә, тиҫтәләрсә йылдар буйы тартып кил дә бер сәғәт йә бер тәүлек эсендә генә ташла ла ҡуй. Был мөмкин түгел. Тәмәкене ташларға теләүселәргә  дәүләт мотлаҡ бушлай медицина ярҙамы күрһәтеүҙе ойоштороорға тейеш. Әйтеүемсә, тотҡан ерҙән һындырыуҙың иң тәүҙә һөҙөмтәләрен түгел, ә эҙемтәләрен күрә белергә, уның ниндәй хәлдәргә килтерәсәген анализлап ҡарарға тәҡдим итәм. Тәмәке һатыуҙы тыйыу мотлаҡ тәмәкегә хаҡтарҙы күтәреүгә килтерәсәк, ә хаҡтарҙы күтәреү үҙе үк кешелекһеҙлек, минеңсә. Былай ҙа ҡиммәтселек, эшһеҙлек шарттарында йәшәп, күпселек тәмәкеселәрҙең матди һәм мораль хәле уғата насарланасаҡ ҡына. Ә инде тәмәке тартыуҙан үҙ һаулығыбыҙға зыян килтереү - иң тәүҙә беҙҙең шәхси эшебеҙ, ләкин был мәсьәләнең бер яғы менән килешәм: беҙҙең арҡала башҡалар сәләмәтлегенә лә зыян яһала. Был әлбиттә, ғәфү иткеһеҙ боҙоҡлоҡ. Ошо йәһәттән мине вазданым ғазаплай, әлбиттә. "Һинән һаҫыҡ еҫ килә", тип ҡурсаҡ шикелле матур ғына ейәнсәрем минең янға бөтөнләй килмәй башланы, ә минең уны күкрәгемә ҡыҫып һөйгөм килә бик тә. Шуға күрә мин балалар беҙгә ҡунаҡҡа килгәндә бөтөнләй тартмаҫҡа тырышам. Бәлки, ташлап та ҡуйырмын әле. Ләкин бөтә тәмәкеселәрҙең дә минеке кеүек сәскә шикелле ейәнсәрҙәре юҡ бит, улар ни эшләр?

**(Дауамы 2-се биттә).**

ТУҠТА, МӘЛ!



✓ ***Беҙҙең милләт алдындағы бурыс шул уҡ ата-әсә алдындағы бурыс менән типә-тиң. Ә ата-әсәне бер ваҡытта ла икенсегә алыштырып булмай. Рухһыҙҙар китер, рухлылар ҡалыр. Милләтебеҙ иң ныҡ рухлыларҙан тупланыр.***



ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *РФ һаулыҡ һаҡлау һәм социаль үҫеш министрлығы "Халыҡ сәләмәтлеген тәмәке тартыу әҙемтәләренән һаҡлау тураһында" закон проектын ҡарауға тәҡдим итте. Ә һеҙ тәмәкенән ҡотолоу юлын нимәлә күрәһегеҙ?*

**(Дауамы. Башы 1-се биттә).**

***Мәхмүзә ҒӘЙНУЛЛИНА, медицина фәндәре докторы, профессор, БР Президенты эргәһендәге Йәмәғәт палатаһы ағзаһы:*** "Халыҡ сәләмәтлеген тәмәке тартыу әҙемтәләренән һаҡлау тураһында" закон проектын, һис һүҙһеҙ, хуплайым. Тик бына беҙ күпме генә закон өҫтөнә закон ҡабул итһәк тә, уның тәүгеләре эшләмәй икән - файҙаһы икеле. Тәмәке тартыуҙы, никотинға бәйлелек, тип, сиргә япһарырға итәләр. Был бер ҙә улай түгел. Тураһын әйткәндә, ул - кешенең бәйелһеҙлеге, культураһыҙлығы. Алкоголизмды ла шулай "сир"гә әйләндерҙеләр. Кешенең үҙенән тора был алама ғәҙәттәрҙән алыҫ булыу йә иһә арыныу. Ихтыяр, теләк кәрәк. Кешенең кешелек статусы бар икән, уны бер ниндәй алама ғәҙәттәргә ылыҡтырыу мөмкин түгел. Бына һеҙ берәй ваҡыт юрый ғына медицина университеты бинаһы янынан үтегеҙ әле: аҡ халат кейгән егеттәр һәм ҡыҙҙар төркөм-төркөм өймәкләшеп тәтәтеп торалар тәнәфестә. Тәмәке тартыу никотинға бәйлелек сире булһа, буласаҡ табиптар уға тотонор инеме ни?

Ә бына тартыуҙың әҙемтәһе - сир тиһәң дә сир! Ошо һандарға ғына иғтибар итегеҙ әле: 2009 йылғы мәғлүмәттәр буйынса, илдәге 40,6 процент граждан, йәғни 59 миллион кеше, тәмәке тарта. Рәсәйҙә йәшәгән ирҙәрҙең 67 проценты, ҡатын-ҡыҙҙарҙың 21,7 проценты даими көйрәтә. Шуларҙың яртыһы тәбиғи ғүмеренән 7-14 йылға аҙыраҡ йәшәй һәм ваҡытынан алда донъя менән хушлаша. Ғөмүмән, Рәсәйҙә йыл һайын 400 меңләп кеше тәмәке тартыу әҙемтәләренән үлә. Үкенескә ҡаршы, быңдай алама ғәҙәт ҡорбандары һәр ғаиләлә тип әйтерлек бар. Ғаиләндә булмаһа, күршеләрә тәмәкесе һулар һауаңды боҙоп, тын алырға ирек бирмәй. Ә быңдай ағыуланыу күберәк хәүеф тыуҙыра. Шуға күрә, тәмәке ысына ҡаршы бөтәбеҙгә бер булып көрәшергә кәрәк. Тыйыу саралары ғына етмәй, урыҫ мәкәленддәгесә, тыйылған емеш татлы була, тиҙәрме әле? Йәштәр араһында, айырыуса уҡыу йорттары, бигерәк тә мәктәптәрҙә тәмәке тартыуҙың әҙемтәләре тураһында тәрбиә һәм аңлатыу эштәре, профилактика алып барырға кәрәк, тик уны күңелһеҙ лекция, өгөтнәсихәткә әйләндермәй, үҙенсәлекле юлдарын, төрлө ысулдарын эҙләргә тейешбеҙ.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА яҙып алды.**

ИШАРА

# РУХҺЫҘҘАР КИТЕР,

## рухлылар ҡалыр

**Бер танышымдың ике улы үҫеп килә. Әсә бер саҡ көлә-көлә һөйләп торғайны: "Ғаиләбеҙҙә берәй эш боҙһалар, гел кесе улымды ғәйепләйҙәр, - тигәйне ул.- Быны һиҙеп ҡалдым да, хәлде төҙәтергә булдым. Нисек итеп? Ҡырҡа әйтһәң, һүҙең үтмәҫкә мөмкин. Ишаралап ҡына: "Әлдә кескәй Морат бар әле беҙҙең ғаиләлә. Бөтә ғәйепте уға тағырға була. Бәләкәй булғас, ул үҙен яҡлай алмай шул..." тигән булдым. Шунан башлап Моратҡа мөнәсәбәт үҙгәрҙе шулай ҙа..."**

Бына Әхмәр Ғүмәр-Үтәбайҙың "Йәшерен яуҙы... юҡҡа һанама" мәҡәләһендәге фекерҙе дауам итеп, Ишмырҙа Ташбулатов (№34,2011) та йәшерен яуҙың бер төрө тураһында яҙып сыҡты. Уны уҡығас, был хәлдә кемде ғәйепләргә, тигән уй килде башҡа. Әлбиттә, һәр ваҡыттағыса, ҡыҙ балаларҙы ғәйепләйбеҙ инде. Ниңә төрлө милләт егеттәренә кейәүгә сығалар һуң улар?

Күренекле генә бер яҙыусы бер тел мәрендә, әсенеп: "Ике улым да төрлө милләт ҡыҙҙарын әйәрттеләр ҙә ҡайттылар", - тип һөйләгәйне. Яҙыусы кеше был күренешкә ҡаршы тора, балаһына ҡатнаш никахтың беҙҙең милләт өсөн хәүефле булыуын аңлата алмағас, ябай ата-әсәләр ни ҡылһын инде был осраҡта? Хәйер, ул күренекле әҙәбиәт, сәнғәт әһелдәре, шулай уҡ башҡа шәхестәребеҙ ҙә күбеһе бөтән милләт вәкиле менән ғаилә ҡорған бит. Мәҫәлән, республикабыҙҙа кино сәнғәтен күтәреүсе режиссер булып танылған Әмир Абдразаҡовтың донъя кимәлендә танылған улдары ла башҡорт ҡыҙҙарын үҙ итмәй, сит милләт ҡыҙҙары менән ғаилә ҡорған, сит милләткә балалар үҫтерә. Ғөмүмән, сит милләткә өйләнә йә кейәүгә сыға икән, беҙҙең башҡорт шул милләтте ишәйтә шул - бына шуныһы ҡыйын хәл.

Эйе, ҡыҙҙар бит яулап алыусы түгел. Кем һәйбәт мөнәсәбәттә, кем уға хөрмәт менән ҡарай, шуға тормошҡа сыға ла ҡуя.Үҙебеҙҙең егеттәрҙең ҡыҙҙарыбыҙҙы баһалап етмәүен күп тапҡырҙар һөйләнек инде. Уның ҡарауы, башҡорт ҡыҙҙарының матурлығын, тыйнаҡлығын күп милләт егеттәре баһалай. Атай-әсәй ни ҡылһын, яҙмышы шулдыр, ти ҙә ҡуя инде. Йә булмаһа, мөхәббәте шулдыр, ти. Миңә ҡалһа, бөгөнгө йәштәр ысын мөхәббәт тигән хисте лә белмәйҙер һымаҡ. Улар бит хәҙер " аҙғын теләк" тигәндә алға сығарып өйләнә. Бер күренекле яҙыусынан йәш журналист: "Нисек ғаилә ҡороп йәшәй башланығыҙ? Шул саҡтағы хис-тойғоларығыҙ тураһында һөйләгеҙсе?"- тигән һорау бирҙе. Ә яҙыусы: "Исемә килгәндә, мин өйләнгәйнем инде... "- тип яуап бирҙе. Бына ошондай бит хәҙергеләрҙең "мөхәббәте". Күп ҡатнаш никахтар ҙа ошолай тыуалыр тип уйлайым мин. Мин хаҡлы булмаһам, зинһар, ғәфү итһендәр...

...Бер ҡыҙ бала өләсәһенә: "Һин ниңә миңә тик башҡорт йырҙарын ғына өйрәтәһең?" - тигән һорау бирә. Ә өләсәһе уға: "Ҡартайырһың, йырларһың..."- тип яуаплай. Мин был яуаптан шуны аңлайым: эш ҡартайыуҙа ғына түгел, ә күңелендә башҡорт моңо булған быуын үҫтереүҙә. Ә бит бөгөн күптәр балалары күңеленә башҡорт моңон һеңдермәй, башҡортлоғо менән һоҡланырға, уның өсөн һыҙланырға өйрәтмәй. Йәш кешенең күңелендә ошондай һоҡланыу, һыҙланыу, һағыныу хисе булһа, ул сит-ят илдәрҙә, сит-яттар араһында ла тыуған илен, телен, моңон һағыныр ҙа, ул хистәрҙе баяғы "аҙғын теләк"тәрҙән дә, сит милләт вәкиленә булған мөхәббәттән дә өҫтөн ҡуйыр. Сөнки беҙҙең милләт алдындағы бурыс шул уҡ ата-әсә алдындағы бурыс менән типә-тиң. Ә ата-әсәне бер ваҡытта ла икенсегә алыштырып булмай. Шулай ҙа был мәсьәләлә әллә ни ҡайғырырға, бошонорға кәрәкмәй: рухһыҙҙар китер, рухлылар ҡалыр. Милләтебеҙ иң ныҡ рухлыларҙан тупланыр. Ситкә китеүселәргә: "Һағынырһың әле, һарғайырһың, һабағынан тәшкән гөл кеүек..." - тип йырларға ғына ҡала...

**Фәүзиә ЯХИНА.**

КЕМ АЛЫҠ!

# БҮЛӘККӘ - "ДИНИ КАЛЕНДАРЬ"

**Мөхтәрәм милләттәшебеҙ! Бына тағы һине лә, баҫмабыҙҙы ла, ошо баҫманы ижад итеүселәрҙе лә һынау мәле етте. Гәзитебеҙҙе уҡыусы милләттәш туған телдәге баҫманы ниндәй дәрәжәлә һанлай һәм баһалай? Уның үҙ милләтенә, туған теленә ҡарата аң, рух, ихтирамы ниндәй кимәлдә? Баҫмабыҙҙағы һүҙ кеүәһе, фекер үткерлеге уның күңелен арбай, сәмен һәм ғәмен уята алырлыҡмы?**

Бына шулай, **2012 йылдың беренсе яртыһына гәзитебеҙгә яҙылыу башланыуын иғлан итеп,** уҡыусыбыҙ һәм үҙебеҙ алдына ошо һорауҙарҙы ҡуйабыҙ. Һәр ваҡыттағыса, уҡыусыны ылыҡтырыр вәғәҙәләребеҙ ҙә бар: күп һорауҙарығыҙға яуап бирер, ниндәйҙер ауырлыҡтарға юлыҡҡанда уларҙы еңер сара, борсолоуҙар мәлендә - йән тыныслығы, күңел төшөнкөлөгө булғанда - рухландырыр, сәмләндерер һүҙ әйтер матур йөкмәткеле баҫма аласаҡһығыҙ ҡулдарығыҙға.

**Бынан тыш**, әлбиттә, оптимистар өсөн **бүләктәр ҙә** булмай ҡалмаясаҡ. Оптимистар өсөн, тибеҙ, сөнки гәзитебеҙгә яҙылыу тураһындағы квитанцияларҙың "Мин барыбер бүләкһеҙ ҡалмайым!" тигән кешеләрҙән генә килеүен яҡшы беләбеҙ. "Киске Өфө"нө уҡыусыларҙың барыһының да оптимист булыуын теләйбеҙ, уларҙың ошондай сифаттарын уятыуҙы маҡсат итеп ҡуйабыҙ. Ә **сентябрь айында гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргән 30 кешегә 2012 йыл өсөн "Дини календарь" ебәрәбеҙ.**

**Әйткәндәй**, кемде бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә **тыуған көндәрен** хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

**"Киске Өфө" - бүләгем" акцияһы ла дауам итә.** Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, ата-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

**Шулай итеп**, 2012 йылдың тәүге яртыһына гәзитебеҙҙең 50665 индекслыһына **348 һум 24 тингә**, 50673 индекслыһына (юридик шәхестәр өсөн) **378 һум 24 тингә** яҙыла алаһығыҙ.

Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**. Беҙҙең блог: **blog. kiskeufa.ru**.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостанда урманды законһыҙ ҡырҡыуға ҡаршы көрәшеү маҡсатында өсөнсө йыл рәттән урман фондын барлау үткәрелә. Быға тиклем дүрт урман хужалығында тикшереү уҙған. Әлеге ваҡытта Баймаҡ, Маҡар, Туймазы урман хужалыҡтарында барлау башланырға тора. Белгестәргә 655 мең гектар майҙанда мониторинг үткәрергә кәрәк буласаҡ.

✓"Тамыр" телеканалы программалары яңыраҡ Мәскәүҙә үткән "Включайся!" халыҡ-ара балалар телевидениеһы фестивалендә билдәләнгән. "Уҡытыусым менән ғорурланам" махсус программаһы "Детский" каналының махсус бүләгенә лайыҡ булған, режиссер Ләйсән Мәжитова менән журналист Элина Ханнанованың мөмкинлектәре сикләнгән ҡыҙыҡай тураһындағы эше Берләшкән Милләттәр Ойошмаһының балалар фонды тарафынан билдәләнгән "Хаҡым бар" номинацияһында иң яҡшыһы тип танылған.

✓5 сентябрҙән Башҡортостан юлдаш телевидениеһындағы "Тау-тау хәбәр" балалар мәғлүмәт хеҙмәте тура эфирҙа сыға башланы. Көн һайын көндөҙгө сәғәт 4-се 15 минутта республика, ил һәм донъя буйынса мәғариф өлкәһендәге иң һуңғы яңылыҡтарҙы ишетергә мөмкин.

✓"Берҙәм Рәсәй"ҙәр Ишембай ҡалаһына балалар ҡаласығы бүләк итте. Унда асылған "Берҙәм Рәсәй" көндәре барышында балалар ҡаласығы төҙөүгә 100 мең һумлыҡ сертификат тапшырылды.

✓Стәрлетамаҡ районының Рощинский дөйөм урта белем биреү мәктәбе башҡорт теле уҡытыусыһы Гүзәл Сәлимйәнова Рәсәй Федерацияһы Президенты Дмитрий Медведевтың рәхмәт һүҙҙәренә лайыҡ булды. Гүзәл Фәрит ҡыҙының исеме республикала яҡшы таныш. Ул былтыр "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы" төбәк-ара конкурсында гран-при яулағайны.

✓Рәсәй Хөкүмәте Премьер-министры Владимир Путин ауыл ерендә эшләргә телгән медицина хеҙмәткәрҙәре өсөн 1-әр миллион һум күләмендә аҡса бүлергә тәҡдим иткән. Әммә шундай шарт менән: врач ауылда биш йылдан да кәм эшләмәгән осраҡта ғына быңдай дәртләндереү сараһынан файҙалана аласаҡ. Премьер-министр Хөкүмәттең льготаға эйә булыусы граждандарға дарыуҙар һатып алыуға 2,3 миллиард һум аҡса бүленеүе тураһында хәбәр иткән.

*МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ*

# ИРҘЕ ИР ИТКӘН ДӘ,

## хур иткән дә - ҡатын...

**Гәзиттең 27-се һанында "Йәшерен яуҙы юҡҡа һанама" тигән мәҡәлә баҫылғандан һуң унда күтәрелгән мәсьәләгә битараф булмаған уҡыусыларыбыҙҙың ҡайһылары үҙ фекерҙәрен телефон аша йә осрашҡанда әйтте, ҡайһы берҙәре яҙма рәүештә белдерҙе. Гәзиттең 34-се һанында сығыш яһаусы Ишмырҙа Ташбулатов, мәҫәлән, үҙебеҙгә ҡаршы үҙебеҙ яу булыуыбыҙҙы йәшерен яуға һанап, ҡыҙҙарыбыҙҙың сит милләт вәкилдәренә тормошҡа сығыуын, шул арҡала уларҙан тыуған балаларҙың икенсе милләт кешеләре булып китеүенә әсенә. Был хәлде автор "Йәшерен яу төрөнөң иң-иң ҡурҡынысы" тип атай. Уны һәм башҡа күптәрҙе һүҙ ҡуҙғатырға сәбәпсе булараҡ, мин дә был мәсьәләгә күптән битараф түгелмен. Халҡыбыҙҙағы "Ирҙе ир иткән дә, хур иткән дә - ҡатын" тигән мәҡәлде исҡә төшөргәс, мәсьәләгә киңерәк планда ҡарау мөмкинлеге барлыҡҡа килде.**

Бынан бер нисә йыл элек республикабыҙҙың бер районында оҙайлы командировкала булғанда яуаплы урында эшләүсе бер татар милләтле ханым беҙҙе ауылдар буйлап оҙатып йөрөнө. Мине аптыратҡаны шул булды: был ҡатын яйы сыҡҡан һайын ирен иҫенә төшөрөп, хәләлен урынлы-урынһыҙға беҙҙең алда күккә күтәреп маҡтар булып китте. Бының өсөн ниндәй генә эпитеттар ҡулланманы ул: "Бынамын тигән кеше, мыҡты кәүҙәле, көслө рухлы, тоғро дуҫ, өлгөлө атай, аҡыллы, сабыр, егәрле, тоғро, эсмәй-тартмай, кеше алдында үҙен әҙәпле тота, күҙемә генә ҡарап, "йәнем", тип өҙөләп кенә тора," һ.б. Шуларҙы тыңлап йөрөй торғас, беҙҙең күҙ алдында был бәхетле ҡатындың һәр яҡтан килгән мыҡты, һыпы, идеаль ире образы барлыҡҡа килде. Беҙҙең менән бергә йөрөүсе ҡыҙҙар хатта ханымдың иренә һоҡланыуын белдереп, үҙҙәренең ирен хурлап өлгөрҙө. Командировкабыҙҙың һуңғы көнөндә төпкөлдәге юлһыҙ ауылға барып, осрашыу һуң ғына тамамланып, район үҙәгенә ашхана ябылыуға ғына ҡайтып еттек. Киске ашты ашарға башҡа урын ҡалмағанлыҡтан, ханым беҙҙе үҙ өйөнә ҡунаҡҡа алып ҡайтты. Унда нимә күрҙек, тиһегеҙме? Эйе, ҡатындың өс көн буйына теләнән төшөрмәй маҡтаған ире ул тыуҙырған образдың ҡапма-ҡаршыһы булып сыҡты.

Был хәлгә башҡалар нисек ҡарағандыр, миндә был ҡатынға ҡарата һоҡланыу тойғоһо барлыҡҡа килде. Ҡайһылай зирәк, сабыр, оптимист һәм баланларының, улай ғына ла түгел, милләтенең киләсәген хәстәрләй белеүсе алтын аҡыллы ҡатын ул. Ә бит уның урынында башҡорт ҡатыны булһа, эйе, иренең булдыҡһыҙлығы, эсеүе, көнләшеүе һәм башҡа кәмселектәре тураһында һөйләп, өс көн буйына беҙҙең ҡолаҡ итен ашар ине. Беҙҙең алда һөйләмәһә лә, туғандары, үҙе йөшәгән мөхиттә был хәл барыбер күҙәтелер ине. Үкенескә ҡаршы, беҙ был хәлгә өйрәнеп тә бөткәнбеҙ инде. Был хаҡта һөйләүсегә лә, хәбәр предметына ла ҡул һелтәп кенә ҡарайбыҙ.

"Ирен яманлап һөйләгән, башҡалар алдында кәмһеткән ҡатын үҙ балаларының юлын яба", ти философтар. Шулайҙыр, кәмһетелгән ирҙең балаларына кем ышанһын да, кем уларға илтифат итһен инде? Киләсәктә уның балаларына



яҡшы хеҙмәт хаҡлы эш урыны ла, карьера баҫҡыстарынан үрләү бәхете лә тәтемәйәсәк һәм был хәл милләттең дөйөм йәшәйешендә сағыласаҡ. Тимәк, ирен башҡалар алдында яманлап һөйләгән, кәмһеткән ҡатын үҙ балаларына ғына түгел, милләтенә лә юлды яба тигән һүҙ. "Ирен хурлаған - илен хурлаған" тигән әйтем дә юҡҡа ғына әйтелмәгән.

Ҡыҙҙарыбыҙҙың инглиз, төрөк, немец, йәһүд егеттәренә кейәүгә сығыуы, уларҙың башҡаларға ҡол булып йәшәүе хаҡында борсолоп яҙыусы Ишмырҙа Ташбулатов был күренештең сәбәптәрен рухи тәрбиә етешмәүҙә, быуындар сылбыры өҙөләүҙә, йола-традициялар онотолоуҙа күрһә, мин уларҙы тағы ла төпкәрәк төшөп эҙләргә тәҡдим итер инем. Минеңсә, бында төп сәбәп ҡыҙ-ҡатындарыбыҙҙың башта телгә алған татар ҡатыны кеүек ир затына ир итеп ҡарай белмәүендәлер һәм ошо хәлдең милләтебеҙ тормошоноң йәмһеҙ бер күренешенә әйләнеүендәлер, тием. Мәсьәләнең айышы бында тиҙ генә, хатта өс быуын сылбырында ла аңлашыла. Мәҫәлән, беҙҙең өләсәйҙәр һәм ҡартәсәйҙәр бер ваҡытта ла беҙҙең олатайҙарҙы һәм ҡартатайҙарҙы (башҡа кешеләр әйтеүенсә, насар холоҡтары күп булһа ла) кәмләп-хурлап һөйләмәне һәм шул арҡала беҙҙең әсәйҙәр тормош юлдашы итеп беҙҙең башҡорт атайҙарҙы һайланы. "Һайланы", тип осраҡлы ғына әйтмәнем, беҙ, ирҙәр, кәләштәрҙе кәпәс менән һуғып һайлап алабыҙ, тип әйтһәк тә, артта тәҡдим яһаған хәлдә лә кейәүгә сығыу-сыҡмау мәсьәләһен барыбер ҡыҙҙар үҙҙәре хәл итә. Ҡабатлап әйтәм: беҙ тәҡдим генә яһайбыҙ. Тимәк, океан аръяғы егеттәренә кейәүгә сығыуҙы ҡыҙҙарыбыҙ үҙҙәре хәл иткән. Уларҙың был аҙымға барыуында әлеге лә баяғы уларҙың әсәләре тыуҙырған башҡорт иренең кире образы булышлыҡ иткән.

Ошо урында мәғлүмәтле, тарихты яҡшы белгән башҡорт ҡыҙы: "Һеҙ үҙегеҙ ир була белегеҙ, ана, беҙҙең ата-олатайҙар нисек көслө, егәрле, донъя көтөргә дәртле булған", - тип, тарихи юҫыкта дәғүәһен дә белдерер. Ундай ҡыҙға мин урыҫ яҙыусыһы документаль рәүештә ысынбарлыҡты сағылдырып яҙып ҡалдырған "Йәнтүрә хикәйә"һен тағы ла бер тапҡыр уҡып сығырға кәңәш итер инем. Унда ваҡиғалар, белеүебеҙсә, бынан ике быуат элек 1812 йылғы Ватан һуғышында бара. Йәнтүрәнең ҡатыны яуҙағы иренең артынан эйәреп йөрөй, уның тамағына хәстәрләй, өҫ-башын ҡарап тота, өҫтәүенә, дауалай, етмәһә, әсиргә эләккәс, дошман ҡулынан ҡотҡара. Әгәр ҙә ҡатыны ошоларҙы башҡармайынса, ирен хурлап ултырһа, валлаһи, Йәнтүрәнең дошманға тип күтәрелгән ҡылысы ергә төшөп китер ине. Кем белә, бәлки, "Ирҙе ир иткән дә, хур иткән дә - ҡатын" әйтеме тап ошондай мәлдә барлыҡҡа килгәндер.

Ун йыллап элек ҡыҙҙар һәм егеттәр араһында ошо темаға бәхәс ҡубып, ҡыҙҙарыбыҙ тағы ла "йүнле башҡорт егеттәре" хаҡында дәғүәләрен белдергәс, Дамир Шәрәфетдиновː "Үҙе йүнһеҙ булып кешегә генә башҡалар йүнһеҙ булып күренә, үҙең кешегә яҡшы мөнәсәбәттә булһаң, ундай мөнәсәбәт башҡа кешелә лә һиңә ҡарата тәрбиәләнә", - тип әйтеп, ҡыҙҙарыбыҙҙың ауыҙын япҡайны.

Хөрмәтле ҡыҙ-ҡатындар мине ғәфү итһен, әммә башҡорт ир-атының кире образын тыуҙырып, уларҙан кейәүгә сығыр йәшкә еткән ҡыҙҙарыбыҙҙы биҙҙереүсе лә улар үҙҙәре. Шуға күрә лә, Ишмырҙа Ташбулатовҡа ла улар ҡыҙҙарының океан аръяғы егеттәренә кейәүгә сығыуы менән ауыҙ һыуҙары ҡороп маҡтанып ултырғандыр инде. Мин ундай әсәйҙәрҙе һәм өләсәйҙәрҙе башҡалар иҫәбенә йәшәүсе "милләт әрәмтамаҡтары" тип атар инем. Эйе, улар йәй һайын балалары йәшәгән океан аръяғына йә башҡа дингеҙ буйына ҡунаҡҡа йөрөйәсәк, ял итәсәк һәм ундағы кисерештәре, күргәндәре хаҡында тағы ла бер ҡунаҡта маҡтанып һөйләнеп ултырасаҡ. Әммә милли тамырҙары, шәжәрәләре үҙҙәре донъялыҡтан китеү менән өҙөләсәк һәм юҡоласаҡ. Кеше өсөн ошонан да ҙурыраҡ фажиғә булыуы мөмкинме? Башҡорт кешеһе өсөн бигерәк тә.

"Ниңә милләт өсөн бар яуаплылыҡты бер ҡатын-ҡыҙ өҫтөнә генә һалмаҡсы булаһың?" тип әйтер берәү. Хөрмәтлем, һуң ир-атты ла бит ҡатын-ҡыҙ донъяға тыуҙыра, шул уҡ ваҡытта уның күңелен үҫтереп, ил ағаһы дәрәжәһенә күтәреп ир итеүсе лә, күңелен төшөрөп, мир алдында көлкөгә ҡалдырып хур итеүсе лә шул уҡ ҡатын-ҡыҙ бит. Һәм "Ирҙе ир иткән дә, хур иткән дә - ҡатын" тигән әйтемде мин түгел, халыҡ әйткән. Халыҡ әйтһә, хаҡ әйтә. Уның әйткәнен беҙҙең ғалимдарыбыҙ ҙа раҫлай. Атаҡлы ғалимыбыҙ, антрополог Ринат Йосопов меңәр-меңәр йыл буйына ер аҫтында ятҡан меңәр-меңәр кеше һөлдәләрен, баш һөйәктәрен тикшереп, сенсацияға торошло ғилми асыш яһаны: башҡорт милләтенең генетик коды, иң боронғо архитибы ҡатын-ҡыҙҙарға һаҡлана, ә ирҙәрҙең генетик коды быуат һайын үҙгәреп тороусан...

Ғалимдың был ғилми асышын "Ирҙе ир иткән дә, хур иткән дә - ҡатын" тигән мәҡәләйтемгә яраштырып әйткәндә, уның яңы формаһы шулайыраҡ яңғырар ине: "Милләтте милләт иткән дә, имгәк иткән дә - уның ҡатын-ҡыҙы".

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓1 сентябргә республикала пенсионерҙар һаны 1 миллион 58 мең тәшкил иткән. Уларҙың араһында 60-тан 74 йәшкә тиклемгеләр - 438 573, 75-тән 89 йәшкә тиклемгеләр - 226 820, 90 йәштә һәм унан да өлкәндәр 512 кеше. 1 августан республикалағы эшләп йөрөүсе 232 мең пенсионерҙың хеҙмәт пенсиялары күләме эш биреүсе тарафынан күсерелгән йәки пенсия тәғәйенләгәндә иҫәпкә алынмаған страховка иғәнәләрен күҙ уңында тотоп, ҡайтанан хисапланды.

✓Ишембай ҡалаһында гроссмейстер Денис Хисмәтуллин кубогына шахмат буйынса Башҡортостан Республикаһы беренселеге үтте. Сарала республиканың төрлө төбәгенән 1994 йылғы 160 егет һәм ҡыҙ ҡатнашты.

✓Төбәктә "2011-2013 йылдарға фермер хужалыҡтары базаһында ғаилә һөтсөлөк фермаларын үҫтереү" программаһы ғәмәлгә ашырыла башланы. Быйыл Башҡортостанда кәм тигәндә 50 ғаилә һөтсөлөк фермаһы барлыҡҡа киләсәк. Ведомство мәғлүмәттәренә ярашлы, был маҡсатҡа 300 миллион һум самаһы аҡса бүлеү планлаштырыла. Ауыл халҡы 175 ғариза биргән. Ғаилә фермалары хужалары Рәсәй Ауыл хужалығы банкынан йылына 13 процент менән һигеҙ йылға субсидияланған кредит аласаҡ. Республика бюджетынан иһә ҡормалдарға, токомло һәм тауар малы һатып алыуға субсидиялар биреләсәк. Бынан тыш, инженерлыҡ инфраструктураһын булдырыуға сығымдар ҙа ҡапланасаҡ. Уларҙы бер объектҡа 150 мең һумдан да кәмерәк булмаған суммаға муниципаль районлар өҫтәп финансларға тейеш.

✓Ҡаты ҡоролоҡ һәм мал аҙығы етешмәүе арҡаһында былтыр йәй республика халҡы шәхси ярҙамсы хужалыҡтарындағы малдар һанын ҡыҫҡартҡайны. Хәҙер юғалған позициялар ҡабаттан тергеҙелә. Бөтә төр категорияларҙағы хужалыҡтарҙа эре мал иҫәбе 1 миллион 384 мең башҡа еткән. Йыл башына ҡарата артым 6,5 процент тәшкил иткән. 1 августҡа Башҡортостанда 530,6 мең баш һыйыр, 861 мең һарыҡ һәм кәзә, 136 мең ат, 16485 мең ҡош-ҡорт иҫәпләнә.

✓**17 сентябрҙә 14 сәғәттә Ишембай районының Торатау буйында тәбиғәт ҡомартҡыларыбыҙ - шихандарҙы һаҡлауға арналған акция-сара була. Йәмәғәтселек ойошмалары вәкилдәре ҡатнашлығында үткән был сарала танылған ҡурайсы Роберт Юлдашев үҙенең ансамбле һәм Мәскәү ҡунаҡтары менән бергә сығыш яһаясаҡ.**

✓ Тәүге аҙымдарын ғына яһауға ҡарамаҫтан, Шамонино ауылы дөйөм белем биреү мәктәбе яңы уҡыу йылын бәләкәй генә уңыштар менән ҡаршылай. Бында белем сифаты ла насар түгел, тип раҫлай алабыҙ.



ҮӘТ, ШУЛАЙ!

## ТОРЛАҠ ТӨҘӨҮҘӘ - ИКЕНСЕ...

**Росстат 2011 йылдың тәүге яртыһы һөҙөмтәләре буйынса федераль төбәктәрҙәге социаль-иктисади хәл хаҡында мәғлүмәт баҫтырҙы.**

Торлаҡ йорт төҙөлөшө буйынса беҙҙең республика Волга буйы төбәктәре араһында икенсе урынды биләй. Ағымдағы йылдың тәүге яртыһында Башҡортостанда 781,8 мең квадрат метр торлаҡ төҙөлгән. Беҙҙән күберәк бары Татарстан ғына төҙөй, унда төҙөлгән торлаҡ күләме миллион квадраттан артып китә. Тик күп, тимәк, арзан тигәнде аңлатмай әле. Торлаҡҡа хаҡтар буйынса Башҡортостан өсөнсө урында. Республиканың тәүторлаҡ баҙарында квадрат метр уртаса 35,9 мең һум тора

Хаҡтарҙың тиҙ үҫеүенә күнегеп тә бөттөк шикелле. Ләкин беҙҙең республика Волга буйы федераль округы төбәктәре араһында хаҡ үҫеү буйынса ул тиклем үк насарҙар рәтендә түгел: 2011 йылдың алты айында күҙәтелгән тауар һәм хеҙмәт хаҡтары индексы 106,7 процент тәшкил итеп, рейтингта 14 урында. Хаҡ артыу буйынса лидер - Сыуаштан, унда инфляция 9 проценттан артып киткән.

Эш хаҡына килгәндә, Башҡортостанда хәлдәр ҡыуанырлыҡ түгел. Беренсе ярты йыллыҡта республикала уртаса эш хаҡы ни бары 17277,6 һум тәшкил иткән. Был күрһәткес буйынса Татарстан, Пермь крайы, Нижегородка һәм Һамар өлкәләренән ҡала бишенсе урында киләбеҙ. Шулай уҡ эш хаҡы түләүҙе тоткарлау буйынса ла беҙ алға тик Нижегородка өлкәһен генә сығарып, икенсе урында барабыҙ. Бөгөнгө көнгә эш хаҡы буйынса бурыс республикала 144 миллион һум тәшкил итә. Пенсия түләүҙәре менән дә хәл мөшкөл. Беренсе ярты йыллыҡта тәғәйенләнгән пенсияның уртаса күләме 7751,7 һум, ә Волга буйы федераль округы буйынса был һан 7829,1 һум тәшкил итә. Был күрһәткес буйынса Башҡортостан етенсе урында килә.

Ҡылынған енәйәттәр кимәле буйынса Башҡортостан беренселекте бирмәй. Росстат күрһәткестәре буйынса, ағымдағы йылдың тәүге яртыһында республикала 37350 енәйәт теркәлгән.

## АРТТАРАҠ ҠАЛҒАНБЫҘ

**Төбәк мәғлүмәт институты Рәсәйҙең төрлө субъекттарындағы йәшәү сифаты буйынса рейтинг баҫып сығарҙы.**

Тикшереү барышында, тәү сиратта, ошо төбәктә йәшәүселәрҙең "кеҫә ҡалынлығы", хәүефһеҙлек кимәле, төрлө хеҙмәттәрҙең үҫешкән булыуы, эш табыу мөмкинлеге, икенсе төбәктәрҙән килеүселәр һаны, шулай уҡ бер йәшкәсә балаларҙың сәләмәтлек торошо иҫәпкә алынған. Лидерлыҡты бер-нисә йыл Мәскәү ҡалаһы тотоп килә. Икенсе баҫҡысты Санкт-Петербург, өсөнсөнө - Ямал-Ненец автономлы округы биләй. Шулай уҡ исемлектең тәүге биш урынында Мәскәү өлкәһе һәм Татарстан. Башҡортостан Рәсәйҙең 82 субъекты араһында 28-се урында. Бер йыл элек беҙҙең республика был исемлектең - 19-сы, ә 2009 йылда 15-се урында ине.

Йәмәғәтселек фекере фонды тарафынан төрлө төбәктә үткәрелгән "үҙ төбәгеңдәге хәлдәр торошо менән ҡәнәғәт" халыҡ Белгород, Кемерово өлкәләре һәм Ямал-Ненец автоном округында йәшәй. Башҡортостан Ханты-Мансы автономлы округы, Татарстан һәм Силәбе өлкәһенән "ҡалышып", 13-сө урында килә.

БЕЛЕМ УСАҒЫ



# ТӘҮГЕ АҘЫМДАРЫ...

### өмөтлө күренә

**Өфө муниципаль районына ҡараған Шамонино ауылында быйыл Белем көнөнә үҙенең ишектәрен асҡайны инде был мәктәп. Уҡыуҙар башланғанда балаларҙың һаны 118 булһа, уҡыу йылы һуңында был һан 129-ға еткән. Әлбиттә, эш башлағанда ауырлыҡтар ҙа, бигерәк тә хоҡуҡи-норматив базаға ҡағылған проблемалар етерлек була. Тәүге айҙарҙа уҡытыусылар эш хаҡы ала алмай, бинала йылылыҡ та ваҡытында бирелмәй, әммә коллектив бер нигә ҡарамай тырышып эшләй, балалар ҙур теләк менән белем алырға йөрөй. Хәҙер барыһы ла тарих итеп һөйләргә генә ҡалған.**

Быйыл 1 сентябрҙә Шамонино дөйөм белем биреү мәктәбе ихатаһы таҡы ла балаларҙың шат тауыштарына күмелде, ата-әсәләрҙең сабыйҙары өсөн ҡыуанып балҡыған йөҙҙәренән түгелгән нурға күмелде. Был көндә белем усағы ишеген 200-ҙән ашыу бала, шул иҫәптән 34 беренсе синыф уҡыусыһы асып инде. Уларҙы быға тиклем баш ҡаланың лицей-гимназияларында эшләгән тәжрибәле уҡытыусылар коллективы ҡаршыланы. Уҡыусылар, нигеҙҙә, ике ауылдан йыйылған: 40-тан ашыу бала мәктәптәре ябылғандан һуң Шмидт ауылынан килгән. Күпселекте Шамонино ауылы балалары тәшкил итә.

- Яңы ғына асылған мәктәп булыуға, күберәк ойоштороу мәшәҡәттәре менән мәшғүл булыуыбыҙға ҡарамаҫтан, уҙған уҡыу йылында телгә алып һөйләр уныштарыбыҙ ҙа булды, - тип һөйләп үтте мәктәп директоры Рәшиҙә Әҙеһәм ҡыҙы Мостафина. - Балалар төрлө предметтар буйынса муниципаль кимәлдә үткән олимпиадаларҙа ҡатнашты. Шәүрә Илембәтова исемле уҡыусыбыҙ башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса районда беренсе урын алып, республика олимпиадаһына сығыу хоҡуғын яулаһа, Альмира Минлеханова рәсем буйынса район кимәлендә икенсе урынға лайыҡ булды.

Мәктәптә өҫтөнлөклө йүнәлештәрҙең береһе булып һәләтле балалар менән эшләү тора. Бөгөн Башҡортостан Мәғарифты үҫтереү институты менән берлектә тәжрибә башларға торабыҙ. Һәр уҡытыусы уға үҙенең автор эштәрен әҙерләй. Уҡытыусылар БИРО-ла "Һәләтле балалар менән тикшеренеү эштәрен ойоштороу" тигән программа буйынса ҡыҫҡа курстарҙа уҡыны. Әлбиттә, һәр бала индивидуаль ҡараш талап итә. Дәүләт мәғариф стандарттары ла бит, тәү сиратта, бала үҙе өйрәнергә, проблеманы үҙе күреп, уның өҫтөндә эшләргә тейешлекте күҙаллай.

Шамонино ауылында күпселек башҡорт ғаиләләре йәшәй һәм йәшәйәсәк икәнде иҫәпкә алып, беҙ мәктәптә башҡорт телен уҡытыу мәсьәләһе нисек ҡуйылыуы тураһында ла ҡыҙыҡһындыҡ. Былтыр, ысынлап та, уҡыусыларҙың контингентын, ата-әсәләрҙең телаген иҫәпкә алып, бында 1-се "а" башҡорт класы тыуған, унда бөтөн фәндәр ҙә башҡортса уҡытылған. Быйыл ул балалар 2-се "а" класына килгән һәм башҡортса уҡыуҙы дауам итәсәк. Ата-әсәләрҙең ғаризаһына ярашлы, башҡорт теле шулай уҡ икенсе, дүртенсе кластарҙа ла туған тел буларак уҡытылған. "Әммә быйыл 1-се класҡа килеүселәр өсөн башҡорт класы асыу мөмкинлеге булманы", ти Рәшиҙә Әҙеһәм ҡыҙы. Балалар етмәгәндән түгел, әлбиттә. Берҙән, балаһын башҡорт синыфында уҡытырға теләүсе ата-әсәләрҙең ғаризаһы әҙерәк булған, икенсенән, башланғыс класта уҡытырлыҡ юғары белемле, категориялы, бөтөн талаптарға ла тап килгән уҡытыусы юҡлығы ла был мәсьәләне хәл итеүгә ҡамасаулаған. Нисек кенә булмаһын, киләһе йылда был мәсьәлә ҡараласаҡ һәм ата-әсәләр теләһә, башҡорт класы асыу мөмкин буласаҡ икәнен әйтте мәктәп директоры.

Бына шулай, тәүге аҙымдарын ғына яһауға ҡарамаҫтан, Шамонино ауылы дөйөм белем биреү мәктәбе яңы уҡыу йылын бәләкәй генә уныштар менән ҡаршылаy. Бында белем сифаты ла насар түгел, тип раҫлай алабыҙ, сөнки быйыл 9-сы синыф уҡыусылары Дәүләт йомғаҡлау аттестацияһын тапшырған, уларҙың барыһы ла йыл дауамында алған баһаларын раҫлаған, ә бер уҡыусы хатта юғары баһа алған.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

ТӨРЛӨҺӨНӨН

## БЕР ЯҠЛЫ ХӘРӘКӘТ

**Өфөнөң үҙәк урамдарында бер яҡлы хәрәкәт бөгөн, 10 сентябрҙән эшләй башлай.**

Хәрәкәт үҙгәртелгән бөтә урамдарҙа ла ЮХХДИ постары бар. Тәүге биш көндә инспекторҙар водителдәргә киҫәтеү генә белдерәсәк, ә аҙаҡ юл хәрәкәте ҡағиҙәһен боҙған өсөн штраф һаласаҡ, тип белдерәләр ЮХХДИ-нан. Яңы юл хәрәкәтенә шәхси автомобиль хужаларына ғына түгел, маршрут автобустары һәм уларҙың пассажирҙарына ла күнегергә тура киләсәк. 37 автобустың маршруты үҙгәртелгән. Баш ҡала округы хакимиәтенең транспорт бүлегендә белдереүҙәренсә, Ленин урамының "Ҡунаҡхана йорто" ("Гостиный двор") яғындағы туҡталыштан тыш, барлыҡ йәмәғәт транспорты туҡталыштары ла үҙ урындарында ҡаласаҡ. Шулай уҡ Мостай Кәрим урамында яңы туҡталыш барлыҡҡа киләсәк.

## УРЛАЙҘАР

**Баш ҡала "тимер ат"тарҙы урлау өс тапҡырға артҡан. Был күңелһеҙ рейтингтың тәүге урынында элеккесә ВАЗ автомобилдәре.**

Йыл башынан алып республикала 560 автомобиль юғалған, шуларҙың 94-е әле булһа табылмаған. Республика ЮХХДИ-һында белдереүҙәренсә, һәр өсөнсө урланған машина баш ҡала йәшәүсегә тура килә, йәғни Өфөлә урланған 176 автомобилдең бары тик 136-һы ғына хужаһына кире ҡайтарылған. Былтырғы йыл менән сағыштырғанда автомобилдәр урлау 36 процентҡа артҡан.

Белгестәр белдереүенсә, уғрыларҙан һаҡланыуҙың бер генә юлы бар - автомобилгә сигнализация ҡуйыу. Статистика мәғлүмәттәренә ҡарағанда, сигнализация менән тәьмин ителгән автомобилдәр күпкә һирәгерәк урлана.

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Ял көндәрендә баш ҡалала бал йәрминкәһе үтә. Сараны баш ҡаланың Совет районы хакимиәте, Башҡортостан умартасылыҡ һәм апитерапия буйынса ғилми-тикшеренеү үҙәге ойоштора. Йәрминкәлә баш ҡала халҡына һәм ҡунаҡтарға сифатлы бал тәҡдим итәсәктәр. Башҡортостан умартасылыҡ һәм апитерапия буйынса ғилми-тикшеренеү үҙәге белгестәре йәрминкәгә килеүселәргә сифатлы бал һайлап алырға ярҙам итәсәк.

✓Башҡортостан Республикаһы мосолмандарының Диниә назараты ҡарамағындағы "Хәләл" стандарты буйынса комитет Өфөлә беренсе тапҡыр төбәк-ара хәләл продукция конкурс-дегустацияһы үткәрҙе. Конкурс рәсми рәүештә төбәк-ара тип иҫәпләнһә лә, ул халыҡ-ара конкурс булып сыҡты, сөнки Рәсәй етештереүселәре менән бер рәттән унда Ҡаҙағстан вәкилдәре лә ҡатнашты. Шулай уҡ Силәбе, Ырымбур, Һарытау, Белгород өлкәләре предприятиелары ла үҙ тауарҙарын тәҡдим итте.

✓Өфө ҡала округы хакимиәтенең һаулыҡ һаҡлау идаралығы сайтында трансплантология мәсьәләһе буйынса интернет-ҡабул итеү асылған. Граждандарҙың һорауҙарына РБ һаулыҡ һаҡлау министрлығының баш трансплантологы Илдар Ҡорбанғолов яуап бирә. Әйткәндәй, Башҡортостанда 2010 йылда бөйөр күсереп ултыртыу буйынса 211 операция эшләнгән, әле 550 кешегә шундай уҡ операция талап ителә.

✓Өфөлә йыл һайын үткәрелгән "Тәбиғәт һәм кеше" экологик акцияһы старт алды. Уның координаторҙары булып ҡаланың экология-биология үҙәктәре, шулай уҡ йәш натуралистар станциялары сығыш яһай. Сарала баш ҡалабыҙҙың бөтә белем биреү учреждениелары ла ҡатнаша.

✓Мәғариф һәм фән өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәт Рәсәй мосолмандары Үҙәк диниә назаратының Рәсәй Ислам университетына уҡытыу программаларын тормошҡа ашырыуға лицензия бирҙе. Был үҙ сиратында ислам университетына студенттарға юғары махсус уҡыу йортон тамамлау тураһындағы рәсми документтар бирергә рөхсәт итә. Шулай итеп, киләһе уҡыу йылынан Ислам университетында биш йыл белем алғандан һуң, уны тамамлаусылар дәүләт өлгөһөндәге диплом алыуға өлгәшәсәк.

*ИҠТИСАД ӘЛИФБАҺЫ*

# КРЕДИТЫҢДЫ ТҮЛӘҮ ЯЙЫН...

## банк менән бергә эҙлә

**Бөгөн кредит алмаған кеше һирәк. Кемделер сит илдәргә ял итергә барыу, кемделер автомобиль хужаһы булыу теләге, кемделер үҙ мөйөшөн булдырыу талабы кредит алырға этәрһә, кемдер сараһыҙлыҡтан бындай аҙымға бара. Кредит алғанда ғына рәхәт, ә ҙур-ҙур проценттар түләй башлағас, был рәхәтлек тиҙ онотола. Бер көн һуңлатмай, тиненә тиклем түләп барыуың күпкә хәйерлерәк икәнлеген был хәл менән осрашҡандар яҡшы аңлай.**



Банк өсөн клиентҡа кредит биреү - оҙайлы ваҡытҡа һуҙылған һәм ҙур финанс ресурстарҙы үҙ эсенә алған процесс. Шуға күрә кредитҡа аҡса алырға теләүсенең документтары һәм уның хаҡындағы мәғлүмәттәр ентекле тикшерелә. Бөгөнгө көндә потенциаль клиент хаҡындағы бар мәғлүмәтте кредит тарихы һөйләп бирә. Кредит тарихы - клиенттың элек алған займдары буйынса йөкләмәләрен үтәүе хаҡында (түләнеп бөткән йә иһә әлеге көндә булған) ентекле мәғлүмәт. Кредит тарихы банк тарафынан займ һораусының үтенесен ыңғай йә кире хәл итеүҙә ҙур роль уйнай. Үҙеңдең кредит тарихы хаҡында нисек белергә? Яуаптарҙы Башҡортостан Республикаһы Милли банкы белгестәре бирә.

**Шулай итеп, нимә ул кредит тарихы? Ул кредит тарихы субъектының (займ алыусы) займ буйынса килешеүенең үтәлешен характерлаусы мәғлүмәт. Кредит тарихы өс өлөштән тора:**

**1 бүлек** - "кредит тарихының тышлығы" - займ алыусы хаҡында тулы мәғлүмәт тупланмаһы (физик шәхестәргә исем-шәриф, шәхес танытмаһы тураһында мәғлүмәттәр; юридик шәхестәргә - ойошманың тулы һәм ҡыҫҡартылған исеме, ИНН, ЕГРН һәм башҡалар);

**2 бүлек** - "кредит тарихының төп өлөшө" - займ алыусы хаҡында өҫтәмә һәм уның йөкләмәләре хаҡында мәғлүмәт (алынған сумма, уның үтәләсәк ваҡыты, проценттар күләме һәм башҡалар);

**3 бүлек** - "кредит тарихының өҫтәмә (ябыҡ) бүлеге" - кредитор хаҡында мәғлүмәт.

Кредит тарихы займ алыусының документаль рәүештә иҫбатланған ризалығы булғанда ғына кредиттар тарихы бюроһына тапшырыла. Клиент бындай ризалыҡты банк менән кредит килешеүе төҙөгәндә бирә. Закон буйынса, кредит ойошмалары 10 көн эсендә үҙҙәрендә булған барлыҡ мәғлүмәтте, һис кәмендә, бер кредит тарихтары бюроһына тапшырырға тейеш. Кредит тарихы бюрола клиенттың кредит тарихында һуңғы мәғлүмәт үҙгәртелгәндән һуң 15 йыл дауамында һаҡлана. Ошо арауыҡ үткәндән һуң ул юҡҡа сығарыла. Үҙеңдең кредит тарихы тураһында мәғлүмәтте йылына бер тапҡыр бушлай алырға мөмкин. Әгәр ҙә клиент ошо уҡ мәғлүмәтте һорап тағы ла бер мөрәжәғәт итһә, хеҙмәт түләүле. Бөгөнгө көндә бындай хеҙмәт хаҡы 250-600 һум күләмендә.

Кредит тарихтары бюроһы (артабан КТБ) - Рәсәй Федерацияһы ҡануниәтенә ярашлы теркәлгән, коммерция нигеҙендә эшләүсе юридик шәхес. Ул кредит тарихтарын формалаштырыу, эшкәртеү һәм һаҡлау, шулай уҡ кредит отчеттарын тапшырыу кеүек хеҙмәттәрҙе башҡара. КТБ-ның дәүләт реестры бар. Ошо реестрға ингән КТБ-лар ғына кредит тарихтары менән эш итергә хоҡуҡлы. Кредит тарихтарының милли бюроһы (Национальное бюро кредитных историй - НБКИ), "Экспериан-Интерфакс" КТБ-һы, "Инфокредит" КТБ-һы, Волга буйы һәм Төньяҡ-көнбайыш бюролары кредиттар тарихы бюроһының иң ҙурҙары рәтенә инә. Рәсәй территорияһында урынлашҡан 33 КТБ-ла барлығы 37 миллион рәсәйле хаҡында 65 миллион тирәһе яҙма һаҡлана.

**Үҙеңдең кредит тарихы хаҡында нисек белергә була?**

Банк үҙенең потенциаль займ алыусыһы - шәхси кеше хаҡында йәки шәхси кеше үҙе кредит тарихын белеү хоҡуғына эйә. Бында уның ҡасан ниндәй кредит алыуы хаҡында, кредитты түләү нисек барған һәм бөгөнгө көнгә кредит тулыһынса түләп бөтөрөлөүе хаҡында тулы мәғлүмәт тупланған була. Бюроға мөрәжәғәт иткән кеше бары тик үҙе хаҡында ғына мәғлүмәт алырға мөмкин. Мәғлүмәтте кредит тарихы субъектына кредит бирелгән ваҡытта банк тарафынан беркетелгән код ярҙамында Рәсәй Банкы сайтында (www.cbr.ru) һәм кодты ҡулланмайынса кредит ойошмаһы, кредиттар тарихы бюроһы, телеграф бәйләнешен ҡулланыусы почта хеҙмәте йәки нотариус аша белергә мөмкин. Кредит тарихы коды физик шәхестең ниндәй ҙә булһа кредит ойошмаһына йәки КТБ-ға мөрәжәғәт иткәнендә лә беркетелергә мөмкин. Шулай уҡ кредит тарихы субъекты Рәсәй Банкы сайты аша үҙенең кодын үҙгәртеү йәки юҡ итеү, өҫтәмә код эшләтеү кеүек хеҙмәттәр менән дә ҡуллана ала. Кредит тарихы хаҡында мәғлүмәт алыу өсөн һеҙҙең кредит тарихығыҙ ниндәй КТБ-ла икәнлеген белеү мөһим. Быының өсөн Рәсәйҙең Үҙәк банкы янында ойошторолған Кредиттар тарихының үҙәк каталогына һорау ебәрергә кәрәк. Ниндәй кредит тарихы бюроһына ҡарағанлыҡты белгәс, шәхесте дәлилләүсе документ менән унда барып, мәғлүмәт алыу хаҡында ғариза яҙыла, яуап 10 көн эсендә бирелергә тейеш. Әгәр ҙә мәғлүмәт һораусыға шәхсән үҙенә ғариза биреү мөмкин булмаһа, бюроға ғаризаны нотариустан раҫлатып, заказлы хат менән ебәреү кәрәк. Бындай хатҡа ике аҙна эсендә яуап ебәрелергә тейеш.

Кредит буйынса бурысты ваҡытында түләмәүселәрҙең "ҡара исемлеге" барлығы, ысынында, уйҙырма тиһәң дә була, ләкин кредиттар тарихы бюроһы банктарға һәр займ һораусы хаҡында тулы мәғлүмәт бирә, ә клиентҡа кредит биреү йәки кире ҡағыуҙы банк үҙе хәл итә. Нисек булһа ла, банктар тик ышаныслы клиенттар менән генә эш итергә тырыша. Әгәр ҙә кредит алып та, ниндәйҙер сәбәптәр арҡаһында түләү мөмкинселеге булмаһа, иң мөһиме, банк хеҙмәткәрҙәренән ҡасып йөрөмәҫкә, ә тура банкка барып, хәлде аңлатып, белгестәр менән килеп тыуған хәлдән сығыу юлын эҙләргә кәрәк. Банкка ла бындай клиент артынан "йүгереүгә" ҡарағанда, үҙ аҡсаһын тулайым килеш алып бөтөргә тырышыу күпкә яҡшыраҡ.

Банк өсөн һәйбәт һәм ышаныслы клиент булыу бары тик кешенең үҙенән тора. Быының өсөн кредит алырҙан алда барыһын да үлсәп, кире һәм ыңғай яҡтарын ҡарап, кредиттың һәр шартын ентекле уҡып-тикшереп, түләү мөмкинлегегеҙҙе бар яҡлап ҡарап эш иткәндә бер ниндәй ауырлыҡтар тыумаясаҡ һәм бер ниндәй кредит тарихтары бюроһы ла һеҙҙең хаҡта кире мәғлүмәт бирмәйәсәк. Ләкин тормошта төрлө хәлдәр булырға мөмкин, шуға күрә бындай яуаплы аҙым эшләгәндәр үҙҙәрен генә түгел, яҡындарын да ниндәйҙер кимәлдә хәүефһеҙлеккә дусар итә икәнен онотмай эш итергә бурыслы.

**Наҙгөл САФИУЛЛИНА әҙерләне.**

# Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы

## Баш өйәнәге



**Баш өйәнәге (мигрень) йонсотһа, түбәндәге кәңәштәр ярҙам итер:**

❖ баш ауыртыуы башланғас та, эҫе итеп сәй яһап алығыҙ, әммә уны эсергә ашыҡмағыҙ. Иң тәүҙә сәйегеҙгә балғалаҡ тығып йылытығыҙ һәм уны баштың ҡайһы яғы ауыртһа, шул яғтағы танау япрағына ҡуйып тороғоҙ. Балғалаҡ һыуынһа, тағы йылытып алығыҙ. Хәҙер балғалаҡты ҡолаҡ йәберсәгенә ҡуйығыҙ. Ауыртыу үтһә, сәйҙе эсергә лә мөмкин;

❖ 1 балғалаҡ алма һеркәһе һәм 1 балғалаҡ балды бергә бутарға һәм көн һайын ашарға кәрәк. Был дауа ла баш өйәнәгенән ҡотҡара;

❖ бер тигеҙ күләмдә алынған алма һеркәһе менән һыуҙы уңайлы һауытҡа ҡойоғоҙ һәм утҡа ултыртығыҙ. Ҡатнашма ҡайнап, быу күтәрелә башлағас та, башығыҙҙы эйеп, 75 тапҡыр быу менән тын алығыҙ. Ғәҙәттә, бынан һуң баш ауыртыуы тиҙ генә үтеп китә йәки бер аҙ баҫыла;

❖ башығыҙға массаж эшләгеҙ. Бармаҡтар менән баш йыуғандағы кеүек хәрәкәттәр яһарға мөмкин. Шулай уҡ ағас тараҡ менән баш тиреһенә сикәләрҙән маңлайға һәм елкәгә табан массаж яһарға була;

❖ ҡайһы бер ризыҡтарҙан баш тартыу ҙа хәлегеҙҙе еңеләйтергә булышлыҡ итәсәк. Зыянлы аҙыҡтар исемлегенә шоколад, ҡәһүә, какао инә. Улар составындағы матдәләр ҡан тамырҙарын тарайтыу һәләтенә эйә. Тарайған тамырҙар кире киңәйгән саҡта баш ауыртыуына килтерә лә инде;

❖ көндөҙгө яҡтылыҡ лампаларынан баш тартығыҙ. Күҙгә күренмәһә лә, уларҙың даими емелдәп тороуы мейене арыта һәм баш ауыртыуын булдыра;

❖ арҡағыҙҙы гел төҙ тоторға тырышығыҙ. Башты аҫҡа эйеү, эйелеп йөрөү мускулдар көсөргәнешенә килтерә;

❖ төнөн юрған менән башығыҙҙы ҡаплап йоҡламағыҙ. Быының менән кислородты ябаһығыҙ һәм иртәнсәк баш ауыртыуы менән уянасаҡһығыҙ.

**Марат ИШМӨХӘМӘТОВ.**

*✓ Яҡшы ҡатындар күктән төшмәй, диңгеҙҙән сыҡмай, бәлки үҙ арабыҙҙа үҫәләр. Яҡшы ҡатындар етештереү өсөн яҡшы тәрбиә үә ҙур ижтиһадтар лазым. Был вазифалар иһә ирҙәр өҫтөндә.*

УЛЫМ, ҺИҢӘ ӘЙТӘМ...



# ЙӘШ КЕЙӘҮГӘ НӘСИХӘТТӘР

## Ир - ир урынында булһын

Яҡшы ҡатын дин һаҡлау йәһәтенән иренә иң беренсе ярҙамсы, әҙәмселекле, яҡшы күңелле, ти Фәхретдин. Уларҙы боҙоусылар һәм яман ҡатын исеме алыуҙарында сәбәпселәр, күбеһенсә, боҙоҡ һәм хаяһыҙ ирҙәрҙер. Яҡшы ҡатындар күктән төшмәй, диңгеҙҙән сыҡмай, бәлки үҙ арабыҙҙа үҫәләр. Яҡшы ҡатындар етештереү өсөн яҡшы тәрбиә үә ҙур ижтиһадтар лазым. Был вазифалар иһә ирҙәр өҫтөндә, тип дауам итеглә хеҙмәттә.

Ҡатындарҙы маҡтар өсөн дә, яманлар өсөн дә тема күп, ти Риза Фәхретдин. Ирҙәрҙең яҡшылары һәм уҫалдары булған кеүек, ҡатындарҙың да уҫалдары һәм яҡшылары булыуы мөмкин, ти ул һәм бер ғәрәп шағирының шиғырын ике телдә миҫалға килтерә. Эстәлеге былай: яҡшы тәрбиә бирмәһәң, ҡатын шайтан булыр, яҡшы тәрбиә бирелһә, ҡатын фәрештә булыр. Ҡатынды шелтә ҡылма, үҙеңде шелтә ҡыл.

Ҡатын шайтан булмаһын өсөн ни эшләргә һуң, ни тәрбиә ҡылырға? Ир-атҡа ошондай кәңәштәр бирелә: ҡатынды рыяһыҙ һөйөп, уны үҙеңә иң ышанyслы иптәш тип белергә, уны һәр төрлө ауырлыҡтарҙан һаҡларға, ел-ямғыр тейҙермәҫкә, йомшаҡ һөйләшергә, артыҡ уйын-көлкө итмәҫкә, яҡшы һәм файҙалы нәсихәт бирһә, ҡолаҡҡа алырға һәм ғәмәл ҡылырға, һүҙ йөрөтөүсе һәм ғәйбәт һөйләп йөрөүсе ҡатындар менән ҡатышыуҙан һаҡларға, иҡтисад менән эш ҡылыу тураһында, йәғни һаҡсыл булырға тәнбиһ итеп торорға, үҙ алдында уны кешеләргә маҡтамаҫҡа, һәр хәлдә, уның ҡаты мөғәмәләләренә түҙергә һәм шуның бәрәбәренә Аллаһы Тәғәләнән сауап өмөт ҡылырға. Быларҙың һәр беренән бигерәк ҡатындарға хәрәм һәм хәләл мәсьәләрен аңлатырға һәм хәләл-хәрәмгә сәбәп буласаҡ эштәрҙән хәбәрҙәр ҡылырға.

Хәҙистәрҙән күренеүенсә, ғаилә башлығына ошондай кәңәштәр бирелә:

1. Алланың ризалығы өсөн ғаилә ҡороп, мосолман үҙ ҡатынын үҙенә тиң шәхес итеп күрә, уны ихтирам итә, серҙәрен һаҡлай. Бындай мөнәсәбәт ғаиләгә сит-яттарҙың да ихтирамын арттыра.

2. Мосолман сит-ят алдында ҡатынының йөҙөн йыртмаҫ, ризаһыҙлығы булһа, тейешле ваҡытын, урынын һайлап ҡына әйтер.

3. Ҡатынының ата-әсәһенә, туғандарына тел тейҙермәҫ, низағлашып йөрөмәҫ, сөнки был рәүешле ул үҙ ҡатынын да оятлы итер, рәнйетер.

4. Ҡатыны, уның ата-әсәһе менән уртаҡ тел табып, шул уҡ ваҡытта үҙ ата-әсәһен дә хөрмәтләргә, уларҙы тыңларға, мөнәсәбәттәрҙә тигеҙлек табырға бурыслы.

Ир кеше тулыһы менән ҡатыны өсөн яуаплы, һәм ҡиәмәт көнөндә мосолман үҙ ҡылғандары өсөн генә түгел, ә ҡатыны, балалары ҡылғандар өсөн дә яуап тотасаҡ. Шуның өсөн дә ул ҡатынының, балаларының динле, тәҡүә булыуын хәстәрләйәсәк.

Ислам динендә ирле-ҡатынлылар тарафына булған һәммә нәсихәттәр бер нөктәгә барып терәлә - ғаилә хәлен төҙөк тотоу һәм күркәм рәүештә донъяла йәшәүҙе тәьмин итеү.

Һиңә лә, ҡәҙерле йәш ғаилә, ошо олуғ сифаттарға эйә булыу бәхете тейһен, ике донъяла ла йәннәт сихәттәрен насип итһен Хаҡ Тәғәләбеҙ.

Туғандарым, был тормош һабаҡтарын зат-зәүрәтегеҙгә, дуҫтарығыҙға, арҡадаштарығыҙға, күршеләрегеҙгә, таныш-тоноштарығыҙға ла тәҡдим итегеҙ. Улар ҙа уҡыһын. Был да һеҙҙең өсөн сауаптыр.

Хаҡ Тәғәлә юлында күркәм ғаилә ҡороп, Аллаһ Сөбханә Тәғәләнең дә, бәндәләрҙең дә ризалығын алып, бәхетле, иманлы тормош юлы уҙырға, тигеҙ ғүмер итергә насип булһын һеҙгә. Амин.

**Гүзәл СИТДИКОВА.**
**(Аҙағы).**

ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ

**Һуңғы йылдарҙа башҡорттоң бик тә архаик йөкмәткеле "Урал батыр" эпосына иғтибар бермә-бер артты. Уға бағышланған ғилми-ғәмәли конференциялар, мәктәп уҡыусылары араһында уны яттан һөйләү буйынса конкурстар үткәрелеп тора. Эпос тураһында ғалимдар китаптарын, төрлө йыйынтыҡтарҙа мәҡәләләрен баҫтыра, гәзит-журналдарҙа мәҡәләләр донъя күрә. Былар бөтәһе лә бик тә ҡыуанyслы күренештәр. Республикала әле эпосты ЮНЕСКО-ның Кешелектең телдән һөйләнгән матди булмаған мираҫы ҡомартҡылары исемлегенә индереү буйынса эш башланды. Был тәңгәлдәге эштәрҙе, яңылышмаһам, Рәсәй Фәндәр академияһының Тарих тел һәм әҙәбиәт институты алып бара. Әгәр килеп сыҡһа, бик тә хуп булыр ине. ЮНЕСКО-ның ошо исемлегенә инеү менән бәйле, был халыҡ-ара ойошманың талаптарына яраҡлаштырып тап килтереү өсөн "Урал батыр"ҙың версияларын, варианттарын булдырыу, уларҙы күбәйтеү зарурлығы кеүек хәбәрҙәр ишетелә башланы. Шул айҡанлы гәзит уҡыусылар менән үҙемдең ҡараштарымды уртаҡлашырға булдым.**

# ҮҘГӘРЕШҺЕҘ КИЛЕП ЕТКӘН,

## сөнки "Урал батыр"ҙы ҡанбабалар һаҡлаған

### Мифологияның үҙ ҡанундары...

Версиялар, варианттар тураһында һөйләгән авторҙар мифологияның барлыҡҡа килеүе, таралыуы, үҫеүе ҡанундарын әллә белмәй, әллә белһә лә уларҙы аша атлап үтергә теләй. Алдан уҡ әйтеп китергә кәрәк: "миф", "мифология" тураһында фәндә төрлө фараздар йәшәй. Әммә авторҙар, ә улар араһында бөтә донъяға билдәле ғалимдар бар, бөтәһе лә бер төптән мифтың фольклор түгеллеген таный һәм быны үҙҙәренең хеҙмәттәрендә гел генә "Миф - ул фольклор түгел. Ул бөтөнләй икенсе нәмә", тип һыҙыҡ өҫтөнә алып китә... Ә беҙҙә мифтарға әле булһа фольклор әҫәренә ҡараған кеүек ҡарайҙар. Дөрөҫөн әйткәндә, беҙҙә әле мифологтар юҡ. Профессор Фирҙәүес Хисамитдинованың Мәскәүҙә "Наука" нәшриәтендә нәшер ителгән "Мифологический словарь башкирского языка" исемле китабын иҫәпкә алмағанда, башҡорт мифологияһына арналған китап беҙҙә әлегә юҡ. Ә был авторҙың китабы - ул һүҙлек, унда башҡорт мифологияһының теоретик проблемалары күтәрелмәй. Автор телсе-ғалимә булараҡ, үҙенең бурысын һүҙлек төҙөүҙә генә күргәндер, тигән уй тыуа китапты уҡығандан һуң.

Шулай итеп, әлегә "Урал батыр" эпосын тик фольклор әҫәре булараҡ ҡына тикшерәләр. Бындай ҡараш эпостың бәҫен кәметә, уның башҡорттоң боронғо тормошондағы ролен тарайта. Башҡорт фәненә был эпосты фольклор әҫәре булараҡ ҡына түгел, ә мифологик йөкмәткеле архаик әҫәр булараҡ ҡарарға күптән ваҡыт. "Урал батыр"ға тик "эпос" тип ҡарағанға күрә, уның версиялары, варианттары булғандыр, тигән төптө хата ҡараш тыуа. Эйе, ҡайһы бер эпостарҙың варианттары, версиялары була. Был бәхәсһеҙ, быны ғалимдар күптән белә, күрә һәм таный. Миҫалдарҙы 18 томлыҡ "Башҡорт халыҡ ижады"на ингән эпостарҙан да килтерергә мөмкин. Был эпостарҙа башлыса тарихта һуңғараҡ булған ваҡиғалар һүрәтләнә. Улар һуңғараҡ дәүерҙәрҙе эсенә алған ваҡиғаларға бағышланған, унда тасуирланған ваҡиғаларға ҡарата төрлө ҡараштарҙы сағылдыра. Шул айҡанлы төрлө версиялар, варианттар тыуған.

### Донъя нисек барлыҡҡа килгән?

"Урал батыр" иһә бөтөнләй бүтән йөкмәткеле әҫәр. Уның эстәлеген атабабаларыбыҙҙың "башҡорт донъяһы һәм, ғөмүмән, "Донъя" (икенсе төрлө әйткәндә, "Йыһан") тигән нәмә нисек барлыҡҡа килгән?" тигән һорауға яуаптар эҙләүҙән килеп тыуған ҡараштар тәшкил итә.

Башҡорттарҙың боронғо ата-бабалары "донъя һәм уның өлөштәренең барлыҡҡа килеүе, үҫеше" тураһындағы ҡараштары үҙ сағылышын космогоник мифтарҙа тапҡан. Боронғо кешеләрҙең донъяуи ҡараштарын өйрәнеүсе күренекле Рәсәй ғалимы В. Н. Топоров яҙыуынса, мифопоэтик ҡараштарҙың төрлө формалары араһында космогоник мифтар һәм космологик күҙаллауҙар айырым һәм дә бик тә мөһим урын алып тора. Сөнки уларҙа әҙәм балаһы көн күргән, йәшәгән шарттарҙың һәм шуларға бәйле мифтарҙың тыуыуына, барлыҡҡа килеүенә сәбәп булыусы бөтә төр объекттар, йәғни Йыһандың арауыҡ һәм ваҡыт параметрҙары тасуирлана. Космологик ҡараштар, иң тәү сиратта, донъяның актуаль хәлен, йәғни уның структураһын һәм өлөштәренең бер-береһе менән бәйләнешен, функцияларын, ҡайһы саҡта уларҙың һан параметрҙарын (йыһанды тасуирлауҙың синхроник аспектын) сағылдыра. Ә космогоник мифтар иһә Йыһандың нисек барлыҡҡа килеүен аңлата (диахроник аспект). "Сәбәп һәм эҙемтә" бер-береһе менән нисек бәйләнһә, мифопоэтик ҡараштарҙа ла Йыһандың әлеге мәлдәге актуаль торошо уның барлыҡҡа килеүе менән бергә бәйләп аңлатыла. Сөнки донъяны тәшкил иткән төрлө өлөшсәләрҙең, һәм объекттарҙың бында ниндәй роль уйнағанын асыҡлау һәм аңлатыу, "Улар нисек барлыҡҡа килгән?" тигән һорауға яуап биреүгә, ошо өлөшсәләрҙең, объекттарҙың барыһының да барлыҡҡа килеү сылбырын яҙып сығыуға бәрәбәр (синхроник һәм диахроник яҙмаларҙың "операцион бәйләнеше"). Шулай итеп, донъя барлыҡҡа килеүҙең ошо ике күренеше бер үк нәмәне - Йыһан тыуғанда уны тәртипкә, ипкә килтереү процесында барлыҡҡа килгән бөтә нәмә уның составын тәшкил итә; шул уҡ ваҡытта Йыһан составына ингән бөтә нәмә уның үҫеүе мәлендә барлыҡҡа килгән, тигәнде үҙ эсенә ала.

"Донъя нисек барлыҡҡа килгән һәм уны кем яһаған? Донъя барлыҡҡа килгәнгә тиклем нимә булған?" тигән һорауҙы бирмәгән бер генә халыҡ та юҡтыр. Кешеләр был һорауҙы үҙҙәренә әлмисаҡтан биргән һәм донъяның мифологик моделендә был һорауҙар, йәғни космогония мәсьәләләре төп концептуаль мәлдәрҙең береһе булып тора. Е. М. Мелетинский билдәләүенсә, "хаостың космосҡа әүерелеүе мифологияның төп мәғәнәһен билдәләй, һәм бында космос, йәғни донъя - иң тәү мәлдәренән үк кешелек өсөн ҡәҙерле, әһәмиәтле булған билдәле бер ҡиммәттәрҙе, эстетик аспекттарҙы үҙ эсенә ала".

Мифолог ғалимдарҙың, философтарҙың әйтеүҙәренә ҡарағанда, халыҡты формалаштырыуҙа төрлө сығышлы ырыуҙар ҡатнашыуға ҡарамаҫтан, аныҡ бер халыҡтың мифологияһы теүәл бер бөтөн система булараҡ формалаша һәм ул системаны тәшкил иткән мифтар бер-береһе менән яраҡлаштырылған, килештерелгән була. Халыҡтың традицион донъяуи ҡараштарының нигеҙендә бер-береһенә ҡаршы килгән, бер-береһен инҡар иткән мифтар ята алмай. Өлөштәр бер бөтөн стиль һәм системаны тәшкил итеп, уның нигеҙендә тик бер генә космогоник миф ята, ти баяғы ғалимдар. Был космогоник ҡараш халыҡтың донъяуи ҡарашының, матди һәм рухи мәҙәниәтенең нигеҙе булып тора. Донъяның барлыҡҡа килеүе тураһындағы миф "донъяның нисек барлыҡҡа килгәнен, уның билдәле бер тәртиптәге структураһы, формаһы булыуын һөйләй".

### Сит-ят күҙҙән, һүҙҙән һаҡлау ниңә кәрәк?

Үҙ тарихи юлында ижад итеп, беҙҙең көндәргә тиклем еткерә алған ифрат бай һәм төрлө жанрҙарҙан торған фольклор материалдары башҡорт халҡының мифологик һәм космогоник ҡараштарын өйрәнеү буйынса баһалап бөтөргөһөҙ сығанаҡ булып тора. Ана шул фольклор материалдары араһында бигерәк тә "Урал батыр" эпосы иң төп, мөһим сығанаҡтарҙың береһеләр. Сөнки был эпоста башҡорттарҙың ата-бабаларының космогоник ҡараштары теүәлерәк һәм тулыраҡ һаҡланған. Был эпостың йөкмәткеһен тәшкил иткән космогоник мифтарҙа - аллегория, символдар һәм кодтар аша "нисек итеп арауыҡ, ваҡыт, донъя, кеше, йәмғиәт һәм рухи-әхлаҡи нормалар" барлыҡҡа килгәне тасуирлана. Бүтән халыҡтарҙың космогонияһындағы кеүек үк, бында ла төп иғтибар донъяның әлмисаҡ замандарҙа барлыҡҡа килгән мәлдәренә йүнәлтелә. Йәғни, эпосты башҡорттарҙың ата-бабалары: "Донъя нисек, ҡасан һәм кем тарафынан барлыҡҡа килтерелгән, унда кеше ҡасан йәшәй башлаған?" - тигән һорауҙарға яуап эҙләү һөҙөмтәһендә тыуҙырған. Әлеге һорауҙарға яуаптар боронғо йәмғиәттәрҙә һәр саҡ мәҙәниәттең иң сакраль, йәшертен өлөшө булып торған. Сакраллек ул - "сит-яттарға белдереү, та-



ныштырыу тыйылған, төрлө кодтар аша уларҙан йәшерелгән" тигәнде аңлата, шуға космогоник мифтарҙы һәм ундағы мәғлүмәттәрҙе сит-яттар бик белеп бармай. Боронғо башҡорттар өсөн "Урал батыр" донъя яралған ваҡытта уларҙың аллалары эшләгән эштәрҙе тасуирлаған сакраль әҫәр булып торған. Үҙ аллаларының эштәре тураһындағы мифологик йөкмәткеле хикәйәттәрҙе боронғо кешеләр сит-ят ҡолаҡтарҙан ныҡ һаҡлаған, уны ситтәр булмағанда, билдәле бер ваҡытта һәм урында, тик һайлап алынған йәмғиәт төркөмө өсөн генә һөйләгәндәр. Шулай уҡ уны күсереп яҙырға, уға ниндәй ҙә булһа үҙгәрештәр индерергә тыйылған. Сакраль текст булараҡ, ундай мифтар бағышланмағандар өсөн ябыҡ була, уны сакраль байрамдар ваҡытында билдәле урында ғына һөйләгәндәр. Тап ошо сәбәптәр арҡаһында "Урал батыр" эпосы күптәр өсөн оҙаҡ йылдар билдәһеҙ булып ҡала килә. Ярай әле, 1910 йылда, беҙҙең бәхеткә, башҡорт халҡының бөйөк улы, фольклорсы Мөхәммәтша Буранғолов тарафынан ҡағыҙға теркәлә. Әгәр эпосты Мөхәммәтша Буранғолов ҡағыҙға теркәп ҡалдырмаған булһа, хәҙер беҙ уны, бәлки, белмәҫ тә инек.

Башҡорт халҡының Ислам диненә тиклемге космогоник ҡарашын тулы күләмдә сағылдырған "Урал батыр" эпосының версиялары, варианттары юҡ, йәғни ул беҙгә бары тик берҙән-бер ҡануни текста ғына килеп еткән. Әлеге көндә "Урал батыр" тип аталған бер нисә фольклор әҫәре билдәле. Әммә уларҙа эпостың ҡануни тексындағы космогоник проблемалар күтәрелмәй һәм хәл ителмәй, "Донъя һәм ундағы кеше ҡасан, кем тарафынан һәм нисек барлыҡҡа килтерелгән?", тигән төп һорауҙарға яуап эҙләү юҡ. "Урал батыр" эпосы менән уларҙы ниндәйҙер берәй мотив йәиһә сюжет һәм дә ни бары "Урал батыр" тигән уртаҡ атама ғына берләштерә.

## "Ҡөрьән" һәм "Ригведа" ла берҙән-бер

Билдәле булыуынса, изге "Ҡөрьән" китабын ғәрәптәр "Бөтә донъяға таратабыҙ", тип тыуҙырмай. Хәҙер бөтөн мосолман донъяһы өсөн изге һаналған был әҫәр тәүҙә тик ғәрәптәр өсөн генә изге һанала. Аҙаҡ инде ғәрәптәрҙең донъяны баҫып алыуы, экспансияһы киңәйгән һайын, Ҡөрьәндең даирәһе лә киңәйә бара. Ғәрәптәрҙә изге "Ҡөрьән" ниндәй роль уйнаһа, башҡорттар өсөн дә Ислам динен ҡабул иткәнгә тиклем "Урал батыр" эпосы шундай уҡ изге, сакраль әҫәр ролен уйнаған булған. Сөнки ул кешегә донъяны, кешелек йәмғиәтенә ҡуйылған талаптарҙы аңлатҡан. Был эпоста башҡорттарҙың ата-бабалары үҙҙәре өсөн тейешле йәмғиәт булдырыу, уны тотоп тороу һәм тәрбиәләү өсөн кәрәкле дөйөм булған ҡиммәттәр системаһын сағылдырған. Космогоник мифтарҙың тексы боронғолар өсөн сакраль булып, һәм ул магик көскә эйә, тип ышаныуҙар арҡаһында, тексты йәиһә хатта берәй һүҙҙе алмаштырыу тыйылған була, сөнки ул үҙенең мистик көсөн юғалта, теләктәр аллаларға барып етмәйәсәк, тип уйлана. Шуға күрә текстарҙа барыһы ла, хатта күптән ҡулланылыштан сыҡҡан архаик лексемалар ҙа һаҡланған. Тексты үҙгәртеү, хатта бер һүҙҙе икенсеһе менән алмаштырыу (синоним булған хәлдә лә) боронғо йәмғиәт өсөн насар, теләмәгән эҙемтәләргә килтереү ихтималлығы боронғоларҙы ныҡ ҡурҡытҡан, уларҙы быуаттар буйына бер үк тексты үҙгәрешһеҙ ҡабатларға мәжбүр иткән. Тап ошо сәбәп буйынса элек Ҡөрьәнде башҡа телдәргә тәржемә итеү тыйыла, ә булған тәржемәләрҙе "Ҡөрьән" тип атап булмай, сөнки улар үҙенең изгелеген юғалта, бары тик тәфсир генә, йәғни комментарийҙар һәм аңлатмалар ғына булып ҡала. Борон кешеләр, "Ҡөрьән" тик ғәрәп телендә генә яңғырарға тейеш, шунһыҙ доғалар Аллаға барып етмәй", тип уйлаған.

Шул сәбәптәр арҡаһында рус православиеһының руханиҙары ла ғибәҙәт телен иҫке славян теленән заманса рус теленә күсерә алмай. Ҡайһы бер православие руханиҙары быны эшләргә теләй, әммә диндарҙар араһында низағтар сығып, төрлө бүленеш, тарҡалыштар килеп сығыу ихтималлығы уларға быны эшләргә мөмкинлек бирмәй. Диндарҙарҙың күбеһе бары тик иҫке славян телендә яҙылған һәм ошо телдә уҡылған текстарҙы ғына изге һәм Аллаға барып етә, ишетелә торған тел, тип һанай.

Берҙән-бер вариантлы текстар тик "Урал батыр" йәки "Ҡөрьән" өсөн генә хас күренеш, тип әйтеп булмай. Көньяҡ Уралдан алыҫта ятҡан боронғо Һиндостанда сәсәндәрҙе "риши" тип атағандар. Ошо ришиҙар бик ҙур күләмле "Ригведа"ны тыуҙырған, уны һаҡлаған, унда 1028 гимн (яҡынса 10560 мантра йәки 74000 һүҙ) бар. Күреүегеҙсә, "Урал батыр"ҙан күпкә ҙурыраҡ әҫәр, әммә шундай күләмле әҫәр булыуына ҡарамаҫтан, "Ригведа" сакраль текст булараҡ, өс мең йыл дауамында бер ниндәй үҙгәрешһеҙ беҙҙең көндәргә тиклем килеп еткән. "Ригведа"ны үҙгәртеүҙәр индереүҙән һәм һәр төрлө сит-ят ҡолаҡтан күҙ ҡараһы кеүек һаҡлағандар, шуға ла "Ригведа" берҙән-бер вариантта һаҡлана. Ошо меңәр йыллыҡ ваҡыт һуҙымында Ведалар быуындан-быуынға үҙгәрешһеҙ, мнемотехник алымдар, йәғни телдән ятлап алыу, хәтерҙә ҡалдырыу ысулдары ярҙамында бер ниндәй үҙгәрешһеҙ тапшырыла килә. Хатта хәҙер, яҙыу өҫтөнлөк иткән ваҡытта ла, Ведаларҙың абруйы яҙма тексты уҡыуҙа түгел, ә телдән һөйләнелгәндә генә арта. Әҙәм балаларының психологияһы, мейеһенең тәбиғәте бар ерҙәрҙә лә бер төрлөрәк булған кеүек, мнемотехник алымдар ҙа барлыҡ мәҙәниәттәрҙә лә оҡшаш булған. Был алымдарға башҡорт сәсәндәре лә эйә булған һәм шул арҡала ғына улар "Урал батыр" эпосын беҙгә килтереп еткерә алған. Ошо уҡ мнемотехник ысулдар, алымдар ҡырғыҙҙарға ифрат ҙур күләмле "Манас" эпосын һаҡларға һәм беҙҙең көндәргә еткерергә мөмкинлек биргән.

Традицион йәмғиәт өсөн эпос тексы ла (был осраҡта - "Урал батыр"), Изге Ҡөрьән йәки христиандарҙың Тәүраты ла изге, сакраль текст булып тора һәм уларға ниндәй ҙә булһа үҙгәреш индереү тыйыла. Үҙгәреш индереү түгел, хатта был турала уйлау үҙе үк ҙур гонаһ һаналған. Мифтар буйынса оло белгес В. Б. Иорданский яҙыуынса: "Меңәр йыллыҡ ваҡыт ағымында мифтар ниндәйҙер бер ҡалыпҡа индерелеп, күптәр өсөн аңлайышһыҙ код артына йәшерелә һәм билдәле бер сиктәрҙә мәңгелеккә ҡатып ҡала. Уға тейергә лә ҡурҡа башлайҙар, меңәрләгән ҡанбабалар изге мираҫҡа хилафлыҡ килмәһен, үҙгәрештәр индерелмәһен, тип бер туҡтауһыҙ күҙәтеп торған".

Бына ошо үрҙә атап үтелгән шарттар "Урал батыр"ҙың боронғо замандан беҙҙең көндәргәсә берҙән-бер текста, бер үҙгәртеүһеҙ, киң ҡатламға афишаланмай, аҙ ғына кешегә билдәле булып килеп етеүенең сәбәбе булған. Төрлө легендаларҙа, риүәйәттәрҙә, әкиәттәрҙә эпостағы персонаждарҙың булыуы, шул уҡ атамалы бүтән төр фольклор әҫәрҙәренең халыҡ хәтерендә һаҡланыуы, теркәлеүе "Урал батыр" эпосының башҡорт мәҙәниәтенең нигеҙен тәшкил итеүен, уның үҙәк әҫәре булыуын раҫлай.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**ЮНЕСКО исемлегенә инәбеҙ, тип, беҙ "Урал батыр" эпосына төрлө өҫтәмәләр индерергә, уның төрлө версияларын, варианттарын уйлап сығарырға тейеш түгелбеҙ, тип әйткем килә. Әгәр башҡорт был эпосты үҙе һаҡламаһа, уны бер ниндәй ЮНЕСКО һаҡлай алмаҫ. "Урал батыр" башҡорт халҡының үҙ ихтыяждары тыуҙырған бөйөк әҫәр һәм ул, иң тәү сиратта, тик беҙҙең өсөн изге. Бүтәндәр уны һоҡланып уҡыр ул, әммә улар өсөн был әҫәр бер ҡасан изге, сакраль булмаясаҡ. Быны оноторға тейеш түгелбеҙ. Тимәк, уны һаҡлау, Мөхәммәтша Бурanғолов теркәп ҡалдырған ҡануни тексын киләсәк быуынға бер ниндәй үҙгәрешһеҙ тапшырыу ҙа үҙебеҙҙән тора.**

**Зәкирйән ӘМИНЕВ,**

**БР ФА Гуманитар тикшеренеүҙәр институтының ғилми хеҙмәткәре.**

МИЛЛӘТ ҠАМУСЫ

# КАРУАНҺАРАЙ - БАШҠОРТТОҠО...

## Тик ул һаман ситтәр ҡулында

**Ошо көндәрҙә Ырымбурҙағы Каруанһарай асылыуға 165 йыл тула. Был комплекс башҡорт тарихы һәм мәҙәниәте һәйкәлдәре араһында айырым урын биләп тора. Алыҫ һәм Яҡын Көнсығыштың, Төньяҡ Африканың мосолман илдәрендә бындай ҡоролмалар төп сауҙа юлдары буйында дөйә карауандары үткән арауыҡта (30 километр һайын) даими осрай. Каруанһарайҙар юл буйҙарында ғына түгел, ҡайһы берҙәре ҡалаға инеү урынында ла, ҡаланың эсендә лә төҙөлгән.**

1838 йылда губернатор Василий Перовский инициативаһы буйынса төҙөлә башлаған Каруанһарай 1844 йылда төҙөлөп бөтә. Маҡсаты - унда Башҡорт-мишәр ғәскәре командующийының канцелярияһын урынлаштырыу һәм килеүселәр өсөн ҡунып сығыу урыны булдырыу. Проект архитектор Александр Брюллов тарафынан эшләнә. Башҡорт йортон һәм мәсетен үҙ эсенә алған архитектура комплексын төҙөү өсөн башҡорттар 804 мең һум аҡса йыя һәм төҙөлөш эштәрендә туранан-тура ҡатнаша.

Каруанһарайҙың архитектура образы башҡорттарҙың үтенесе буйынса традицион башҡорт ауылы стилен тыуҙыра. Уның төп өлөшө - ике ҡатлы, эске ихатаһы булған өс таш йорт. Көньяҡтан уға ике таш бина ҡушыла, улар араһында - ике ҡапҡалы парад ишеге. Һигеҙ ҡырлы көмбәҙле мәсет комплекста төп урында тора. Манара, айырым ҡоролма булып, Каруанһарайҙың композицияһын тамамлап ҡуя. Каруан сауҙаһы менән бәйле бындай комплекстың крайҙа аналогы булмай.

Каруанһарай мәсете 1846 йылдың 30 августында (яңы стиль буйынса 11 сентябрҙә) тантаналы асыла. Унда башҡорттар менән идара итеү буйынса учреждениелар, юлаусылар йорто, башҡорттар өсөн оҫтахана һәм мәктәп урынлаша. 19 йыл үткәс, 1865 йылда, башҡорт-мишәр ғәскәрен эске эштәр министрлығы ҡарамағына тапшырып, уның идараһын бөтөргәс, Каруанһарайҙы башҡорттарҙан тартып алалар, унда губернаторҙың фатиры һәм канцелярияһы, губерна дәүләт учреждениеһы, башҡорт ерҙәрен межаларға бүлеү буйынса комиссия урынлаша. Был башҡорттарҙа ҡәнәғәтһеҙлек тыуҙыра, законһыҙ тартып алынған Каруанһарайҙы кире ҡайтарыу тураһындағы хат аҫтында тиҫтә самаһы кеше ҡултамғаһын һала. Әммә һорау ҡәнәғәтләндерелмәй. 1867 йылда губернатор Николай Крыжановский губерна учреждениеларының мосолман культ биналары менән йәнәш булыуына юл ҡуймау өсөн мәсет менән манараны икенсе урынға күсереүҙе юллай. Әммә халыҡтың ҡәнәғәтһеҙлегенән ҡурҡып, быға рөхсәт бирелмәй.

1917 йылда Ырымбурҙа уҙған Советтарҙың Башҡортостан өлкә съезы Каруанһарайҙы милли милек тип иғлан итә һәм унда Башҡорт үҙәк шураһы урынлаша. 1917 йылдың 8-20 декабрендә Каруанһарай бинаһында Бөтөн Башҡорт ойоштороу съезы үтә һәм ул Башҡорт үҙәк шураһы иғлан иткән Башҡортостандың автономияһын раҫлай, Беренсе Республика хөкүмәтен ойоштора. 1917 - 1918 йылдарҙа Каруанһарай Башҡортостан Хөкүмәтенең резиденцияһы һәм Башҡорт ғәскәренең штабы була. 1918 йылдың февралендә Милләттәр эше буйынса халыҡ комиссары Иосиф Сталин уны башҡорт халҡына биреү тураһында декретҡа ҡул ҡуя. 1920 йылда Каруанһарай бинаһында Башҡортостан халыҡ мәғарифы институты асыла, һуңынан ул Башҡорт педтехникумы тип үҙгәртелә. Уҙған быуаттың 20-се йылдарында архитектура комплексы - Ҡырғыҙ Республикаһына, ә 1934 йылда Ырымбур өлкәһенә бирелә. 1960 йылдың августынан Каруанһарай дәүләт тарафынан архитектура ҡомартҡыһы булараҡ һаҡлана. Хәҙер унда өлкәнең бер нисә учреждениеһы һәм ведомствоһы урынлашҡан. Мәсет әле лә эшләй.

Оҙаҡ йылдар дауамында башҡорттар Каруанһарайҙы Башҡортостанға ҡайтарып биреү мәсьәләһен күтәреп сыҡты, был мәсьәлә Беренсе Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы ҡарарҙарының береһендә лә сағылыш тапты. 2007 йылда, Башҡортостандың милли-территориаль автономияһын иғлан итеүҙең 90 йыллығын билдәләгәндә, Каруанһарай бинаһына ошо тарихи ваҡиға айҡанлы таҡтаташ ҡуйылды.

✓ ***Был "бомба" электрон хәтерҙә һаҡланған бөтөн мәғлүмәттәрҙе бер минут эсендә юҡҡа сығара. Әгәр ҙә әҙәбиәт тулыһынса тик электрон форматҡа ғына күсерелһә, әҙәбиәткә юҡҡа сығыу ҡурҡынысы янай түгелме?***



# УҠЫУСЫҢДЫ ЫШАНДЫРА

## ысын әҙип булырға ла

**Арабыҙҙа ниндәй генә хәл килеп тыуғанда ла төшөнкөлөккә бирелмәй торған кешеләр осрай. Ситтән ҡараһаң, ундайҙар өсөн ҙур проблемалар - ваҡ мәшәҡәт, ә көндәлек мәшәҡәттәр шунда уҡ сисеүҙе талап иткән яп-ябай төйөн, уймаҡ йомаҡ кеүек кенә. Бындай холоҡло кешеләр донъя йөгөн тартҡан саҡта рух күтәренкелеген нисек һаҡлап ҡала икән? Оптимистар ниндәй тормош менән йәшәй? Шундайҙарҙың береһе редакциябыҙҙа ҡунаҡта: Башҡортостан дәүләт "Китап" нәшриәте директоры, философия фәндәре кандидаты, дәүләт эшмәкәре Зөфәр Мөхтәр улы ТИМЕРБУЛАТОВ милли матбуғат, нәшриәт яҙмышы, журналист һөнәре һәм үҙенең тормош позициялары тураһында һүҙ алып бара.**

### Матбуғат дәүләттеке булырға тейеш

Америка, бер тапҡыр ҙа пистолеттан атмайынса, мәғлүмәт һуғышы ярҙамындаСССР-ҙы тарҡатыуға өлгәште. Теге саҡта Наполеон да: " Рәсәйгә ҙур ғәскәр менән барғансы, бер нисә гәзит кенә сығарған булһам, уны күптән яулап алған булыр инем", - тип үкенгән, имеш, тиҙәр. Бына шулай, матбуғаттың мәғлүмәт еткереүсе булыуҙан тыш, күҙгә күренмәгән тағы ла көслөрәк әһәмиәте бар. Шуның өсөн партия, дәүләт бер ҡасан да матбуғатты ҡулынан ысҡындырманы.

XX быуаттан - был быуатҡа, теге меңъйыллыҡтан - яңыһына, теге ижтимағи ҡоролоштан - был ҡоролошҡа күсеүҙәрҙең бөтәһен дә кисерергә тура килде беҙҙең быуынға. Совет осоронда формалашҡан, тәрбиәләнгән һәм ошо билдәһеҙ осорҙа йәшәгән кеше булараҡ, мин бөгөн ниндәй һығымта яһайым? Үҙгәртеп ҡороуҙар башланғас, бик күп ҡиммәттәр емерелде, ә милли матбуғат үҫте. Парадокс бит был! Ни өсөнмө? Сөнки Рәсәй матбуғаты һәр ваҡыт - дәүләттеке, ә сит ил гәзиттәре тәүҙән үк коммерция баҫмалары булараҡ барлыҡҡа килде. "Газета" һүҙе үҙе үк итальян теленән тәржемә иткәндә аҡса бирәмеген - тинде аңлата. Ә Рәсәйҙәге тәүге гәзиттәр Петр Беренсенең "Ведомости" баҫмаһы нигеҙендә барлыҡҡа килә һәм һәр ваҡыт дәүләткә хеҙмәт итә.

Матбуғат министры булып эшләү осоронда Башҡортостан матбуғатын аяҡҡа баҫтырыу өсөн байтаҡ көс түгергә тура килде. Совет осоронда матбуғат өлкәһен Мәскәү финанслай ине. СССР тарҡалғас, ҡала-район гәзиттәре өсөн аҡса бүленмәй башланы. Уларҙы һаҡлап ҡалыу өсөн тиҙ арала етди саралар күрелергә тейеш ине. Ошо мәсьәлә менән Башҡортостан Республикаһы Президенты Мортаза Рәхимовҡа мөрәжәғәт иттем һәм дәүләт ярҙамы күрһәтелмәһә, матбуғат сараларына ябылыу ҡурҡынысы янауы тураһында әйттем. Президент: "Ярҙам итәйек, бюджет тураһындағы документҡа бер юл индерәйек", - тип яуапланы. Шулай итеп, беҙ матбуғатты һаҡлап ҡала алдыҡ. Матбуғат тураһында һүҙ башлағас, уның янында ғына торған "милли матбуғат" төшөнсәһен дә урап үтә алмайбыҙ. Ни өсөн милли матбуғат рентабелле була алмай? Ошо хәҡиҡәтте дәүләт кимәленә күтәреп, гарантияланған дотацияларға өлгәшелде ул заманда. Улай ғына түгел, республикаға заман талабына ярашлы бик күп яңы гәзит-журналдар кәрәк ине. Дәүләт ярҙамы менән "Йәшлек", "Йәншишмә" гәзиттәре, балалар һәм үҫмерҙәр өсөн "Аманат", "Аҡбуҙат", йәштәр өсөн "Шоңҡар", рус телендә "Бельские просторы" журналдары, татар телендә "Толпар", "Әллүки" журналдары, "Өмөт" гәзите һәм башҡа бик күп матбуғат саралары шул осорҙа өрләңы һулыш алды.

Йыл башында ил Президенты Д.Медведевтың: "Дәүләт заводтарҙан, фабрикаларҙан һәм гәзиттәрҙән баш тартырға тейеш", - тигән һүҙен ишеттек. Был яңылышыраҡ ысҡындырылған һүҙ булды. Минеңсә, иҡтисад үҙенсәлектәренә һылтанып ҡына бөтөн гәзиттәрҙе лә шәхси ҡулдарға бирергә ярамай. Дәүләт ҡарамағындағы баҫмалар ҡалырға тейеш. Америкала ла бөтөн гәзиттәр ҙә шәхси ҡулдарҙа түгел. Уларҙа яңы бер фирҡә парламентҡа һайлана икән, шунда уҡ үҙҙәренең гәзитен баҫтыра башлай һәм уны бюджеттан финанслауға өлгәшә. Германияла, мәҫәлән, йәмәғәт телевидениеһы эшләй. Уны ла дәүләт үҙ ҡанаты аҫтында тота. Көнбайыш илдәрҙә матбуғат либераль иҡтисадҡа ғына таяна тип уйлау - хата. Зәки Вәлиди Башҡорт хөкүмәтен төҙөгән саҡта Санкт-Петербургтан нәшриәт һатып алыу хәстәрен күргән. Ул нәшриәт менән дәүләттең айырылғыһыҙ төшөнсәләр булыуын аңлаған, тимәк.

### Төҫлө баҫмалар нисек барлыҡҡа килде?

Матбуғат министрлығын етәкләрҙән алда минә Мәскәүҙә академияла уҡырға, эш буйынса сит илдәрҙә күп йөрөргә тура килде. Төрлө илдәрҙә булған саҡта бер һорау тынғы бирмәне: "Ни өсөн сит илдәрҙә төҫлө баҫмалар сыға, ни өсөн беҙ был йәһәттән артта ҡалабыҙ?" Ысынлап та, Рәсәй бигерәк тә көнбайыш илдәр менән сағыштырғанда был өлкәлә 10-15 йылға артҡа ҡалған. Минут, сәғәт һайын эволюцион үҙгәрештәр булып торған хәҙерге заман өсөн 15 йыл - бик күп ул.

Республикаға ҡайтып, министрлыҡты ышанып тапшырғастар, баҫмаларҙы төҫлө ысул менән сығарыу мәсьәләһен хәл итеү тураһында уйлана башланым. Тик нисек хәл итергә һуң уны? Полиграфияның табышы менән генә эшләп булмай быны. Төҫлө гәзиттәр сығара торған бер агрегат ҡына ла 100 миллион һум тора ине ул ваҡытта. Бындай ҙур сумманы, билдәле, хөкүмәт кенә бүлә ала. 2000 йылда республика етәкселәрен был эштең мөһимлегенә ышандырып, был мәсьәләне лә атҡарып сыға алдыҡ. Бөгөн беҙ гәзит-журналдарҙың 10 йыл элек аҡ-ҡара төҫтә генә баҫылыуын күҙ алдына ла килтерә алмайбыҙ.

### Торлаҡ мәсьәләһе

Дәүләткә хеҙмәт иткән журналисҡа шул уҡ дәүләт тарафынан торлаҡ ярҙамы ла булырға тейеш. Үкенескә ҡаршы, бөгөн ул ярҙам юҡ. Мин министр булып эшләгәндә журналистар өсөн Сипайловола йорт төҙөлдө, шуның менән эш туҡтап ҡалды. Бөгөн журналистикаға килгән йәштәр был мәсьәләлә дәүләт ярҙамына өмөт итә алмай. Ә бит йәш белгес үҙенең киләсәген яҡшы күҙалларға тейеш.



***Бөгөн журналистикаға килгән йәштәр был мәсьәләлә дәүләт ярҙамына өмөт итә алмай. Ә бит йәш белгес үҙенең киләсәген яҡшы күҙалларға тейеш. Совет власын тәнҡитләргә яраталар бөгөн. Уның ыңғай яҡтары ла күп ине бит. Әйтәйек, шул уҡ торлаҡ мәсьәләһен хәл итеү буйынса тупланған тәжрибәне ниңә бөгөн ҡулланмаҫҡа? Йорттар төҙөлә инеме? Эйе. Журналистарға фатир бирәләр инеме? Бирә инеләр. Редакцияға эшкә килгәнһең икән, быйыл булмаһа - киләһе йыл, йә ике, өс йылдан һуң фатир алаcаҡһың. Дәүләт гәзиттәрендә эшләгән журналистар аҡса тураһында баш ватмай, ә үҙенең профессияһына тоғро ҡала һәм дөрөҫлөккә хеҙмәт итә ине.***

Совет власын тәнҡитләргә яраталар бөгөн. Уның ыңғай яҡтары ла күп ине бит. Әйтәйек, шул уҡ торлаҡ мәсьәләһен хәл итеү буйынса тупланған тәжрибәне ниңә бөгөн ҡулланмаҫҡа? Йорттар төҙөлә инеме? Эйе. Журналистарға фатир бирәләр инеме? Бирә инеләр. Редакцияға эшкә килгәнһең икән, быйыл булмаһа - киләһе йыл, йә ике, өс йылдан һуң фатир алаcаҡһың. Дәүләт гәзиттәрендә эшләгән журналистар аҡса тураһында баш ватмай, ә үҙенең профессияһына тоғро ҡала һәм дөрөҫлөккә хеҙмәт итә ине. Әлбиттә, матбуғат хеҙмәткәре менән дәүләт араһында фекер айырмалыҡтары ла була ине. Журналистар бер ваҡытта ла дәүләт менән ҡосаҡлашып йөрөмәне, улай булмаясаҡ та. Әммә дәүләт журналистарҙың йәшәү шарттарын яҡшыртырға, лайыҡлы эш хаҡы менән тәьмин итергә тейеш. Бының өсөн бөгөнгө власть әһелдәре был профессия кешеләренең, ғөмүмән, матбуғат баҫмаларының әһәмиәтен яңынан танырға, баһаларға өйрәнергә тейеш.

### "Ҡағыҙ бабай, ситкә кит, компьютер килә..."

Дауыт Юлтыйҙың ҡасандыр һуҡа бабайға әйтелгән һүҙҙәрен үҙгәртеп, шулай тип әйтеп була. Ысынлап та, бөгөн беҙҙең көнкүрешкә электрон саралар ныҡ үтеп инә. Минеңсә, Рәсәй гражданы барыбер китапта, журналда, гәзиттә күргән-уҡығанына нығыраҡ ышана. Интернеттан уҡығанды обьектив тип ҡабул итмәүселәр ҙә бар. Мин үҙем дә ҡағыҙға яҙылған документтарға барыбер ҙә нығыраҡ ышанам. Беҙ шулай тәрбиәләндек. Ә бөгөн түгел, мәктәпкә иртәгә киләсәк уҡыусылар әсбаптарҙы үҙҙәре менән йөрөтмәйәсәк, уларҙың портфель тигән нәмәһе лә, ҡәләме, ҡағыҙы ла булмаясаҡ. Быларҙы бәләкәй генә флэшка алмаштырасаҡ. Уҡытыусының компьютерына ҡуйып ҡына өйгә эш тикшереләсәк. Ҡасандыр бик боронғо осорҙа яҙма мәҙәниәт булмаған. Был осорҙо яҙма мәҙәниәт алдынан булған осор, тип атайҙар. Артабан яҙма барлыҡҡа килгән һәм ул осор әле лә дауам итә. Әммә киләсәктә яҙма мәҙәниәтенә алмашҡа электрон мәҙәниәт килә. Был үҙгәрештән, яңырыуҙан бер ҡайҙа ла китә алмайбыҙ. Уны ҡабул итергә генә ҡала. Форматы үҙгәрә, әммә нәшриәт барыбер нәшриәт булып ҡаласаҡ. Беҙ бөгөн урта быуаттарҙа сыҡҡан китаптарҙы ҡәҙерләп һаҡлайбыҙ. Алмашҡа килгән быуын беҙ сығарған китаптарҙы ла шулай уҡ һаҡлаясаҡ икәненә иманым камил. Китап баҫтырып сығарыуға күпме аҡса түгелгәнлеген күҙ алдына килтереп, хайран ҡаласаҡ.

Электрон баҫмалар уңайлы, әммә был үҙгәрештәрҙең хәүефле, уңайһыҙ яҡтары ла бар. Бөгөнгө көндә донъяның иң агрессив өлөшөндә үҙенсәлекле ҡорал уйлап табылды: был бомба кешеләргә лә, хайуандарға ла физик зыян килтермәй, ул хатта төҙөлгән нығытмаларҙы ла ватмай, ә электрон мәғлүмәт сараларының "хәтер"ен эшлектән сығара. Тимәк, был бомба электрон хәтерҙә һаҡланған бөтөн мәғлүмәттәрҙе бер минут эсендә юҡҡа сығара. Ошо урында һо-

✓ *Беҙ әҫәрҙәрҙе сифаты, халҡыбыҙ өсөн әһәмиәтле булыу-булмауы йәһәтенән һайлап алабыҙ. Электрон форматҡа күсеп бөткәс, әрһеҙ яҙыусылар беҙҙә баҫтыра алмаған әҫәрҙәрен сайттарҙа баҫтыра башлаясаҡ, әлбиттә.*



# АЛҺАҢ... күп ҡалмай

рау тыуа: әгәр ҙә әҙәбиәт тулыһынса тик электрон форматҡа ғына күсерелһә, әҙәбиәткә юҡҡа сығыу ҡурҡынысы янай түгелме? Шулай ҙа баҫманы электрон форматта ла, бер юлы ҡағыҙҙа ла тиражлап баҫтырыу финанс йәһәттән мөмкин түгел: кешелек йә ҡағыҙға, йә электроникаға ғына өҫтөнлөк бирергә тейеш. Ә йышлыҡ бомбаһына килгәндә, уға ҡаршы торор сара барыбер уйлап табыласаҡ. Был - философия ҡануны: һәр ауырыуға ҡаршы үҙенең дарыуы була. Шуның өсөн, теләйбеҙме, теләмәйбеҙме, электрон баҫмалар буласаҡ. Ҡағыҙ менән электрон баҫмаларҙың тағы бер күҙгә күренмәгән айырмаһы шунда: ҡағыҙҙан уҡығандар нығыраҡ хәтерҙә ҡала, ә компьютер экранынан уҡылғаны тиҙ онотола. Сөнки, минең уйымса, компьютерҙағы әҫәрҙең юлдары күҙ алдынан "йүгереп" кенә үтә һәм күҙҙән дә юғала. Ә китаптан уҡылғандар күргәҙмә материал булғанға күрә лә хәтерҙә нығыраҡ ҡала. Мин, мәҫәлән, уҡылғанды күҙ хәтере менән иҫләп ҡалам. Фекерҙәрҙең ҡайһы урында, ҡайһы биттә яҙылғанлығын хәтергә еңелерәк төшөрәм. Ә электрон "китаптар"ҙың биттәрен дә, уларҙың ҡалынлығын да хәтерләп булмай.

## Электрон нәшриәт

Бөгөнгө нәшриәттең иң төп проблемаһы - уҡыусыларға китаптарҙы алып барып еткереү механизмының насар эшләүе. Уҡыусы менән нәшриәт араһындағы бәйләнеш Өфөләге бер магазин һәм республика райондарындағы 24 һатыу нөктәһе ярҙамында ғына атҡарылып килә. Дөрөҫ, электрон китаптарҙы таратыуы күпкә еңелерәк буласаҡ. Тик электрон нәшриәттәр үҫһен, уның менән барыһы ла файҙалана башлаһын өсөн әллә күпме ваҡыт кәрәк буласаҡ. Эйе, ҡағыҙ китаптарҙы таратыу күберәк сығымдар талап итә. Милли республикала нәшриәт китап сығарыу менән генә шөғөлләнмәй, ул ниндәйҙер кимәлдә ижади процесҡа үҙенең тос өлөшөн дә индерә. Йәғни, яҙыусыларҙың әҫәрҙәрен һайлап ала, баҫмаға әҙер булғанын нәшер итә. Бөгөнгө көндә Зәйнәп Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәтендә китап баҫтырырға теләүселәр быуа быуырлыҡ. Ҡайһы берәүҙәр үҙҙәренең әҫәрҙәрен дәүләт нәшриәте тамғаһы аҫтында нәшер итеү өсөн әллә күпме аҡса түләргә лә риза. Әммә беҙ әҫәрҙәрҙе сифаты, халҡыбыҙ өсөн әһәмиәтле булыу-булмауы йәһәтенән һайлап алабыҙ. Электрон форматҡа күсеп бөткәс, әрһеҙ яҙыусылар беҙҙә баҫтыра алмаған әҫәрҙәрен сайттарҙа баҫтыра башлаясаҡ, әлбиттә. Бөгөн үк интернеттағы Twitter сайтында үҙеңдең блогыңды асып, күпмелер хаҡ түләп, әҙәрҙәреңде урынлаштырырға була. Бөгөн был мөмкинлек менән кем теләй - шул файҙалана алыуын, уның әҙәбиәт үрнәге булып өлгөрмәгән әҫәрен "Мин - Башҡортостан яҙыусыһы" тигән исем аҫтында тәҡдим итә алыуын иҫәпкә алғанда, үҙенән-үҙе шундай һорау килеп тыуа: ул сағында нәшриәт ниндәй вазифа башҡарырға тейеш? Иң тәүҙә, "Башҡортостан" һүҙен ҡулланыуҙы регламентлаған ниндәйҙер сара кәрәк. Юғиһә, был әҫәрҙәрҙе уҡыған сит милләт вәкилдәрендә, башҡорт әҙәбиәтенең кимәле бик түбән икән, тигән тойғо ҡаласаҡ. Электрон мәҙәниәткә күсеү процесында хәл итәһе мәсьәләләр күренә генә башланы. Беҙҙең алға улар иртәгә килеп баҫасаҡ.

## Журналист абруйы тураһында

Эйе, совет власы заманында журналист һөнәре абруйлы ине. Ә үҙгәртеп ҡороуҙар ваҡытында был абруй төҫһеҙләнә төштө. Ни өсөнмө? "Матбуғат тураһында"ғы законға күҙ һалһаҡ, унда: "Киң мәғлүмәт саралары - коммерция предприятиелары һанала", - тип яҙып ҡуйылған. Либераль иҡтисад ҡанундары матбуғат өлкәһенә лә үтеп инә бөгөн. Бының менән килешеүе бик ауыр. Сағыштырып ҡараһаҡ, элек гәзиттә баҫылған һәр хәбәр уҡыусылар тарафынан дөрөҫлөк тип ҡабул ителә ине. Бөгөн коммерцияға ҡоролған эшмәкәрлек менән шөғөлләнгән бәғзе бер Рәсәй һәм сит ил журналистарын "журналист" тип атай ҙа алмайым: улар - менеджерҙар. Журналист һөнәренең ысын асылы тураһында үҙ тәжрибәмдән дә, шулай уҡ эшенә мөкиббән бирелгән ҡәләм оҫтаһы - атайымдан да беләм. Атайым ғүмере буйы "Совет Башҡортостаны" гәзитенең үҙ хәбәрсеһе булып эшләне. Республика райондары буйлап командировкаларға йөрөнө. Үҙ яйы менән сығып китә ине юлға, үҙ яйы менән ҡайтып инә ине. Төпкөл ауылдарға машинам менән оҙатып ҡуйған саҡтар ҙа булды. Хәтеремдә: командировкаһының һуңында етәксегә ипләп кенә: "Ҡустым, был мәсьәләне яҙасаҡмын", - тип әйтеп сығып китер ине. Кешене бер ваҡытта ла кәмһетмәне, йөҙөнән алманы, тупаҫ һөйләшмәне ул. Һәр ваҡыт алтын урталыҡты таба белде. Ысын журналист шундай булырға тейеш. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, бөгөнгө журналистарға бына шундай профессионаллек, кеше менән һөйләшә белеү, мәсьәләне алтын урталыҡтан тороп хәл итеү һыҙаттары етмәй. Шуға ла журналист яҙған һүҙгә ышанған кешеләр аҙая.

Журналисҡа талап заман менән бергә үҙгәрә хәҙер. Бөгөнгө журналист һәр күргән-ишеткәнен бизмәнгә һалып, дөрөҫ һығымта яһау тигән сифатҡа эйә булырға тейеш. Әммә Башҡортостан матбуғатында ошондай аналитиктар етешмәй. Был хаҡта бер сығышында Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов та әйтте. Минең фекерем буйынса, беҙҙә аналитикаға ҡоролған заманса публицистика юҡ. Публицистик китап сығарабыҙ, ләкин ул һатылмай ята, сөнки ул китап ҡыҙыҡ түгел. Үткәнгә һәм бөгөнгөгә баһа биреүе еңел, ә һин, журналист тәжрибәңә таянып, халҡыңдың киләсәген күҙаллап ҡара. Ысын публицист киләсәкте күрә белергә һәм уҡыусыһын ошо киләсәккә инандыра, ышандыра алырға тейеш.

*Журналисҡа талап заман менән бергә үҙгәрә хәҙер. Бөгөнгө журналист һәр күргән-ишеткәнен бизмәнгә һалып, дөрөҫ һығымта яһау тигән сифатҡа эйә булырға тейеш. Әммә Башҡортостан матбуғатында ошондай аналитиктар етешмәй. Был хаҡта бер сығышында Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов та әйтте. Минең фекерем буйынса, беҙҙә аналитикаға ҡоролған заманса публицистика юҡ. Публицистик китап сығарабыҙ, ләкин ул һатылмай ята, сөнки ул китап ҡыҙыҡ түгел. Үткәнгә һәм бөгөнгөгә баһа биреүе еңел, ә һин, журналист тәжрибәңә таянып, халҡыңдың киләсәген күҙаллап ҡара. Ысын публицист киләсәкте күрә белергә һәм уҡыусыһын ошо киләсәккә инандыра, ышандыра алырға тейеш.*

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Үҙенең 60 йәшен билдәләгән уҙаман Зөфәр Мөхтәр улы Тимербулатовтан: "Һеҙҙең иң бәхетле бала саҡ хәтирәгеҙ ниндәй?"- тип һорауыбыҙға: "Өйөбөҙгә йыш ҡына атайымдың ҡәләмдәш дуҫтары - яҙыусылар, журналистар йыйылып, төрлө ҡыҙыҡлы темаларға һөйләшә, бәхәс ҡора ине. Шул ҡорҙарҙы һағынам", - тине. "Иң бәхетһеҙ көнөгөҙ булдымы?" - тип йәнә һорауыбыҙға, ул: "Матбуғат министры вазифаһынан ебәрелеүем бик үкенесле булды, сөнки матур эштәргә старт алынғайны, улар бүленеп ҡалды", - тип яуапланы. Эйе, кем өсөндөр әҙәбиәт, матбуғат - бишек, кем өсөндөр - ҡайһылыр вазифаға, үрҙәргә илтер ишек, ә кем өсөндөр улар - тормоштоң үҙе. Зөфәр Тимербулатов өсөн дә матбуғат - тормош. Шуға ла ул унда йөҙөп йәшәй, бар көсөн, талантын, ғүмеренең иң матур мәлдәрен ошо өлкәгә сарыф итә, итәсәк әле.**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ**
**яҙып алды.**

ӘЙТӘГҮР!

# БЕҘ НИНДӘЙБЕҘ,

## ниндәй булырға кәрәк?

**Башҡортостан гөлдәр баҡсаһына тиң, унда ниндәй генә милләт вәкилдәре юҡ. Һәр сәскәнең үҙенә генә хас төҫө, таж формалары, еҫе булған кеүек, был милләттәр ҙә үҙенсәлекле сифаттары буйынса бер-береһенән айырылып тора. Ошо гөлләмәлә төп урынды биләгән башҡорт милләтенең йәш вәкилдәре ниндәй матур сифаттарға эйә һәм эйә булырға тейеш?**

**Айбулат ИШНАЗАРОВ, хәбәрсе:** Башҡорт йәштәре бер аҙ баҫалҡы. Тәү сиратта бына ошо сифатыбыҙ менән башҡа милләт вәкилдәренән айырылып торабыҙҙыр, тип уйлайым. Баҫалҡы булыуыбыҙҙың ыңғай яҡтары ла, кире яҡтары ла бар. Әммә баҫалҡылыҡ һәм баһымсаҡлыҡ төшөнсәләрен бутамайыҡ. Баҫалҡымын, тип, матур эштәребеҙҙе, ҡулдан килгәнде лә йәшереп ултырмайыҡ. Бына әле тап башҡорт йәштәре айыҡлыҡ өсөн көрәш башланы. Йәштәрҙе генә түгел, бөтә халыҡты йәлеп иткән айыҡ йыйындарҙы йышыраҡ үткәрергә кәрәк беҙгә. Был беҙҙе берҙәм, татыу булырға ла өйрәтәсәк. Беҙ берҙәм булһаҡ, республикабыҙҙа йәшәгән башҡа халыҡтар ҙа беҙҙән өлгө алыр. Үҙ-ара, Кавказ халыҡтары кеүек, бер-беребеҙ өсөн йәнебеҙҙе аямай, һәр саҡ ярҙамға килергә ынтылып торорлоҡ итеп ойошһаҡ ине, тип хыялланам.

**Гөлйемеш ИШМЫРҘИНА, уҡытыусы:** Нимә генә тиһәләр ҙә, татыу беҙҙең йәштәр, берҙәмдәр. Әммә ана шул баҫалҡы булыуҙары ҡайһы саҡта ҡамасаулай тип уйлайым. Ауыл йәштәре бигерәк тә һүлпән. Бәлки, уларға лидер етмәйҙер? Йәштәр өсөн хәҙер мөмкинлектәр күп, уларҙы файҙаланырға, заман талаптарына яраҡлашырға кәрәк беҙҙең егеттәргә һәм ҡыҙҙарға ла. Шулай уҡ йәштәребеҙҙе яманлыҡҡа әүрәткән нәмәләр ҙә күп, уларға ылығып китеүҙән һаҡларға кәрәк уларҙы. Һаҡланыу сараһын йәш кеше үҙе күрергә тейеш, ата-әсә балаһына эйәреп йөрөмәй бит. Наркотиктар, алкоголле эсемлектәр генә түгел әүрәтеүсе нәмәләр, ә еңел тормош, аҡса менән мауығыу ҙа йәштәрҙең бәләһенә әйләнә бара бит. Шул арҡала ҡыҙҙарҙың фәхишәлеккә бирелеүе мөмкин. Алла һаҡлаһын ошондай бәләләрҙән балаларыбыҙҙы. Ата-бабаларыбыҙ аҡылына ҡолаҡ һалһаң, бер ҡасан да, бер кемгә лә, бер нәмә лә еңел генә бирелмәгән. Юҡҡа ғына "Тырышҡан тапҡан, ташҡа ҡаҙаҡ ҡаҡҡан", "Уҡыу - энә менән ҡойо ҡаҙыу" тигән мәҡәлдәр барлыҡҡа килмәгән. Ташҡа ҡаҙаҡ ҡаға алырлыҡ йәштәребеҙ күп бөгөн, Аллаға шөкөр, улар айыҡ, сәләмәт тормош менән йәшәй, гөрләтеп донъя көтә, ғаиләләрен ҡарай. Улар өлгөһөнә башҡалар ҙа эйәрһә, киләсәгебеҙ ышаныслы буласаҡ.

**Алһыу ҠЫҘРАСОВА, студент:** Башҡорттар ошо хозур ерҙәрҙең аҫабаһы булараҡ та, данлы ата-бабаларының рухына тоғролоҡ һаҡлап та, республикабыҙҙа йәшәгән башҡа милләт вәкилдәренә бар йәһәттән өлгө күрһәтеп йәшәргә тейеш. Сөнки беҙ үҙебеҙҙе нисек тотоуға ҡарап, башҡалар ҙа үҙҙәрен шулай тота. Әгәр ҙә башҡорт үҙ ерен, йылғакүлдәрен бысратыуға битараф ҡарай икән, тимәк, бүтәндәргә лә уларҙың таҙалығы кәрәкмәйәсәк. Тимәк, еребеҙҙе, тәбиғәтебеҙҙе һаҡлау әләмен иң тәүҙә беҙ күтәрергә тейешбеҙ, ерҙәге сүпте иң тәүҙә беҙ эйелеп алырға тейешбеҙ.

Беҙҙең йәштәребеҙ ихлас, ябай, изге күңелле. Әммә алкоголле эсемлектәр ҡулланыу йышайыуы арҡаһында был матур сифаттар күп саҡта күренмәй ҡала. Эскелек милләтемдең абруйын төшөрә. Был мәсхәрәнән ҡотолоу юлдары күп, тик һәр кеше уны үҙе табырға тейеш. Башҡорт йәштәре көтөүҙәге һарыҡ хәленән, ҡайҙа борһаң, шунда барам, принцибынан арынырға тейеш. Шул осраҡта ғына беҙ ата-бабаларыбыҙҙың рухи мираҫына хыянат итеүҙән туҡтаясаҡбыҙ. Башҡортостаныбыҙҙың киләсәге - айыҡ, рухлы, азат башҡорт йәштәре ҡулында.

**Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.**




**Беҙ быға тиклем Баймаҡ ҡалаһында йәшәүсе яҡын дуҫыбыҙ, әүҙем авторыбыҙ Урал Мостафинды нескә хисле лирик-философ шағир, донъяның һәр төрлө күренештәре хаҡында тәрән уйлана, фекер йөрөтә белеүсе тынғыһыҙ йәнле публицист итеп белә инек. Баҡтиһәң, "Ябай кешенең ҡатмарлы фекерҙәре" рубрикаһын алып барыусы авторыбыҙ тәрән психологик планда әҙәби әҫәр ҡора белеүсе прозаик та икән. Бына һиңә ябай кеше! Беҙ уның был сифатын быға тиклем баҫылған повесында тойомлағайныҡ, ә хикәйәләрендә иһә Урал Мостафин психологизм йүнәлешендә нығыраҡ асыла. Яңыраҡ ул беҙгә "Сәғит Агиш исемендәге хикәйәләр конкурсы"на бер юлы ике хикәйә ебәрҙе. Уларға уҡыусыларыбыҙ үҙҙәре баһа бирер. Әммә шул да мәғлүм булһын: башҡорт әҙәбиәтендә кеше күңеле төпкөлөнөң шундайын сөңгөлдәренә төшөп әҙәби әҫәр яҙыусы авторҙы беҙ осратҡаныбыҙ юҡтыр. Һәр хәлдә, гәзит уҡыусыларыбыҙ беҙҙең фекерҙе хуплар тип уйлайбыҙ. Авторҙың хикәйәләрен һеҙҙең иғтибарға тәҡдим итәбеҙ. Икенсе хикәйәһе киләһе һанда баҫылыр.**

Мират, быға тиклем ҡулы теймәгән эш ҡағыҙҙарын ҡараштырып, тәртипкә килтереп ултырып, һуңлаңҡырап киткән икән. Кабинетынан сыҡһа, коридорҙа биҙрә даңғырҙатып һөйрәп йөрөгән йыйыштырыусыларҙан башҡа берәү ҙә күренмәне. Ҡайтыу яғына ыңғайлағайны, ҡаршыһына хәләл ефете осраны.

- Мине ҡаршы алырға килә ятаһыңмы әллә? - тине Мират аптырау ҡатыш шикләнеү менән.

- Эштән ваҡытында ҡайтҡаның бармы? Әхирәтемә ҡунаҡҡа китеп барам...

- Малайҙар өйҙәме? Тамаҡтарына ашаттыңмы?

-Улар ҙа әллә ҡайҙа сығып ҡасты. Өйҙә бер үҙем ҡарасҡы һымаҡ ултырғансы тип, сыҡтым да киттем. Бар, ҡайт та яңғыҙың ултырып ҡара! - тине лә шәп-шәп атлап үҙ юлы менән китеп барҙы ҡатыны.

Былдай көтөлмәгән дәғүәгә ни әйтергә лә белмәй, шаңҡып торҙо ла ҡалды Мират. Ҡатыны улай ҡыланмай торғайны. Эстән генә асыу йыйып йөрөй икән дәһа. Ҡатынының һүҙҙәренән йортон ысынлап та ҡотһоҙ ҡарасҡылай итеп күҙ алдына килтереп, ҡайтҡыһы килмәне лә ҡуйҙы. Күпме эшемде атҡарып сыҡтым, тигән ҡыуаныслы кәйефе юҡҡа сыҡты. Аяҡтары, үҙҙәренән үҙҙәре өйө яғына түгел, икенсе урамға атланы. Бер ҡарарға ла килмәне, бер ниндәй маҡсаты ла юҡ һымаҡ, ә үҙе, ҡапыл боларған тойғолары йоғонтоһона бирелеп, китеп тик бара. Башында буталыш: эше тураһындамы, өйө тураһындамы, ҡатыны әйткәндәрҙе уйларғамы? Әллә... Туҡталышта бер төркөм уҡыусы балалар торғанын абайлап, ҡайҙа китеп барам икән, тигән һымағыраҡ ян-яғын байҡаны. Ярай, исмаһам, ҡайһы яҡҡа китеп барғанын төҫмөрләне, ураy булһа ла, үҙ яйына йәйәүләп ҡайтыр. Юл ыңғайында әлегә тиклем күңелен борсоған уйҙарынан арыныр, хәрәкәттән тәненә ҡан йүгерер, былай иркенләп, һәүетемсә генә хисләнеп, үҙ яйыңа донъя ҡыҙырыу йыш тәтемәй эш кешеһенә....

"Улым, балаларыңа бәләкәй саҡтарында етерлек иғтибар бүлмәһәң, етәрлек һөймәһәң, иркәләмәһәң, күңел йылынды биреп еткермәһәң, тормош тәжрибәңде тапшырмаһаң, һөнәргә өйрәтмәһәң, олоғайғас шул хәтлем ныҡ үкендерә",- тигәйне атаһы бер һөйләшеп ултырғандарында. Әллә ниңә уның әсенеп әйткән һүҙҙәренә, өлкәндәрҙең ғәҙәттәге мыжыуы тип ҡабул итепме, артыҡ иғтибар бирмәне. Атаһының әйткәндәрен иҫләне лә, үкенеп ҡуйҙы. Сөнки балалары иркәләп, һөйөп тәрбиәләү йәшенән күптән үткән. Һинең өгөт-нәсихәттәреңде тыңлау түгел, үҙеңә аҡыл өйрәтерлек белемлеләр, үҙһүҙлеләр, тәкәбберҙәр. Ҡартатай, ҡартәсәйҙәр ейән-ейәнсәрҙәрен үҙ балаларынан да яҡыныраҡ күрә, үлә яҙып ярата, тигән билдәле фекергә лә ҡаршы дәлилдәр юҡ бит. Бушҡа ғына түгелдер. Улар ваҡытында үҙ балаларына биреп еткермәгән хис-тойғоларын балаларының балаларына йомарт өләшеп, намыҫтары алдында аҡланып, үҙҙәрен йыуаталыр, үкенеп һыҙлаған, борсолоп ыҙалаған йәндәрен тынысландыралыр, күрәһең...

- Дядя, дай закурить! - Берәүҙең һөрәнләгәне баяраҡ та ҡолағына салынғайны инде, уйҙарына батып барып, иғтибар итмәгәйне. Сәрелдәк кенә тауышы менән, ана, ҡайһылай талапсан ҡысҡыра берәү.

- Дядя, тебе говорят! Дай закурить! - Был уҫал, янаулы тауыш ҡатмарлы уйҙарынан тамам арындырҙы.

- Не курю и тебе не советую, - тине лә, тауышҡа әйләнеп ҡараны. Бер ҡыҙыҡай йүгерә-атлай уға етеп килә. Мират ҡапыл аптырап ҡалды. Алыҫтан ишетелгән һымаҡ булһа ла, тауыштың эйәһе артында ғына тора икән. Ҡараштары ҡыҙҙың башы аша туҡталышҡа төбәлде. Баҡтиһәң, ундағы балалар ҙа был тамашаға битараф түгел: ары нимә булыр икән, тигән кеүек, иғтибар менән күҙәтәләр. Үҙҙәрен тотоуҙарынан, ҡыҙыҡ-маҙар була ҡалһа, ҡушылып уйнарға әҙер тороуҙары шикһеҙ. Бөтә ҡыҙыҡһыныуҙары, бәлки, өлкән кешенең был хәтәр хәлдән нисек лайыҡлы сығыуын ғына күҙәтеүҙер? Ләкин уларҙың ҡиәфәттәре тамашаны ситтән күҙәтеү менән генә сикләнеүгә, шуның менән генә ҡәнәғәтләнеүгә һис тә оҡшамаған. Тәндәре, күҙҙәре, ҡараштарындағы көсөргәнешлек үҙҙәренең дә йүгерергә әҙер тороуын сағылдыра ине. Шул минутта, ниңәлер, Мираттың аңында телевизорҙа күргән, гәзиттәрҙә уҡыған хәҙерге йәштәргә хас төрлө хәүефле күренештәр терелде. Быға хәтлемге булған хәлдәргә тертләгән, тетрәнгән күңелендә береһенән береһе аяуһыҙыраҡ, ҡурҡыныcыраҡ ваҡиғалар яңырҙы. Эстән кисергән уй-хистәренән албырғап, икеләнеү, шикләнеүҙәрҙән тарҡалған аңы, ҡапыл килеп тыуған хәтәр хәлде дөрөҫ баһалап, уға ҡаршы торорлоҡ ҡарар ҡабул итер һәләтен юғалтҡайны. Йәне, хәүефле хәлдән сығыу өсөн ҡанына һеңгән иң боронғо, иң ҡырағай, иң ябай ҡасып ҡотолоу һәләтен уятты. Йәндең үҙен һаҡлау тойғоһо, төпкө аң тәьҫире, тән хәрәкәте көсө уны кисекмәҫтән йүгерергә, хәүефле урындан ҡасырға мәжбүр итте. Шул тәбиғи көскә бирелеп, кәүҙәһе алға уҡталды. Тәүҙә аҙымдары йышайҙы, шунан йүгереүгә күсте, аяҡтарын тыя алмай, ҡасты...

- Дядя, дай закурить! - Хәҙер бер генә тауыш сәрелдәмәй ине. Күҙ ҡыры менән генә туҡталыштағы бөтә төркөмдөң уның артынан сапҡанын шәйләне. Әлбиттә, йәштәр етеҙерәк, ләкин улар төрткөләшеп, эткеләшеп, берберенә ҡамасаулай, өлкән кешенең аҙымдары киңерәк, шулай ҙа аралары яҡын ғына ҡала бара. Хәҙер генә ҡыуып етеп, бөтә һөйәктәрен иҙгеләп, ағзаларын ботарлап, өҫтөнән үтеп китерҙәр кеүек. Ҡайҙа ҡасырға, нисек ҡотолорға? Ниңә ҡасырға? Кемдән ҡотолорға? Ни өсөн? Уларҙың алдында ни ғәйебе бар һуң? Яңы саҡ шуларҙы аңлар хәлгә етте. Ләкин һуң ине инде. Ҡасып, баҫтырыусыларҙа табыш артынан ҡыуыусы йыртҡыстар көтөүенең ҡырағай хисен уятты: ҡурҡыуын күрһәтеп, ҡандарын ҡыҙҙырҙы, көстәренә, өҫтөнлөктәренә ышаныс тыуҙырҙы. Ошо ерҙә ҡапыл туҡтап, ҡаршы барыр инең, ҡыҙыулыҡтары менән тапап үтәсәктәр. Уларҙы хәҙер бер көс тә туҡтата алмаҫ. Бәлки, улай ҙа булмаҫ, эргәңдән йүгереп үтер ҙә китерҙәр? Бына бит кеше, минутлыҡ эске тойғо тәьҫиренә бирелеп, үҙен-үҙе ниндәй ҡурҡыныс хәлгә ҡалдыра. Бөтә бәлә шул теле-, киноэкрандарҙа күргән ҡурҡыныс күренеш һындарының аңға һеңеүе һөҙөмтәһелер: һәр ваҡыт әҙәм йәненә ҡайҙандыр үлемесле ҡурҡыныс янай, тигән иҫкәртеү туҡтауһыҙ һеңдерелә. Кеше, күрҙем дә оноттом, тип уйлаһа ла, алама күренеш аңына йоғоп, ҡасан булһа ла шауҡымын һиҙҙерә.

Әлеге хәлен бер төркөм йәштәр менән шаярып ҡына башлаған зарарһыҙ уйынға әүерелдереп, үҙен тынысландырыр ине, тегеләренең ҡылыҡтары ҡыҙыҡ уйын уйнауға бер ҙә оҡшамаған. Эттәрҙән, ғөмүмән, йыртҡыстарҙан ҡурҡҡанды күрһәтеп ҡасырға ярамағанын белә тороп, кеше ҡаса һәм сараһыҙҙан уларҙың йәнендә ҡорбанын эҙәрлекләү тойғоһон уята. Өйөрҙә көтөү психологияһы көслө! Өйөр бер ҡаҡшамаҫ берәмеккә - көтөүгә тупланыуы менән көсөн тоя, өйөр дөйөм хәрәкәт хисенә бирелә, өйөрҙә шәхси яуаплылыҡ тойғоһо һүрелә, яза алыу ҡурҡыныcы юғала. Сәрелдәк яңғыҙ тауышты ишеткәс тә, туҡтап, ҡаршы барһа, бәлки, янау, ҡурҡытыу тойғоһо шунда уҡ ҡаҡшатылыр, баҫылыр, өйөрҙөң артыҡ ҡыйыу дәрте һүрелер ине. Ләкин йөрәге ниндәйҙер янау, ҡурҡыныс һиҙеп, йүгерергә, ҡасырға бойорҙо бит! Икеләнеп тә тормай: "Ҡас!"- тине. Был хәлдән ҡасып ҡотолоуың хәйерлерәк, тине аңы ла. Хәҙер инде булған хәлдең сәбәптәрен, аҡланыу юлдарын эҙләү түгел, имен-аман ҡотолоу юлын эҙләргә, кешеләр араһына барырға кәрәк! Шул уҡ өйөр психологияһы буйынса, ҡурҡыныс янағанда йән үҙе кеүектәр араһына һыйынырға теләй, шунда ҡотолоу сараһын эҙләй. Ләкин ҡайҙа һуң кешеләр? Урам бупбуш, бер әҙәм заты күренмәй. Киләһе туҡталышта, бәлки, кешеләр барҙыр? Кеше йөрөмәй торған мәл шул: бөтәһе лә эштән ҡайтып, өйҙәрендә бер-береһенә һыйынған. Ул ғына япа-яңғыҙы! Ул ғына ҡорбан хәлендә! Ышығына һыйыныр, бәләһенән ҡотҡарыр бер йән эйәһе юҡ! Йәнеңә ҡурҡыныс янағанда уның менән ҡапма-ҡаршы яңғыҙың ҡалыуы бигерәк аянысл икән...

"Баҙар яғына йүгерергә кәрәк!" Йәнен ҡотҡарырҙай был уйҙан йөрәге йылынып киткәндәй булды. Ысынлап та, моғайын, унда кешеләр барҙыр: баҙар күптән бөтһә лә, һатыусылары тиҙ генә таралыша һалмай, әйберҙәрен урынлаштыра, йыйыштыра. Фәҡәт шул яҡҡа йүгерергә кәрәк! Юҡ, туҡтарға һис кенә лә ярамай! Үҙең ҡул күтәрмәһәң дә, үҙҙәре һиңә ырғып имгәнер, яраланыр, шунан һине ғәйепләрҙәр. Ҡасҡас, ҡасып ҡына ҡотола алаһың! Ҡаршы тора алған хәлдә лә, үстәрен алыр өсөн, береһен туҡмарҙар ҙа, һин туҡманы тип яла яғырҙар, күмәкләп шаһит булырҙар - бер үҙең нисек аҡланырһың? Хәҙер улар беҙгә ҡарағанда ла күберәк белә. Әлбиттә, күберәк яуызлыҡ, яманлыҡ, аҙғынлыҡ өлгөләрен. Кемгә ышанырҙар? Саф йәнле, тип иҫәпләнгән балаларғамы, әллә һиңәме? Әлбиттә, балаларға! Шунан ғүмергә әшәке исем тағылыр. Буштан-бушҡа йүгермәй улар. Араларында ҡотортоусы бар! Башҡалары - һарыҡ көтөүе, башлыҡтары нимә әйтә, уйһыҙ ҙа шуға буйһоналар, ярарға тырышалар, ярамһаҡлананалар. Ғәҙәттә, иң ныҡ өйөр яҡлы булып ҡыланыусы - ул өйөрҙәге лидерға конкурент була алмай ыҙалаусы. Ул һәр ваҡыт башҡаларҙан айырылып күренеү, лидерға ярамһаҡланыу, башҡалар уның өҫтөнлөгөн күрһен, баһалаһын өсөн алға йүгереп сыға. Хәленән килгәнде, килмәгәнде лә эшләп, өйөрҙә абруй яуларға тырыша. Ул өйөр башлығынан көнләшә, уны күрә алмай, өҫтөнлөгөн күрһәтер өсөн, үҙ йәненә янаған хәүефтәрҙе лә һанға һуҡмай, ҡайһы саҡта әллә ниндәй ҡурҡыныстарға ла ҡаршы ташланырға һәләтле була.

Мират баҙар ҡапҡаһы алдына еткәс, ҡыҙыулығы менән унан сығып килгән кешене төкөп йыға яҙҙы. Ҡараһа, күптәнге танышы Фәрит икән. Ҡасан уның алдына килеп туҡтағандыр. "Ҡотолдом", тигән шатлыҡлы уй йәнен тулҡынландырҙы, йөрәгенә йылы өрҙө. Был осрашыу ғүмерендә көткән иң ҙур бәхете кеүек булды.

- Ҡайҙа ул тиклем ашығып сабаһың, ҡорҙаш? Һаумы!

- Һаумы, һаумы, Фәрит дуҫ! Ана, йәштәр менән баҫтырыш уйнайым, - тигән булды, һығылған тауышы менән, йыш-йыш тын алып. Электән таныш ҡорҙашына быға тиклем бер тапҡыр ҙа дуҫ тип өндәшмәгәнен аңғарҙы. - Хәл юҡ икән бөтөнләй. Ҡыҙыҡ күреп, ярышып ҡараған булғайным, беҙҙең шәп мәлдәр үткә-ә-н. - Ҡорҙашы алдында уңайһыҙ хәлдән сығыуҙы шулай алдашыуҙа күрҙеме, әллә ҡурҡҡаны өсөн үҙен-үҙе йыуатып, меҫкен йәнен аҡлап маташтымы? Уныһы мөһим дә түгел инде: бәләһенән ҡотолдо бит. Әллә-ә-ә, ҡотолдомо икән?

- Эштән ҡайтып бараһыңмы? Был яҡтарҙа ни йомош? Баҙар бөттө бит...

- Юл ыңғайы әҙерәк тәнде яҙайым тип, ошо яҡтан ҡайтырға уйлағайным. Бисә ҡунаҡта йөрөй, балалар үҙ кәсептәре менән мәшғүл, өйҙә эт тә юҡ, - тип, әллә зарланды, әллә көйҙө. - Һин нишләп йөрөйһөң бында?

-Былай ғына инеп ҡарап сыҡтым. Берәй таныш осраһа, әҙерәк әңгәмәләшеп, күңелде бушатып алырға ла уйлағайным. Бер кемде лә тап итмәгәс, ҡайтырға сыҡҡайным... - Быға хәтлем йән халәтен һиҙҙермәҫ өсөн артына әйләнеп ҡарарға ла ҡыймаған Мират, әҙерәк тынысланғас, иптәше хәбәр һөйләшкән арала ян-яғына ҡаранып, хәлде байҡап алды.

- Әйҙә, ҡорҙаш, ҡаршы булмаһаң, әҙерәк һөйләшеп ултырайыҡ, ҡасандан бирле күрешкән юҡ. - Үҙе эстән генә, был риза булмайынса, ҡайтып китмәһә

***✓ Үҙенең өҫтөнлөгөн тойоу ләззәтен йәне, тәненең бөтә күҙәнәктәре менән татып ярһыны. Төркөмдөң ҡаушауын һиҙгән һайын, ҡотороп ярһыны, уларҙы баҫтырып етеп, фотоаппаратын һәр береһенең күҙенә тоҫҡағыһы килде.***

генә ярар ине, тип хафаланды. Хафаланырлыҡ шул, баҫтырыусылары бер ситтә эркелешкәндәр ҙә, ары ни булыр икәнен һағалап торалар бит. Ошонан уҡ ҡандары ҡыҙған, күҙҙәре аларған, йәндәре ҡуҙғырғанлығы һиҙелеп тора. Улар ҡорбанынан еңел генә баш тартырға уйламай. Уңайы килеп сыҡһа, хәҙер үк яңынан ябырылырға әҙер торалар кеүек. Ҡыуып еттек, тигәндә генә тырнаҡтарынан ысҡынды бит.

Бәхетенә күрә, баҙар урамындағы кафе ишараты асыҡ икән. Аяғөҫтө генә тороп тамаҡ ялғарлыҡ өҫтәлдәре лә бар. Фәрит, эскә үтә һалып, бер шешә һәм стакандар, ә кибет хужаһы ике ҡулына тәрилкәләр тотоп, йүгерә-атлай килеп сыҡтылар. Эй, ошо тау халҡының үҙ файҙаһын күрә белеүҙә йылдамлығы, яғымлығына иҫең китер. Килгән бер кешене, оҙаҡ көтөп алған иң ҡәҙерле ҡунағы кеүек, хатта иң яҡын туғаны кеүек ҡаршы ала, уға йылы һүҙен таба, ярай белә. Шулай уйланғанда, үҙенең минутлыҡ ҡурҡыуына бирелеп, бер төркөм балалар менән аңлаша алмай, уларҙан ҡасҡанына ғәрләнде. Ҡастың, әллә ҡурҡырлыҡ сәбәбең бармы? "Намыҫы таҙа кеше ишек шаҡыуҙан ҡурҡмай", тип әйтә ҡытайҙар. Әлеге йәнен баҫҡан бәләһендә үҙе ғәйепле икәнен танырға ла оялған Мират, үҙен балаларҙың "уйынын" ҡабул иткән кеше кеүек хис итеп, йыуатырға тырышты. Әйҙә, нимә ҡыла алырһығыҙ икән, тигән кеүек, тегеләрҙән юрый ғына ҡасҡан булған да, уларға мыҫҡыл итеп, көләмһерәп кенә ҡарап тора, йәнәһе. Эйе, үҙен шулай ҡурҡаҡ түгелмен, тип әүрәтергә эргәһендә ҡурсалаусыһы бар бит. Шул уҡ мәлдә: "Ниңә йүгерҙем? Ҡурҡтыммы? Ниндәй меҫкен хискә бирелдем? Нисек был оят хәлдән лайыҡлы сығыу әмәлен табырға?" тигән һорауҙар йәненә тәҡәт бирмәне.

- Әй, әй! Ниңә өндәшмәйһең? Ниндәй уйҙарға бирелдең ул тиклем, мине ишетмәйһең дә шикелле. Хәбәрем менән ялҡыттымдамы? Ҡапмайһың да...

- Юҡ, юҡ! Фәрит, ғүфү ит! Анау балаларға ҡарап аптырап торам, беҙ ҙә шулай эркелешеп йөрөнөкмө икән, көтөү кеүек?

- Балалар төркөмдәргә берләшеп, берҙәмлектәрен тойоп йөрөргә ярата инде. Ниңә уға аптырайһың? Шул мәлдә улар үҙҙәрен хәүефтәрҙән һаҡланған кеүек итеп тоя. Заманында беҙ ҙә командаларға бүленешеп, сафтарға теҙелешеп, йырлашып, бер-беребеҙҙең иңен тойоп, бер-беребеҙҙе аңларға өйрәндек бит. Тәүҙә октябряттар, шунан пионерҙар булдыҡ. Ә комсомолда өлкәндәргә эйәреп, уларҙың берҙәмлек көсөнә таянып, арҡаланып, уларҙан ҡурсаланып, тормош тәжрибәләрен алып үҫтек. Ул ваҡытта шундай берҙәмлек булғанға ла ситкә тайпылыусылар, яман юлдан китеүселәр һирәгерәк булғандыр, тип уйлайым. Тарҡаулыҡта үҫкән йәштәрҙең заманаһы килде илебеҙгә. Улар үҙ маҡсатына өлгәшер, шәхсән мәнфәғәттәрен яҡлар өсөн алдашыу, урлашыу, хыянатлашыу ғына түгел, үҙе кеүектәрҙең боғаҙынан алыр, үңәстәрен кимерергә һәләтле...

Мират Фәрит ҡорҙашынан был тиклем төплө, дәлилле фәлсәфә көтмәгәйне. Әллә күңеленең төбөн көйҙөрөп ятҡан уйкисерештәрен асып һалдымы? Бөгөнгө донъя, йәшәйештәге күренештәр, ғәҙәт-ғәләмәттәргә хайран ҡалып, эстән генә янып-көйөп йөрөгән кеше ул ғына түгел, имеш. Ысынлап та, балаларҙың ойошмаларын тарҡатып, формаларын тартып алып, уларҙы берләшеп бер-береһен яҡлауҙан, бер-береһенең иңен, берҙәмлек көсөн тойоуҙан, бер-береһе өсөн яуаплы булыуҙан мәхрүм итеп, өлкәндәр үҙҙәре төрлө төркөмдәргә, партияларға берләште, төрлө тәтәйҙәр тағылған сағыу төҫтәге формалар тектереп кейҙе. "Берлектә - бәрәкәт, тарҡаулыҡта - һәләкәт" икәнен улар яҡшы белә. Өлкәндәр тәжрибәле, улар аҡыллы, хакимлыҡ дилбегәләре лә үҙҙәренең ҡулында булғас, әлбиттә, иң алда үҙҙәренең хәүефһеҙлеген, үҙҙәренең уңайлығын, үҙҙәренең мәнфәғәттәрен уйлай! Бер төрлө формаға кейенгән командала йөрөһәң, яңғыҙ түгелһең! Әлеге лә баяғы өйөр берҙәмлеге көсө тыуа. Икенсенән, форма кейеп, аламалыҡ ҡылһаң, шул формалағыларҙы оятҡа ҡалдырып, уларҙың нәфрәтен, язаһын алыу ҡурҡынысы һәр кемде тәртип ҡағиҙәләренә буйһоноуға, тотанаҡлыҡҡа күндерҙе. Балаларҙы шул яҡлаулы булыуҙан, ярҙамсыллыҡтан, яуаплылыҡтан мәхрүм иткән өлкәндәр нимә уйлай икән?

Һөйләшкән арала стакандарынан да уртлап алдылар. Ҡорҙашының теле асылыуының сәбәбе лә шундалыр, күрәһең. Күпме һөйләһә лә риза, тик ҡайтырға тип кенә ҡуҙғырмаһа ярар ине, сөнки, ана бит, баҫтырыусылары: "Ҡотолдом тип уйлама, барыбер беҙгә эләгәсәкһең" - тигән кеүек, һаман ҡаштары аҫтынан һөҙөп уҫал ҡарап торалар. Уларға әнә осондай ғына зыяным тейһә - бер хәл! Ә ҡылыҡтарына ҡарағанда, мин уларҙың аталарын атҡан дошмандары тип уйларһың. Туҡта әле! Бәлки, ысынлап та, бөтә бәлә шундалыр? Һәр бер ҡатмарлы хәлдең сәбәбен табыу - ул хәлде еңеү менән бер бит. Сәбәптәрен тапһаң, ауыр хәлдән сығыу юлын табыуы ла еңел. Ул быға тиклем ниңә ҡурҡты, шомланды, сәбәләнеүгә бирелде? Сөнки балаларҙың уға төбәлгән агрессияһының сәбәбен аңламаны, шуға күрә лә, ҡапыл ҡаушап, самаһыҙ ныҡ ҡурҡты. Хәҙер әҙерәк аңлай башланы, шикелле. Бәлки, бөтә сәбәп уның вазифалы эштә булыуындалыр? Яуаплы хөкүмәт эшен атҡарғанда күп кешеләр менән аралашырға, сәкәләшергә, һүҙгә килешергә лә тура килә. Эше буйынса төрлө кимәлдәге, төрлө вазифалағы етәкселәр менән дә ҡатнаша. Эш булғас, төрлө мәлдәр, төрлө хәлдәр булып ҡына тора: тәнҡитләргә лә, әрләргә лә, яуапҡа тарттырырға ла тура килә ҡайһы бер артыҡ шашып киткәндәрен. Әллә... Арабыҙҙа кеҫәһендә йоҙроҡ төйөп йөрөүселәр аҙ түгел бит, беләбеҙ! Үҙе менән тиң көслөләргә ҡаршы торорлоҡ көсө, батырлығы етмәгәс, үсен башҡаларҙан, үҙенән мөсһәҙҙәрҙән, үҙенә бәйлеләрҙән йә үҙенә буйһоноусыларҙан ала. Халыҡ "Көслөнән ҡурҡма, үсленән һаҡлан", тип бушҡа ғына әйткән тиһеңме? Атаһының көсһеҙлөгөн күреп, ғәрләнеп үҫкән бала атаһының меҫкенлеге өсөн үсен алып маташалыр. Бик ихтимал! Хәҙер етәксе урындарҙа фәҡәт ошо йәштәге балаларҙың ата-әсәләре күберәк эшләй.

Был балаларҙың араһында мотлаҡ лидер булырға тейеш. Төркөмдән шул баланы айырып алғанда, өйөр, һис шикһеҙ, тарҡаласаҡ! Һис юғында, төркөмдән теләһә ҡайһы береһен генә айырып алғанда ла, бер-береһенә ышанмаусанлыҡ, шикләнеү тыуыуы арҡаһында, өйөрҙөң тылсымлы тәьҫир көсө юҡҡа сыҡмаһа ла, кәмейәсәк! Төркөмдә урыҫ, мосолман балалары, тимәк, урыҫтар араһында мотлаҡ Саша, Сергей йәиһә Настя, Валя исемле, мосолмандары араһында хәҙерге киң таралған исемдәрҙән, шикһеҙ, Азамат, Илдар йә Лилиә, Гүзәл исемлеләр булырға тейеш. Береһен таныған кеше булып, исемләп өндәшергә кәрәк. Ысынлап та араларында шундай исемлеһе булһа, уны танығандарын аңлаған бала башҡалар алдында баҙап ҡаласаҡ. Башҡаларында уға ҡарата шикләнеү, икеләнеү тыуасаҡ, ҡурҡасаҡтар. Бәлки, әңгәмәсе дуҫы береһен таныйҙыр?

- Анау балалар беҙгә текләшеп ҡарап тик тора. Һине танып туҡтап ҡалдылармы, әллә беҙҙән берәй нәмә кәрәкме икән? Ят кеше барҙа яҡын килергә уңайһыҙланалар ҙыр, танышың булһа, саҡырып һора.

- Юҡ, береһен дә танымайым, шикелле. Юҡ, точно, береһен дә белмәйем...

Был хәйлә лә килеп сыҡманы. Исемләп өндәшеп ҡарарға кәрәк. Араларында ундай исемлеһе булмаһа ла һиҫкәнерҙәр, танып ҡуйырҙар тип, таралырҙар.

- Саша, иди сюда! - Бер бала, ысынлап та, торған еренән ҡуҙғала биреп ҡуйҙы, үҙенә өндәшкәндәрен аңлаптыр, ҡаушап ҡалды, башҡалары ҡапыл унан ситкә тайпылған кеүек күренде. Ләкин был япраҡҡа еләҫ кенә ел ҡағылыуы кеүек үҙгәреш һиҙелерлек тә булмағандыр. Төркөм йәһәт кенә үҙ хәлен тергеҙҙе, текләп тороуын дауам итте. Бәлки, ныҡышмалыраҡ, бойороп әйтергә кәрәктер? Ҡабатларғамы, юҡмы? Икенсе исемде әйтһәң, бөтә эште боҙоп ҡуйыуы ла ихтимал. Ярай, ары нимә булыр икән, әҙерәк көтөргә кәрәк. Уларҙың да күңеле тыныс түгел бит инде, уларға ла шом килде. Һәр береһе эстән генә уйлана. Һәр береһе килеп тыуған хәлде анализлап, үҙ хәлен хәстәрләүҙе ҡайғырта. Уйланһындар әйҙә! Уйланыу хәленә еткереү үҙе еңеүгә бер аҙым. Бәлки, үҙ-ара бәхәсләшә, дәғүәләшә башларҙар, ризаһыҙлыҡ белдереүсеһе лә табылыр. Улар бөтәһе лә бер төрлө түгел бит: береһе генә булһа ла килеп тыуған мәғәнәһеҙ көсөргәнешлеккә оҙаҡ түҙмәйәсәк. Көтөргә кәрәк, күҙ күрер.

- Ярай, оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы, ҡайттыҡмы? Һөйләшергә лә артыҡ теләгең юҡ шикелле. Иҫәңгерәгән кеше кеүекһең. Эштәме, өйөңдәме берәй хәл булдымы әллә? Алсаҡ, ихлас була торғайның, бөгөн бигерәк иләҫ-миләҫһең... - Уй, Аллам, бәләһенән ҡотҡарыусы фәрештәһе ишетергә ҡурҡҡан һүҙҙәрен әйтте бит, тәки. Һиңмайланып торған арала шешә лә бушаған икән...

- Юҡ, юҡ! Аптырама, ғәфү ит! Үҙ кисерештәремә биреләм дә китәм шул. Проблемалар күп инде ул, беҙ ҡасан унһыҙ йәшәгәнебеҙ бар? Был кибеттең хужаһы һәйбәт танышың күренә, стакандарға әҙерәк ҡоярлыҡ нәмәһе тағы бармы икән, мин һыйлайым. Бер ыңғай, фотоаппараты йә бинокле булмаҫмы, шуны ла белеш сәле. - Был уй ҡапыл ғына ҡайҙан башына килде, уйлап та өлгөрмәне, һораны ла ҡуйҙы.

- Әллә. Белешәйем. Улар һиңә нимәгә кәрәк булды тип һорамайым да, аптыраттың бөгөн, ҡәҙимге! Ҡойғанды бер нәмә ҡапмайынса һыу кеүек йотоп тик тораһың, өҫтәргә һорайһың. Ғүмерҙә ҡыланмағанынды...

- Әйттем бит, бөгөн әллә ниндәй сәйер кәйеф баҫты. Үҙем дә аптырайым... Анау балаларҙың береһен төҫмөрләгән кеүекмен, әллә яңылышаммы икән, тип үҙемде тикшереп ҡарайым тигәйнем. Биноклдән ҡараһам йә фотоға төшөрөп, малайҙарыма күрһәтһәм, үҙемдең яңылышмауыма инанып инем.

- Тапҡанһың ҡыҙыҡ. Ул баламы, түгелме, ниндәй айырмаһы бар?

- Ярай, ҡыйын түгел бит, белешеп кенә сыҡ инде.- Инәлеп тигәндәй үтенде.

- Хәҙер алып килә... - тип, үҙалдына тағы әллә нимәләр өсөн һуҡрана-һөйләнә, йәтеш кенә шешә тотоп килеп сыҡты иптәше. Кибет хужаһы шул арала йүгерә-атлай күрше кибет яғына ыңғайланы. Бигерәк бөтмөр инде ул тау халҡы. Үҙенә кәрәк кешеһенә ярай ҙа, күңелен таба ла беләләр. Ул ярамһаҡлы холоҡтарынан ғәрләнмәйҙәр ҙә. Ана, ҡайһылай ҙур йомош үтәгән кешеләй әрһеҙләнеп йүгерҙе, тапмайынса килмәҫ, ахыры. Шулай тип уйлап та өлгөрҙө, өҫтәлгә фотоаппарат килеп тә ятты.

Бороңғо һәйбәт фотоаппарат. Кем уны нимәгә тоталыр бында. Исмаһам, пленкаһы бармы икән? Ярай, һөйләнмә! Һораның, теләгеңде үтәнеләр, тағы нимә кәрәк? Һиңә бит кадрға төшөрөү йоғонтоһон күреү, шуны ғына файҙаланыу шарт. Үҙен сәпкә алынған объектка әүерелдереп, тоҫҡап фотоға төшөрөп алғандарын күргән йән, сәбәбен белмәйенсә, янауын аңламайынса, бер ваҡытта ла тыныс була алмай. Был хәлдә үҙен ҡорбан итеп тоя, кемдер уға һунарға сыҡҡан тип уйлай. Һаҡланам, ҡотолам тиһә, ул хәҙер үҙе ҡасырға, йәшенергә, йөҙөн, ҡиәфәтен, ҡылығын үҙгәртергә мәжбүр буласаҡ. Аппаратты футлярынан алып, төркөмгә ҡаршы китте, ниңә икәнен уйлап та торманы. Торған еренән генә төшөрөүгә ҡарағанда, уларға яҡыныраҡ барып, күҙҙәренә тоҫҡап төшөрөү ҡоттарын ныҡыраҡ алыр, тип ышанды. Хәҙер яйлап ҡына инициатива үҙенең яғына күсеүе өҫтөнлөгөн һиҙеүенән үҙен ҡоралланған һунарсы, ҡорбанын эҙәрлекләүсе итеп тойҙо. Быға тиклем эргәһендә кеше булыуы тынысландырһа, хәҙер иһә ҡулында үс алыу ҡоралы булыуы йәненә ҡыйыулыҡ ҡына түгел, тәкәбберлек өҫтәне. Йәнендә һаҡланыу тойғоһо бөтөнләй һүрелмәгән икән. Әммә тегеләр ҡымшанмай ҙа тура ҡарап тик торалар. Ҡоттары осоп ҡурҡҡанға ла оҡшамайҙар. Ләкин ҡараштарында ҡаушауҙары, икеләнеүҙәре һиҙелә. Оҙағыраҡ ыҙалатҡыһы, ныҡыраҡ ҡурҡытҡыһы килә. Ә ниңә теләгәненде үҙеңдән үҙең йәшерергә, ҡурҡып ҡасҡаны, оятҡа ҡалғаны, уның көсһөҙлөгөн күргәндәре өсөн туйғанса үсен алырға хаҡы бар. Башҡа алға атлап торманы: шул туҡтаған еренән, тоҫҡап атҡан кеүек, фотоаппараттың затворына баҫты. Үҙенең өҫтөнлөгөн тойоу ләззәтен йәне, тәненең бөтә күҙәнәктәре менән татып ярһыны. Төркөмдөң ҡаушауын һиҙгән һайын, ҡотороп ярһыны, уларҙы баҫтырып етеп, фотоаппаратын һәр береһенең күҙенә тоҫҡағыһы килде. Үҙенең хәлен контролдә тотоу һәләтен юғалтты. Был мәлдә ул һунарсы ғына түгел, йыртҡысҡа әүерелергә әҙер булғандыр... Әүерелмәһә...

Аңына килгәндә бөтә тәне лысма тир ине. Табышын баҫтырып хәлһеҙләнгән йыртҡыс кеүек киҫкен тын ала, һауа етешмәй, ҡулдары, аяҡтары ғына түгел хатта, ирендәре ҡалтырай, күҙҙәре тонған. Төркөмдәге үҙгәрештәрҙе күреү, баһалау түгел, янъяғын байҡарлыҡ, үҙенең халәтен һиҙерлек тә хәле юҡ. Ә төркөм был арала күҙгә күренеп ҡаҡшаны, бүленде, хәрәкәткә килде. Йән берҙәмлектәре сатнаны. Сатнаған көҙгөнөң сихыры юҡ! Төркөмдәгеләр ниндәй хистәр, тетрәнеүҙәр кисергәндер, ләкин элекке кеүек татыу түгелдәр ине. Ҡулдарын болғашып, эткеләшеп, төртөшөп тәүҙә ике бала айырылды, уларға тағы икәүһе эйәрҙе. Төркөм быға тиклем ышаныслы торошо менән ҡаҡшамаҫ ҡая һымаҡ булһа, хәҙер емерелеп, онталып ятҡан таштар өйөмөн хәтерләтте...

Мират торған ерендә ҡатып ҡалған. Ары нимә эшләргә? Үҙен нисек тоторға? Нимә булды уға? Яңы ғына ошо ерҙә ниндәй яуызлыҡ ҡылды? Күңеле ниндәй афәт кисерҙе? Аңын, аҡылын, йөҙөн юғалтырлыҡ, сығырынан сығарырлыҡ шул хәтлем ниндәй хәүеф яманы? Ул янау шул тиклем көсөргәнешле хистәргә, кисерештәргә бирелерлек, йәнен дә фиҙа ҡылырлыҡ ҡурҡыныс инеме? Әллә бөтәһе лә уның мейеһендә тыуған аңлайышһыҙ шикләнеү, икеләнеү, уйланыуҙар һөҙөмтәһеме? Күңелендә ташҡан тойғоларына бирелеп, үҙен үҙе ярһытыуымы? Аңы йәненә тыуҙырған һынаумы? Күпме баҫып торҙо был хәлдә? Ҡорҙашы нимә уйлай икән уның тураһында? Ҡарап, аңлап торамы? Мыҫҡыл итеп көлөп торамы?

Мират минутлыҡ хистәренә бирелеүенә үкенде. Бәлки, ул хәтлем ярһыуҙың сәбәптәре лә булмағандыр? Иптәше алдында оятҡа ҡалмаҫ өсөн, исмаһам, йәһәт кенә аҡланыу юлын табырға кәрәк. Әйтеүе анһат... Ғәҙәттә, ирҙәр әҙерәк "төшөрөп" алһа, хәбәрҙәре нимә тураһында икәне билдәле: сәйәсәт, тормошҡа зарланыу, еңеүҙәргә маҡтаныу - бөтәһе лә бер бутҡала болғана. Мират бөтә булған оҫталығын туплап, хәбәре менән ҡорҙашының аңын бутарға керешә. Нимә булһа ла иҫендә ҡалһын, һөйләһен, ләкин Фәрит Мираттың оятын, хурлығын ғына аңламаһын, һиҙмәһен, ул турала уйларға ла онотһон! Үҙенә лә, дуҫына ла шешәнән өҫтәне лә ҡойҙо, һөйләп хәбәре бөтмәне. Йән афәтенән ҡотолоу шатлығын ҡапыл ғына баҫа алмай тәьҫирләнде, тулҡынланды, бахыр, хисле йәнле әҙәм балаһы...

✓ *Башстат мәғлүмәтәре буйынса, республикала йәшәүселәрҙең уртаса килеме 2011 йылдың тәүге яртыһында 14 меңгә лә етмәгән. Статистика мәғлүмәттәре буйынса, мәҫәлән, был аҡсаға 70 кг һыйыр ите һатып алырға була.*



ИНТЕРНЕТТАН



# СПОРТТЫ...

## барабан алыштыра ала

■ Кеше организмына витаминдар һәр ваҡыт кәрәк. Тик витаминдың иң ҡулайлы сығанағы булып тәбиғи продукттар торамы, әллә уларҙың дарыуханала һатылған аналогтарымы? АҠШ-ның Юта штатында урынлашҡан Бригама Янга университеты ғалимдары ошо һорауға яуап эҙләп, тикшеренеүҙәр үткәргән. Эксперттар фекеренсә, емеш-еләктә витаминдар күберәк, етмәһә, тәбиғи витаминдар яҡшыраҡ үҙләштерелә лә. Мәҫәлән, әфлисун составындағы үҙенсәлекле антиоксиданттар ҡатнашмаһы С витаминының файҙаһын тағы ла көсәйтә. Йәғни, антиоксиданттар һәм витаминдар организмды кәрәкле микроэлементтар менән байытып ҡына ҡалмай, уны яман шештән һәм иртә ҡартайыуҙан һаҡлай.

■ Донъя белгестәрен яман шеш сиренең арта барыуы хәүефләндерә һәм улар бөгөн был сирҙе булдырмау өсөн төрлө ысулдар эҙләй. Америка табиптары билдәләүенсә, онкологик ауырыуҙарҙы булдырмауҙа ҡояш нуры ла ярҙам итә. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, даими рәүештә ҡояш аҫтында йөрөү яман шеште 24-38 процентҡа кәметә. Быны табиптар ҡояш яҡтыһы аҫтында кеше организмында D витамины күберәк бүленеүен һәм уның яман шеш күҙәнәктәре барлыҡҡа килеү һәм үрсеү мөмкинлеген түбәнәйтеүе менән аңлата. Бигерәк тә ҡояш бөйөр яман шешен булдырмау өсөн кәрәк икән.

■ Баҡсала үҫкән ябай әнис үләне матдәләр алышыныуын яҡшыртып ҡына ҡалмай, ә кәүҙәне һомғол итеп һаҡларға ла ярҙам итә. Эфир майҙарына, никотин һәм фолий кислотаһына, кальцийға, фосфорға, тимергә, калийға бай был үҫемлек артериаль ҡан баҫымын түбәнәйтә. Табиптар әйтеүенсә, уның составында А һәм С витаминдары ла бар. Шулай уҡ әнисте арыған күҙҙәрҙе дауалау өсөн ҡулланырға була. Бының өсөн уны ҡайнар һыуҙа төнәтеп һыуытырға һәм мамыҡ тампондар менән күҙ ҡабаҡтарына һалып, ятып торорға кәрәк.

■ Һауаны сафландырыусы препараттар кеше организмы өсөн зарарлы булыуы ихтимал, тип белдерә Вашингтон штаты университеты (АҠШ) ғалимдары. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, был препарат менән ҡулланғандан һуң өйҙөң һауаһында кеше өсөн зыянлы булған химик берләшмәләрҙең 100-ҙән ашыуы флаконға яҙылмаған була. Хәҙер аэрозоль һауа сафландырғыс етештереүселәр уның составына ингән бөтә химикаттарҙы ла мотлаҡ күрһәтергә тейеш. Бынан тыш, кем тын алыу юлдары сирҙәре, бигерәк тә ҡурылдай астмаһы менән яфалана, уларға һауа сафландырғыс менән ҡулланмаҫҡа кәңәш итә белгестәр.

■ Барабан - иң яҡшы тренажер, тип белдерә инглиз ғалимдары. Бақтиһәң, барабан һуҡҡылағанда футбол уйнағандағы кеүек энергия тотонола икән. Уйнаған саҡта профессиональ барабансыларҙың пульсы минутына 150-гә етә, ә бер сәғәтлек концерт биргәндә улар 600 ккал юғалта. Әлеге ваҡытта белгестәр Глосестер университеты эргәһендә "барабанлы" лаборатория булдырып, унда төрлө йүнәлештә уйнаусы барабансыларҙы тикшерә. Әммә әле үк барабанда уйнау спорт менән шөғөлләнеүгә альтернатива була ала, ти табиптар.

ҺӘР КЕМ ҠОЛАҒЫНА...

# КӨҘГӨЛӘГЕ САҒЫЛЫШЫҢ...

## көйөндөрмәһен, тиһәң

**Кәүҙәнең формалашыуында гендар ниндәйҙер роль уйнаһа ла, һуңғы тикшеренеүҙәр үҙ хәлебеҙҙе үҙебеҙ үк үҙгәртә алыу һәләтенә эйә икәнлегебеҙҙе күрһәтте. Тормошобоҙҙоң төрлө осрағында май туҡымаһы күҙәнәктәре кәмергә һәм артырға мөмкин, был күп осраҡтарҙа кешенең көндәлек йәшәү рәүешенә бәйле.**



Кәүҙәгеҙҙең һомғоллоғон нимә билдәләй һуң? Әгәр ҙә сәләмәт йәшәү рәүеше алып барған кеше янында берәй тәүлек йәшәһәгеҙ, һеҙ уны әҙ хәрәкәтле йәшәү рәүеше алып барыусы күптәрҙән айырып торған бер нисә айырма табыр инегеҙ. Уларҙан өлкән йәшкә еткәнсе нисек итеп сәләмәтлеген һәм һомғол буйын һаҡлап ҡалыу серҙәрен белешегеҙ һәм был файҙалы ғәҙәттәрҙе үҙләштерергә тырышығыҙ.

● Тәбиғи рәүештә йоҡларға ятығыҙ һәм уянығыҙ. Сәләмәт йәшәү рәүеше алып барыусыларҙың күбеһе будильник ҡуймай, үҙ ваҡытында ял итеп, күтәренке кәйеф һәм яҡшы аппетит менән уяна. Улар үҙҙәре төҙөгән фитнес-план буйынса йәшәй. Ундай кешеләр еңел йоҡлап китә, ҡаты йоҡлай, шулай ҙа көс йыйыр өсөн уларға ни бары бер нисә сәғәт кенә йоҡлап алырға кәрәк. Йоҡо туймауы менән һимеҙлек араһында ныҡлы бәйләнеш барлығы билдәле. Йоҡо организмға көс бирә, яңы көнгә әҙерләнергә ярҙам итә.

● Әҙер булығыҙ. Сәләмәт йәшәү рәүеше алып барған кешеләр кистән үк икенсе көнгә спорт кәрәк-яраҡтарын һәм кейемдәрен әҙерләп ҡуя, спорт күнекмәләрен дә иҫтә тотоп, бер аҙнаға көн тәртибен алдан билдәләй. Әйткәндәй, күнекмәләргә улар рәсми осрашыуҙар йәки социаль вазифаларға ҡараған кеүек етди ҡарай.

● Иртәнге күнекмәләрҙе яһағыҙ. Иртәнге күнекмәләр киске күнекмәләргә ҡарағанда күпкә файҙалы. Иртәнге күнекмәләрҙән һуң ҙур ҡәнәғәтлек һәм ғорурлыҡ тойғоһо уяна, был инде көн барышында сәләмәт туҡланыу рәүешен торорға, көсөргәнешле хәл-ваҡиғаларҙан уңышлы сығырға һәм юғары кәйефте һаҡларға ярҙам итә. Иртәнге күнекмә - һөҙөмтәлә беҙҙең көн буйына ҡабул иткән күп ҡарарҙарға тәьҫир итәсәк көндөң яҡшы башланғысы.

● Туҡланыу режимын планлаштырығыҙ. Сәләмәт йәшәү рәүеше алып барған кешеләр билдәле бер ваҡытта ғына туҡлана, ризыҡ ҡабул итеү ваҡыттарын күнекмәләрҙе күҙ уңында

ШУЛАА-ААЙ ИКӘН!

# ЭЙ, ЭШЛӘЙБЕҘ, ЭШЛӘЙБЕҘ...

## Ҡайҙа китә аҡсабыҙ?

**Кешегә бәхет өсөн күпме аҡса кәрәклеген һанап бөтөп булмай. Ә бына статистика мәғлүмәттәренә ҡарап, иң кәрәкле әйберҙәргә күпме аҡса сарыф ителгәнен белә алабыҙ. Күптән түгел Росстат илдең төрлө төбәктәрендә йәшәү өсөн айына күпме аҡса китеүе тураһында мәғлүмәттәр баҫып сығарҙы. Уртаса алғанда, Башҡортостанда йәшәүселәрҙең сығымы йән башына айына 9229 һум тәшкил итә. Ә Рәсәйҙә йән башына сығымдар 10512, 9 һум тура килә. Йәшәү өсөн сығымдарҙы бөтәһенән дә күберәк мәскәүлеләр (18564,8 һум) һәм Камчаткала йәшәүселәр (19548,8 һум) сарыф итә. Ә бына Кавказ республикаларында йәшәүселәрҙең сығымы иң әҙе: 5380,2 һум. Статистика мәғлүмәттәренә ҡарағанда, Ингуш республикаһы илдең иң аҙ сығымлы төбәге: бында айына уртаса өс меңдән дә артыҡ сарыф ителмәй икән.**

### Ашамай йәшәп булмай

Айлыҡ сығымдарҙың иң күп өлөшө аҙыҡ-түлеккә (34 процент) тура килә. Икенсе урында - транспортҡа киткән сығымдар: республикала йәшәүселәр көн һайын айлыҡ сығымдарының 12,5 процентын ҡала буйлап йөрөр өсөн ҡуллана. Торлаҡ-коммуналь хеҙмәтенә һәм автомобиль эйәләренең яғыулыҡ өсөн сарыф иткән сығымы - 11,5 процент тәшкил итә.

Транспорт һәм фатир өсөн беҙ ай һайын түләп барырға мәжбүрбеҙ, ә бына өҫ һәм аяҡ кейемдәрен, бигерәк тә көнкүреш әйберҙәрен һирәк алабыҙ. Нәҡ шуға күрә лә дөйөм картинала был сығымдарҙың өлөшө күпкә әҙерәк: 8,3 процент аҡса өҫ һәм аяҡ кейеменә һәм 7,6 процент көнкүреш әйберҙәренә китә.

### Дауаланыу

Артабан сығымдар кәмей барыу буйынса һаулыҡ һаҡлау (6,6 процент), ял һәм мәҙәни саралар (3,6 процент), мәғариф өлкәһенә (3,4 процент) тура килә. Сәләмәтлек өсөн сығымдар - ил буйынса иң юғарыһы. Насар ғәҙәттәргә киткән сығымдар айырым иҫәпләнгән: алкоголле эсемлектәргә һәм тәмәкегә республикала йәшәүселәрҙең бөтә сығымдарының уртаса 2,4 проценты китә. Ә бына төшкө ашты улар өйҙә ашауҙы өҫтөн күрә. Ҡунаҡхана, кафе һәм ресторандарға киткән сығымдар ни бары 1,3 процент тәшкил итә.

### Емеш-еләкте күберәк ашайбыҙ

Аҙыҡ-түлеккә киткән сығымдарға килгәндә, сарыф итеүҙәрҙең күп өлөшө, һис шикһеҙ, өҫтәлдәге иң ҡиммәт һәм мөһим аҙыҡ - иткә (30 процент) китә. Икмәккә айлыҡ сығымдың 17,5 проценты тотонола. Рейтингта өсөнсө урынды һөт аҙыҡтары биләй, уларға Башҡортостанда йәшәүселәр айлыҡ бюджетының 13 процентын сарыф итә. Сәләмәт йәшәү рәүеше лә ҡиммәткә төшә: дөйөм алғанда витаминдарға айына 15,5 процент: 9,1 процент емеш-еләккә һәм 6,5 процент йәшелсәгә сарыф ителә.

Тәмле-татлыға айлыҡ сығымдар уртаса 8 процент , ә балыҡҡа һәм диңгеҙ аҙыҡтарына 4,6 процент тәшкил итә.

### Бер эш хаҡына... 70 килограмм ит

Башстат мәғлүмәтәре буйынса, республикала йәшәүселәрҙең уртаса килеме 2011 йылдың тәүге яртыһында 14 меңгә лә етмәгән. Статистика мәғлүмәттәре буйынса, мәҫәлән, был аҡсаға 70 кг һыйыр ите йәки 186 кг туңдырылған балыҡ, йә булмаһа, 70 кг үҫемлек майы йәки 204 литр көнбағыш майы һатып алырға була. Шулай уҡ бер эш хаҡы 470 литр һөт, 385 кг картуф йәки 780 кг бойҙай оно һатып алыуға етә.

Был аҡсаға шулай уҡ кейенеп тә була. Мәҫәлән, уртаса килем 24 ирҙәр күлдәгенә етә.

тотоп планлаштыра һәм ҡасан нимә менән туҡланырҙарын аныҡ белә. Бер ҡасан да туҡланыуҙы үҙ яйына һалырға ярамай. Әгәр һеҙ ныҡ асығып, бер юлы күрәгенән артыҡ ашайһығыҙ икән - бөтә тырышыуҙарығыҙ бушҡа булыр. Туҡланыуҙы яйға һалыр өсөн күп көс түгергә тура килә.

● Уңышһыҙлыҡтарҙа туҡталып ҡалмағыҙ. Сәләмәт йәшәү рәүеше алып барған кешеләр маҡсатына барған юлда уңышһыҙлыҡтар янында туҡтап ҡалыуға юл ҡуймай - бер тапҡыр ҡалдырылған күнекмә икегә, өскә әйләнмәй. Бер күнекмәне ҡалдырһа, улар спорт залына барып, тағы ла һөҙөмтәлерәк шөғөлләнә башлай. Шулай уҡ артыҡ ашалған бер торт өлөшө өсөн күнелде төшөрөргә һәм диетаны боҙорға ашыҡмағыҙ. Яңынан сәләмәт туҡланыу режимын башларға, даими рәүештә спорт менән шөғөлләнергә һәм йоҡоно яҡшы туйҙырырға кәрәк. Ваҡыты-ваҡыты менән үҙеңә ял да биреп алырға кәрәк, ә күнекмәләр ҡалдырған өсөн үҙеңде гәйепләргә ярамай.

Йәшәү рәүешегеҙҙе һәм ғәҙәттәрегеҙҙе үҙгәртегеҙ. Бер көн эсендә генә һомғол буйлы булып булмай, бының өсөн күпкә оҙағыраҡ ваҡыт талап ителә. Фитнес һәм сәләмәт туҡланыу тураһында мәҡәләләр уҡырға һәм уларҙы үҙ тормошоғоҙға индерергә кәрәк.

● Файҙаһыҙ һәм зарарлы "нисек көс һалмай тиҙ арала ябығырға" тигән кәңәштәрҙән уңыш психологияһын айырырға өйрәнегеҙ, бағышлаҡтарыгыҙҙы юҡ-бар менән бутамағыҙ. Сәләмәт йәшәү рәүеше алып барған кешеләр бындай тиҙ һәм көс һалмай ғына ябығырға һәм һауығырға тигән "мөғжизәле" кәңәштәргә ышанып бармай. Улар оҙон ғүмер, яҡшы һаулыҡ һәм һомғол буй еңел генә бирелмәй икәнен һәм был маҡсаттарға өлгәшер өсөн көн һайын әҙ булмаған көс һалырға тура килә икәнен белә.

Яулағанығыҙҙы һаҡлағыҙ. Сәләмәт йәшәү рәүеше алып барған кешеләр, ябығыр һәм яуланған ауырлыҡты оҙаҡ ваҡыт һаҡлар өсөн диета ғына тотмай. Фитнес менән шөғөлләнеү - сәләмәтлек өсөн иң яҡшыһы. Даими рәүештә спорт менән шөғөлләнгән осраҡта яуланған ауырлыҡты ғүмер буйына һаҡларға була.

● Һомғол буйҙы һаҡлап ҡалыу өсөн позитив аутотренингтарҙы йышыраҡ ҡулланығыҙ. Әгәр ҙә үҙегеҙгә һәр ваҡыт "Мин һимеҙмен" йәки "Мин ялҡаумын" тип әйтеп торһағыҙ, ябығыуығыҙ икеле. "Мин көсләмөн", "Минән барыһы ла килеп сыға", "Мин үҙемдең көүҙәмде ҡайғыртам" тигән фразаларҙы йышыраҡ ҡабатлағыҙ.

● Аныҡ маҡсаттар ҡуйығыҙ. Сәләмәт йәшәү рәүеше алып барған һәм көүҙәһен ҡүҙәтеп барған кешеләр һәр ваҡыт аныҡ маҡсаттарға ынтыла. Күптәре билдәле бер ауырлыҡҡа тиклем ябығырға теләй. Икенселәре үҙҙәренең ҡылығы менән билдәле акцияны тоторға тырыша, мәҫәлән, күкрәк яман шешен еңер өсөн йүгерәләр, йәки лейкемия менән көрәшер өсөн велоспорт менән шөғөлләнәләр. Бер маҡсатты тормошҡа ашырғандан һуң, икенсе, өсөнсө маҡсаттарҙы алдығыҙға алығыҙ һәм уларға өлгәшер өсөн аныҡ план төҙөгөҙ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Әгәр һомғол, сәләмәт һәм ныҡлы көүҙә тураһында хыялланаһығыҙ икән, үрҙә һанап үтелгән ғәҙәттәрҙең береһен булһа ла үҙегеҙгә һайлап алығыҙ һәм шунан ситкә китмәгеҙ. Бер ғәҙәтте үҙләштергәндән һуң, икенсеһен һайлағыҙ. Иҫегеҙҙә тотоғоҙ: сәләмәт ғәҙәттәрегеҙ күберәк булған һайын, тормошоғоҙ еңелерәк һәм күркәмерәк булыр, шулай уҡ көҙгөләгә сағылышығыҙ ҙа һеҙҙе ҡыуандырып торор.**

МӨҒЖИЗӘЛӘР ЗАМАНЫ



# КОСМОЭНЕРГЕТИКА ҺӘМ СӘЛӘМӘТЛЕК

### Космоэнергетика дауалай

**Космоэнергетика каналдары хаталаныуға дусар булмаған юғары үлсәүҙәрҙән килә һәм илаһи гармонияға, камиллыҡҡа илтә. Йыһанда диндәр юҡ, шуға күрә тоткан диненә ҡарамаҫтан, уның менән барыһы ла дауалана ала.**

Был ысулда йыһан каналдары энергияһы дауалай, ә дауалаусылар пациент менән дауалаусы араһында аралашсы ролен генә үтәй. Ул нескә тәндең дефектын төҙәтеүсе һәм кешенең үҫеш юлындағы ҡаршылыҡтты алып ташлаусы. Каналдар хатта ультратауыш тикшереүенән һуң барлыҡҡа килгән (УЗИ) нурланыш эҙемтәләрен дә төҙәтә. Сөнки УЗИ ваҡытында ДНК-ның ике рәтле спиралдәре һүтелә, хатта өҙөлөүе лә мөмкин. Был инде кире эҙемтәләргә килтереүе ихтимал.

Космоэнергетика ярҙамында телевидениеның кире тәьҫиренән һуң күҙәнәктәрҙең структураһы тергеҙелә. Беҙ, нигеҙҙә, һыуҙан торабыҙ, ә ул үҙ сиратында барыһын да хәтерендә ҡалдырыу үҙенсәлегенә эйә. Телевизор экранынан түгелгән бөтөн кире күренештәр күҙәнәктәр тарафынан ҡабул ителә һәм улар мәғлүмәт энергияһы шоғына инә. Шулай итеп, космоэнергетика сеанстары ваҡытында төрлө энергетик тәьҫирҙән һуң нескә тәнсәләр, хатта физик тән дә тергеҙелә. Аура таҙарғас, ағзаларыбыҙ һәм күҙәнәктәребеҙ яҡшы энергия менән туҡлана башлай һәм сәләмәтләнә.

Космоэнергетика каналдары бер ваҡытта ла яңылышмай. Быны ни өсөн ул һөҙөмтәле һәм хәүефһеҙ дауалау алымы булып тора. Шул уҡ ваҡытта илаһи ағымдар дауалаусыны ла, пациентты ла ышаныслы һаҡлай. Был ысулда камиллашыу программаһы һәр ағзаға, һәр күҙәнәккә һалына - барлыҡ кире программалар алып ташлана. Шуға күрә сеанс һөҙөмтәләре иҫ киткес - тотош организм һауыға. Һеҙ быға, үҙегеҙҙә космоэнергетика каналдарының булыуына ышанаһығыҙмы, юҡмы - аура барыбер таҙара.

Сеанс ваҡытында каналдар үҙҙәре көсһөҙләнгән ағзаны табып, уларҙы таҙарта, камиллаштыра. Шул ваҡытта пациентта киң диапазонлы кире тойғолар барлыҡҡа килеүе мөмкин, сөнки ағзаларыбыҙ нормаға килтерелә (туҡыма таҙара, таштар онтала, капиллярҙар асыла, тамырҙар киңәйә, һ.б.). Тимәк, тотош организмда структур үҙгәрештәр күҙәтелә, шуға ла ауыртыуҙар, сәнсеүҙәр, үҙеңде насар тойоу - ауырыуҙың кискенләшеүе башлана!

Шул иҫәптән, оло яраҡ боҙолоуы (эсәктәр таҙара), температура күтәрелеүе (вирустар юҡ ителә), тирегә сабыртма сығыуы (шлактар, токсиндар сыға) ихтимал. Бары тик түҙемлек кәрәк - тотош организм таҙара, йәшәрә. Әгәр был киҫкенләшеүҙәрҙе аңлап, шул уҡ ваҡытта ҡыуаныс кисерһәгеҙ, һөҙөмтә бик юғары булыр. Әгәр һеҙ ауырыуҙарҙың киҫкенләшеүенән ҡурҡһағыҙ, һеҙгә көсәргәнешсе үҙҙәре контролләй, һеҙ күтәрә алған тиклем генә энергия бирә-сәктәр. Йәғни түҙеп торғоһоҙ ауыртыуҙар һәм киҫкенләшеүҙәр булмаясаҡ.

Был ысул айырым ағзаларҙы ғына дауаламай һәм ниндәйҙер бер проблеманы ғына хәл итмәй. Каналдар кешене тотошлай, уның барлыҡ физик, рухи проблемалары менән бергә дауалай, сөнки сәләмәтлек һәм ысулдың үҙенсәлеге шунда: дауалау сеанстарына кеше нимә менән генә мөрәжәғәт итһә лә, ул ауырыуҙарҙан да, тормош проблемаларынан да ҡотола.

Дауаланыу ваҡытында көҙән йыйырыуға ҡаршы, дигиссталис, гормональ һәм инсулиндан тыш, башҡа барлыҡ дарыуҙарҙы ҡабул итеүҙе туҡтатыу мөһим. Инсулинды ҡандағы шәкәр кимәленә ҡарап һеҙ үҙегеҙ кәметерһегеҙ, көҙән йыйырыуға ҡаршы һәм гормональ дарыуҙарҙы яйлап, хәлегеҙҙең тотороҡло яҡшырғанын йәки тулыһынса дауаланғанығыҙҙы раҫлаған ЭЭГ һәм анализдар тапшырғандан һуң участка табиптары кәметер.

Әгәр артабан да уйҙарығыҙ, эмоцияларығыҙ, ғәмәлдәрегеҙ яҡшы, изге булһа, аурағыҙ ҙа таҙа булып ҡаласаҡ. Аура таҙарғандан һуң төрлө һәләттәр, күрәҙәлек һәләттәре асылыуы мөмкин. Әммә шуны оноторға ярамай: әгәр һәләттәрегеҙ асылып, үҙегеҙҙе тәкәббер тота башлаһағыҙ, һәләтегеҙҙе кире аласаҡтар. Мәҫәлән, нескә донъяны күреп, унан мәғлүмәт ала башлағас, тәкәбберлек уяна. Бында инде кеше түгел, ә уның Эгоһы мәғлүмәт ала, тимәк, дөрөҫ булмаған мәғлүмәт килә. Һөҙөмтәлә кеше яңылыша һәм башҡаларҙы ла яңылыштыра. Ул үҙен үҙенә башҡа тип уйлай, ә илаһи каналдарҙың уны таҙартып, һәләттәрен аса башлауы тураһында бөтөнләй онота. Ундай кешеләрҙең аураһы ҡабаттан бысрана һәм һәләттәре юғала, бары тик Эгоның иллюзияһы ғына тороп ҡала.

Сеанстарҙан һуң сал сәстәрегеҙ ҡарая башлаһа йәки стена аша үтә алһағыҙ ҙа үҙегеҙҙе башҡаларҙан өҫтөн ҡуймағыҙ. Бөтөн кешеләр ҙә илаһи, һәр кем үҙенсәлекле. Әммә башҡаларҙың һәләтенә көнләшеүселәргә һәләт бирелмәй. Шуға күрә, башҡаларҙың уңышына ҡыуанығыҙ, үҙегеҙҙе камиллаштырығыҙ.

**Рауфан МОРТАЗИН.**
**(Дауамы бар).**

УҢЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Күҙәнәктәрең менән таныш

Аң һәм тәндең үҙ-ара мөнәсәбәте ярҙамында сәләмәтлекте яҡшыртыу объекты булған бер нисә йүнәлеш бар: аш эшкәртеүҙе яҡшыртыу; ҡан баҫымын түбәнәйтеү; холестерин күләмен кәметеү; ауыртыныуҙы еңеләйтеү; баш ауыртыуынан арыныу; стрестарҙан арыныу; ауырлыҡты кәметеү; фобияларҙан арыныу; һауығыуҙы тиҙләтеү; тәмәке тартыуҙы ташлау.

Һеҙгә дуҫығыҙ менән нисек һөйләшергә кәрәк икәнен аңлатыу мотлаҡ түгел. Тәнегеҙ һәм уның участкалары менән дә тап шулай һөйләшергә кәрәк. Уйлап ҡараһаң, улар, ысынлап та, һеҙҙең иң яҡын дуҫтарығыҙ. Әйткәндәй, аңдың һәм тәндең үҙ-ара мөнәсәбәтенән тәүге тәьҫорат алырға ярҙам иткән бер ысул бар. Ни өсөн беҙгә организмыбыҙҙың һәр күҙәнәгенә визит яһап, улар менән танышмаҫҡа? Уны "Фантастик сәйәхәт" тип атайыҡ.

Был процедураның яңы элементтары ҡатмарлы булып күренәсәк, ысынбарлыҡта иһә улар тән төҙөлөшөн сәйәхәтсенең көндәлеге рәүешендә яҙып бара. Был яҙмаларҙан мәғәнә табығыҙ, кәрәк икән, уларҙы иҫегеҙҙә ҡалдырығыҙ.

**Күҙәнәктәрегеҙ менән танышыу өсөн күнекмә**

● Яҡшылап ултырығыҙ, күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ, тәрән итеп өс тапҡыр тын алығыҙ һәм сәсегеҙҙең тамырҙарын күҙаллағыҙ.

● Үҙегеҙҙе бәләкәй генә итеп күҙ алдына килтерегеҙ һәм сәсегеҙ буйлап, баш һөйәге тиреһенә үтеп инәм икән тип күҙ алдына килтерегеҙ.

● Тире аҫтында сәс урманын ҡарағыҙ.

● Сәстәрегеҙгә температураның тирбәлеүенән һаҡлағаны, баш тирегеҙгә мөғжизәле эше өсөн рәхмәт әйтегеҙ һәм унан ошо рәхмәтте тотош тәнегеҙгә ебәреүен һорағыҙ.

● Баш һөйәгегеҙгә, мейегеҙҙе һаҡлаған өсөн, рәхмәт әйтегеҙ. Был рәхмәтте тәндәге барлыҡ һөйәктәргә тапшырыуын һорағыҙ.

● Тағы ла түбәнгәрәк төшөп, мейегеҙгә уның шундай ҡеүәтле компьютер булғаны өсөн рәхмәт әйтегеҙ.

● Түбәнгә төшөүегеҙҙе дауам итеп, күҙҙәрегеҙгә, танауығыҙға, ауыҙығыҙға һәм тештәрегеҙгә үҙ бурыстарын матур итеп башҡарғаны өсөн рәхмәт әйтегеҙ.

● Тамағығыҙға, һуңынан ашҡаҙаныгыҙға - теләһә ниндәй аҙыҡты ла эшкәртә алған һоҡланғыс химик лабораторияға рәхмәт әйтегеҙ. Йыуан һәм нәҙек эсәктәргә күсегеҙ.

● Тура эсәккә, бөйөрҙәргә, бәүел ҡыуығына рәхмәт әйтегеҙ.

● Түл йыйыусы енес ағзаларына рәхмәт әйтегеҙ.

● Ҡан тамырҙарына инеп, уның буйлап йөрөгөҙ, веналарға, артерияларға, аҡ һәм ҡыҙыл тәнсәләргә рәхмәт әйтегеҙ.

● Йөрәк тирәһендә туҡтағыҙ. Уға көнө-төнө насос станцияһы ролен башҡарғаны өсөн рәхмәт әйтегеҙ. Ҡан тамырҙарына, артабан үпкәгә күсегеҙ. Уларға рәхмәт әйтегеҙ.

● Ҡабат ҡан тамырҙарына инеп, сәйәхәттең башланған урынына - баш һөйәгенә, сәс тамырҙарына юлланығыҙ. Уйығыҙҙа ғына барлыҡ күҙәнәктәрегеҙгә изгелек оҙатығыҙ.

● Бер сәс буйлап үрләгеҙ, күҙҙәрегеҙҙе асығыҙ һәм ысынбарлыҡҡа ҡайтығыҙ.

Алда торған маршрутты яҡшы итеп күҙаллаһағыҙ, яҙмаларҙы ситкә алып тороп, күнекмәне ҡабатлағыҙ. Кемдеңдер уны һеҙгә ҡысҡырып уҡып тороуы ла мөмкин.

**Роберт СТОУН.**

# ТВ ПРОГРАММАҺЫ





## 12 СЕНТЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "Модный приговор"
11.50 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "ЖКХ"
13.20 "Детективы". Сериал
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.25 "Хочу знать"
15.55 "Обручальное кольцо". Сериал
16.55 "Свобода и справедливость" с Андреем Макаровым". Ток-шоу
18.00 Вечерние новости
18.45 "Давай поженимся!"
19.50 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Немного не в себе". Сериал
22.30 "Товарищи полицейские". "Роковая красотка", 9-я серия. Сериал
23.30 "Свидетели"
00.30 Ночные новости
00.55 "Чокнутый профессор"
02.45, 03.05 "Ангел света"
03.00 Новости

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "С новым домом"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
13.00 "Тайны следствия". Сериал
14.00 "Вести"
14.30 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 136-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему", 165-я серия
17.55 "Институт благородных девиц", 242-я серия
18.55 "Прямой эфир". Ток-шоу
20.00 "Вести"
20.30 " Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Сделано в СССР". Сериал
22.55 "Тайны следствия". "Бумажная работа". Сериал
23.50 "Запад есть Запад. Восток есть Восток. Всеволод Овчинников". Док. фильм
00.50 "Вести+"
01.10 "Профилактика"
02.20 "Кошмарный медовый месяц". Криминальная драма
04.10 "Городок". Дайджест"
04.45 "Вести. Дежурная часть"

### НТВ
05.55 "НТВ утром"
08.30 "Объявлен в розыск". Сериал
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие. Обзор за неделю"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Закон и порядок-4". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Прокурорская проверка"
17.40 "Говорим и показываем"
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Морские дьяволы-4". Остросюжетный сериал
21.30 "Глухарь. Возвращение". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Честный понедельник"
00.25 "Футбольная ночь"
01.00 "Таинственная Россия: Горный Алтай. Ворота в Шамбалу?"
02.00 "До суда"
03.00 "Столица греха". Остросюжетный сериал
04.55 "Основная версия". Криминальный сериал

### БСТ
**07.00 "Салям, Республика!"**
**09.00 "Новости недели"**
**09.30, 22.00 "На самом деле"**
**10.00 Документальный фильм**
**10.30 "Следопыт"**
**10.45, 14.45 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Тамыр представляет"**
**11.30 Мультсериал**
**12.00, 18.00, 21.30 Новости (на русск. яз.)**
**12.15, 19.00, 23.15 "Замандаштар"**
**12.30, 18.15 "Орнамент"**
**12.45 "Мужской телевизионный клуб "Арслан"**
**13.30 "Муз-базар"**
**14.00 "В активном поиске"**
**14.30 "Любимые мелодии"**
**15.00, 18.30, 22.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**15.15 "Тамыр. Гора новостей и др."**
**16.15 "Башкирское спутниковое телевидение - 10 лет вместе"**
**16.30 "Музыкальные острова Тагира Камалова"**
**17.00 "Жемчужное ожерелье"**
**19.15 "Надо знать!"**
**19.30 "Еду я в деревню"**
**20.00 "Полезные новости"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.30 "Взгляд без слов"**
**20.45 "Пора разобраться"**
**23.00 "Послесловие" с Азаматом Саитовым"**
**23.30 Художественный фильм**

## 13 СЕНТЯБРЯ ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.45 "Модный приговор"
11.50 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "ЖКХ"
13.20 "Детективы". Сериал
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.25 "Хочу знать"
15.55 "Обручальное кольцо". Сериал
16.55 "Свобода и справедливость" с Андреем Макаровым". Ток-шоу
18.00 Вечерние новости
18.45 "Давай поженимся!"
19.50 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Немного не в себе". Сериал
22.30 "Товарищи полицейские". "Одна", 10-я серия. Сериал
23.30 "На ночь глядя"
00.30 Ночные новости
00.50 "Идентификация Борна". Боевик
03.00 Новости
03.05 "Крикуны: охота"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Ауаз"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
13.00 "Тайны следствия". Сериал
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 137-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему", 166-я серия
17.55 "Институт благородных девиц", 243-я серия
18.55 "Прямой эфир". Ток-шоу
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Сделано в СССР", 3-я и 4-я серии
22.55 "Тайны следствия". "Бумажная работа". Сериал
23.50 "Запад есть Запад. Восток есть Восток. Всеволод Овчинников"
00.50 "Вести+"
01.10 "Профилактика"
02.20 "Честный детектив"
02.50 "Первая любовь"
04.20 "Городок". Дайджест"

### НТВ
05.55 "НТВ утром"
08.30 "Объявлен в розыск". Сериал
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Внимание: розыск!" с Ириной Волк"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Закон и порядок-4". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Прокурорская проверка"
17.40 "Говорим и показываем"
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.35 "Морские дьяволы-4". Остросюжетный сериал
21.35 "Глухарь. Возвращение". Сериал
22.30 "Беглецы"
00.30 Футбол. Лига чемпионов УЕФА
02.40 "Школа злословия"
03.30 "Кулинарный поединок"
04.25 "Лига чемпионов УЕФА. Обзор"
04.55 "Основная версия". Сериал

### БСТ
**07.00 "Салям, Республика!", Абзелиловский район**
**09.00 "Новости" (на башк. яз.)**
**09.15 "Послесловие" с Азаматом Саитовым"**
**09.30, 22.00 "На самом деле"**
**10.00 "Пора разобраться" (на русск. яз.)**
**10.45, 14.45 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Тамыр представляетç"**
**11.30 Мультсериал**
**12.00, 18.00, 21.30 Новости (на русск. яз.)**
**12.15, 19.00, 23.30 "Замандаштар"**
**12.30, 18.15 "Орнамент"**
**12.45, 19.15 "Надо знать!"**
**13.00 "Башкорт йыры"**
**13.45 "Весело живем"**
**14.00 "В активном поиске"**
**14.30 "Любимые мелодии"**
**15.00, 18.30, 22.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**15.15 "Тамыр. Гора новостей и др."**
**16.15 "Башкирское спутниковое телевидение - 10 лет вместе"**
**19.30 "Действующие лица"**
**20.00 "Полезные новости"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.30 "Тарихи фараз"**
**21.00 "За порогом"**
**21.15 "Криминальный спектр"**
**23.00 "Уфимское "Времечко"**
**23.45 Художественный фильм**

## 14 СЕНТЯБРЯ СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.45 "Модный приговор"
11.50 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "ЖКХ"
13.20 "Детективы". Сериал
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.25 "Хочу знать"
15.55 "Обручальное кольцо". Сериал
16.55 "Свобода и справедливость" с Андреем Макаровым"
18.00 Вечерние новости
18.45 "Давай поженимся!"
19.50 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Немного не в себе", 11-я серия
22.30 "Товарищи полицейские", 11-я серия
23.30 "Среда обитания"
00.30 "Ночные новости"
00.55, 03.05 "Ананасовый экспресс". Криминальная комедия
03.00 "Новости"
03.10 "Любовь и вымогательство"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "С новым домом!"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
13.00 "Тайны следствия"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 138-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему". Сериал
17.55 "Институт благородных девиц", 239-я серия
18.55 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Сделано в СССР", 5-я и 6-я серии
22.55 "Исторический процесс"
00.30 "Вести+"
00.50 "Профилактика"
01.55 "Горячая десятка"
03.05 "Карусель". Мелодрама
04.45 "Вести. Дежурная часть"

### НТВ
05.55 "НТВ утром"
08.30 "Объявлен в розыск". Сериал
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00 "Сегодня"
10.20 "В зоне особого риска"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.00 "Сегодня"
13.30 "Закон и порядок-4". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Прокурорская проверка"
17.40 "Говорим и показываем"
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Морские дьяволы-4". Сериал
21.30 "Глухарь. Возвращение"
23.15 "Сегодня"
23.35 "Внимание: розыск!" с Ириной Волк"
00.15 "Запах боли". Док. фильм
01.10 "Квартирный вопрос"
02.15 "Столица греха". Сериал
05.00 "Основная версия". Сериал

### БСТ
**07.00 "Салям, Республика!", Хайбуллинский район**
**09.00, 15.00, 18.30, 22.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**09.15 "Полезные новости"**
**09.30, 22.00 "На самом деле"**
**10.00 "Тарихи фараз"**
**10.30 "Следопыт"**
**10.45, 14.45 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Тамыр представляет…"**
**11.30 Мультсериал**
**12.00, 18.00, 21.30 Новости (на русск. яз.)**
**12.15 "Замандаштар"**
**12.30 "Орнамент"**
**12.45, 19.15 "Надо знать!"**
**13.00 "Байык"**
**14.00 "В активном поиске"**
**14.30 "Любимые мелодии"**
**15.15 "Тамыр". "Гора новостей" и др."**
**16.15 "Башкирское спутниковое телевидение - 10 лет вместе"**
**16.30 "Млечный путь. Р. Янбеков"**
**17.30 "Тамле" (на башк. яз.)**
**18.15 "Специальный репортаж"**
**19.00, 23.30 "Замандаштар"**
**19.30 "Минуты поэзии"**
**19.45 "Деловой Башкортостан"**
**20.00 "Полезные новости"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.30 "Глас закона"**
**21.00 "Историческая среда"**
**23.00 "Золотая осень-2011"**
**23.45 Художественный фильм**

## 15 СЕНТЯБРЯ ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "Модный приговор"
11.50 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "ЖКХ"
13.20 "Детективы". Сериал
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.25 "Хочу знать"
15.55 "Обручальное кольцо". Сериал
16.55 "Свобода и справедливость" с Андреем Макаровым"
18.00 Вечерние новости
18.45 "Давай поженимся!"
19.50 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Немного не в себе", 12-я, закл. серия
22.30 "Товарищи полицейские". "Чужая игра", 12-я серия
23.30 "Человек и закон"
00.30 "Ночные новости"
00.55 "Помни меня". Драма
03.00 "Новости"
03.05 "Стрельба". Боевик

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "От всей души"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
13.00 "Тайны следствия"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 139-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему". Сериал
17.55 "Институт благородных девиц", 245-я серия
18.55 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Сделано в СССР", 7-я и 8-я серии
22.55 "Поединок"
23.50 "Осторожно, лазер!" Док. фильм
00.50 "Вести+"
01.10 "Профилактика"
02.20 "Моя улица"
03.55 "Городок. Дайджест"
04.45 "Вести. Дежурная часть"

### НТВ
05.55 "НТВ утром"
08.30 "Объявлен в розыск". Сериал
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Медицинские тайны"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.00 "Сегодня"
13.30 "Закон и порядок-4". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Прокурорская проверка"
17.40 "Говорим и показываем"
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.40 "Морские дьяволы-4". Сериал
21.50 "Глухарь. Возвращение"
22.55 "Дело чести". Криминальная драма
00.50 Футбол. Лига Европы УЕФА. "Штурм" (Австрия) - "Локомотив" (Россия). Прямая трансляция
03.00 "Женский взгляд" Оксаны Пушкиной"
03.50 "Дачный ответ"
04.50 "Лига Европы УЕФА. Обзор"
05.20 "Один день. Новая версия"

### БСТ
**07.00 "Салям, Республика!", Кугарчинский район**
**09.00, 15.00, 18.30, 22.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**09.15, 20.00 "Полезные новости"**
**09.30, 22.00 "На самом деле"**
**10.00 "Глас закона"**
**10.30 "Следопыт"**
**10.45, 14.45 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Тамыр представляет…"**
**11.30 Мультсериал**
**12.00, 18.00, 21.30 Новости (на русск. яз.)**
**12.15, 19.00 "Замандаштар"**
**12.30, 18.15 "Орнамент"**
**12.45, 19.15 "Надо знать!"**
**13.00 "Башкорттар"**
**13.30 "Волшебный курай"**
**14.00 "В активном поиске"**
**14.30 "Любимые мелодии"**
**15.15 "Тамыр. Гора новостей и др."**
**16.15 "Башкирское спутниковое телевидение - 10 лет вместе"**
**16.30 "Я вас люблю…" Владимир Копытов и "Оскар-ансамбль"**
**17.30 "Тамле" (на русск. яз.)**
**19.30 "Действующие лица"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.30 "Взгляд без слов"**
**20.45 "Пора разобраться" (на башк. яз.)**
**23.00 "Диспут-клуб "Пятый угол"**
**23.45 Художественный фильм**

## 16 СЕНТЯБРЯ ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.45 "Модный приговор"
11.50 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "ЖКХ"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.25 "Хочу знать"
15.55 "Обручальное кольцо". Сериал
16.55 "Жди меня"
18.00 Вечерние новости
18.50 "Поле чудес"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Большая разница" в Одессе"
23.50 "Люди в черном". Фантастическая комедия
01.40 "Эль Марьячи"
03.15 "Доктор Стрейнджлав" (или как я перестал волноваться и полюбил атомную бомбу)"
05.05 "Детективы"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Мусульмане"
09.15 "С новым домом!"
10.10 "О самом главном"
11.00, 14.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
13.00 "Мой серебряный шар". Ирина Мурзаева"
14.00 "Вести"
14.30 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Евросинья. Продолжение". Сериал
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. "Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему", 169-я серия
17.55 "Институт благородных девиц", 246-я серия
18.55 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Кривое зеркало"
23.50 "Песочный дождь". Мелодрама
01.50 "Отпуск в сентябре". Драма
04.40 "Мой серебряный шар". Ирина Мурзаева"

### НТВ
05.55 "НТВ утром"
08.30 "Следствие вели..."
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Спасатели"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Закон и порядок-4". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Прокурорская проверка"
17.40 "Говорим и показываем"
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Морские дьяволы-4". Сериал
21.30 "Ельцин. Три дня в августе". Историческая драма
23.30 "НТВшники"
01.25 "Двое в чужом доме". Детектив
02.25 "Убийцы". Боевик
05.05 "Один день. Новая версия"

### БСТ
**07.00 "Салям, Республика!", г. Стерлитамак"**
**09.00, 15.00, 18.30, 22.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**09.15 "Полезные новости"**
**09.30 "На самом деле"**
**10.00 "Пора разобраться"**
**10.45, 14.45 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Тамыр представляет…"**
**11.30 Мультсериал**
**12.00, 18.00 Новости (на русск. яз.)**
**12.15, 23.00 "Замандаштар"**
**12.30, 18.15 "Орнамент"**
**12.45 "Надо знать!"**
**13.00 Киностудия "Башкортостан" представляет**
**13.45 "Весело живем"**
**14.00 "В активном поиске"**
**14.30 "Любимые мелодии"**
**15.15 "Тамыр. Гора новостей и др."**
**16.15 "Башкирское спутниковое телевидение - 10 лет вместе"**
**16.30 Концерт "Чарующие мелодии скрипки"**
**17.30 "Йома"**
**18.55 Открытый чемпионат России по хоккею - Чемпионат КХЛ"**
**21.15 "Криминальный спектр"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "На самом деле"**
**23.00 "Уфимское "Времечко"**
**23.45 Художественный фильм**

## 17 СЕНТЯБРЯ СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
06.00 Новости
06.10 "Гора самоцветов"
06.35 "Дачная поездка сержанта Цыбули"
08.10 "Дисней-клуб"
09.00 "Играй, гармонь любимая!"
09.45 "Слово пастыря"
10.00 Новости
10.15 "Смак"
10.55 "Александр Розенбаум. "Мой удивительный сон..."
12.00 Новости (с субтитрами)
12.15 "Среда обитания"
13.15 "Воспоминания о Шерлоке Холмсе". Сериал
18.00 Вечерние новости (с субтитрами)
18.15 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым"
19.15 Большие олимпийские гонки
21.00 "Время"
21.15 "Призрак оперы"
22.25 "Прожекторперисхилтон"
23.00 "Карлос". Биографическая драма
01.00 "Агент Джонни Инглиш". Комедия
02.40 "Правосудие для всех"
04.55 "Жизнь"

### РОССИЯ 1
05.35 "Без права на ошибку"
07.15 "Вся Россия"
07.30 "Сельское утро"
08.00 "Вести"
08.10 "Местное время. Вести-Башкортостан"
08.20 "Военная программа" Александра Сладкова
08.50 "Субботник"
09.30 "Городок. Дайджест"
10.05 "Дела и люди"
10.30 "Специальный корреспондент"
11.00 "Вести"
11.10 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.20 "Вести. Дежурная часть"
11.55 "Честный детектив"
12.25 "Подари себе жизнь"
12.55 "Вкус граната". Сериал
14.00 "Вести"
14.20 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.30 "Вкус граната". Продолжение
17.00 "Субботний вечер"
18.55 Шоу "Десять миллионов" с Максимом Галкиным"
20.00 "Вести в субботу"
20.40 "Выйти замуж за генерала". Мелодрама
00.30 "Девчата"
01.05 "Матрица". Боевик
03.55 "Комната смеха"

### НТВ
05.35 "Девятый отдел". "Однокашники. Сом". Сериал
07.25 "Смотр"
08.00 "Сегодня"
08.20 "Золотой ключ"
08.45 "Их нравы"
09.25 "Готовим с Алексеем Зиминым"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Главная дорога"
10.55 "Кулинарный поединок"
12.00 "Квартирный вопрос"
13.00 "Сегодня"
13.20 "Адвокат". Сериал
15.05 "Своя игра"
16.00 "Сегодня"
16.20 "Таинственная Россия"
17.20 "Очная ставка"
18.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.00 "Сегодня"
19.25 "Профессия - репортер"
19.55 "Программа Максимум. Расследования, которые касаются каждого"
21.00 "Русские сенсации"
21.55 "Ты не поверишь!"
22.50 "Последнее слово"
23.50 "Нереальная политика"
00.25 Московский фестиваль самодельных летательных аппаратов
01.00 "Седьмая жертва". Детектив
03.00 "Брачный контракт". Сериал
04.55 "Алтарь Победы. Шарага"

### БСТ
**07.00 "Новости" (на башк. яз.)**
**07.15 "Доброе утро"**
**07.30 Фильм - детям**
**09.15 "Третий звонок. К. Гольдони. "Слуга двух господ"**
**11.45 "Учим башкирский язык"**
**12.00 Новости (на русск. яз.)**
**12.15 "Следопыт"**
**12.30 "Тэмле"**
**13.00 "Еду я в деревню"**
**13.30 "Йома"**
**14.00 "Дарю песню"**
**16.00 "Надо знать!"**
**16.30 "Орнамент"**
**17.00 "Замандаштар"**
**17.30 "Весело живем"**
**17.45 "Полезные новости"**
**18.00 "Забытые войны"**
**18.30 Новости (на башк. яз.)**
**19.00 "Башкорттар"**
**19.30 "Автограф. Марсель Кутлугаллямов"**
**20.00 "Учим башкирский язык"**
**20.15 "Сэнгелдэк"**
**20.30 "Арслан". Мужской телевизионный клуб**
**21.15 "Следопыт"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Башкорт йыры"**
**22.45 "Золотая осень-2011"**
**23.15 "Муз-базар"**
**23.45 Художественный фильм**

## 18 СЕНТЯБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
06.00 Новости
06.10 "Ну, погоди!"
06.20 "Запасной игрок"
07.50 "Служу Отчизне!"
08.25 "Дисней-клуб"
09.15 "Здоровье"
10.00 Новости (с субтитрами)
10.15 "Непутевые заметки" с Дм. Крыловым
10.35 "Пока все дома"
11.25 "Фазенда"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.15 "Вышел ежик из тумана". К юбилею мультипликатора Юрия Норштейна
13.20 "Серафима прекрасная", 1-3 серии
16.20 "Голосящий КиВиН"
19.20 "Минута славы. Мечты сбываются!"
21.00 "Воскресное "Время"
22.00 "Любовь-морковь-3". Комедийная мелодрама
23.45 "Всегда говори "да". Комедия
01.40 "Красный пояс"
03.30 "Как приручить удачу"
04.30 "Хочу знать" с Михаилом Ширвиндтом"

### РОССИЯ 1
05.00 "Ход конем"
06.35 "Диалоги о животных"
07.30 "Сам себе режиссер"
08.20 "Смехопанорама" Евгения Петросяна
08.50 "Утренняя почта"
09.30 "Сто к одному"
10.20 "Вести-Башкортостан. События недели"
11.00 "Вести"
11.10 "С новым домом!"
11.25 "Вкус граната". Сериал
14.00 "Вести"
14.20 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.30 "Вкус граната". Продолжение
15.45 "Смеяться разрешается"
18.00 "Улыбнись, когда плачут звезды". Мелодрама
20.00 "Вести недели"
21.05 "Дуэль". Мелодрама
23.00 "Специальный корреспондент"
00.00 "Геннадий Хазанов. Повторение пройденного"
00.30 "Черная смерть". Драма
02.35 "Божественные тайны сестричек Я-Я". Комедия

### НТВ
05.50 Детское утро на НТВ. "Ну, погоди!" Мультфильм
06.00 "Девятый отдел". "Средь бела дня". Сериал
08.00 "Сегодня"
08.15 "Русское лото"
08.45 "Их нравы"
09.25 "Едим дома!"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Первая передача"
10.55 "Развод по-русски"
12.00 "Дачный ответ"
13.00 "Сегодня"
13.20 "Адвокат". Сериал
15.05 "Своя игра"
16.00 "Сегодня"
16.20 "Следствие вели..."
17.20 "И снова здравствуйте!"
18.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.00 "Сегодня. Итоговая программа"
20.00 "Чистосердечное признание"
20.50 "Центральное телевидение"
22.00 "Тайный шоу-бизнес: Алла: дай миллион!"
22.55 "НТВшники"
00.00 "Назад в будущее". Фантастическая комедия
02.25 "Главная дорога"
02.55 "Брачный контракт". Сериал
04.55 "Алтарь Победы. Щит и меч страны"

### БСТ
**07.00 Новости (на башк. яз.)**
**07.15 "Братан Мунна. Продавец счастья"**
**10.00 "Тамыр" представляет…"**
**11.45, 20.00 "Учим башкирский язык"**
**12.00 Новости (на русск. яз.)**
**12.15 "Следопыт"**
**12.30 "Тамле"**
**13.00 "Историческая среда"**
**13.30 "Дорога к храму"**
**14.00 "Дарю песню"**
**16.00 "Надо знать!"**
**16.30 "Орнамент"**
**16.55 "Открытый чемпионат России по хоккею - Чемпионат КХЛ". "Салават Юлаев" (Уфа) - "Нефтехимик" (Нижнекамск). Прямая трансляция. Во II перерыве Новости (на башк. яз.)**
**19.15 "Вестник Газпромтрансгаз-Уфа"**
**19.30 "Волшебный курай"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.30 "Любимое дело"**
**21.00 "Урал Лото"**
**21.15 "За порогом"**
**21.30 "Новости недели"**
**22.00 "Байык"**
**22.45 "Вечер.com"**
**23.30 "Художественный фильм**

ЙӨҘӨН КҮРЕП, ЙӨҘ ОЯЛМАҺЫН!




# ХАТАЛАР ҠУЛАСАҺЫНА ИНДЕК ТӘ...

Баш ҡала урамдарының, төрлө ойошмаларҙың атамаларындағы яҙыуҙарҙа хаталар бөткәне юҡ. Бер ерҙә төҙәтһәләр, яңы барлыҡҡа килгән ойошмалар алтаҡталарында улар тағы урын ала. Бына шундай хаталар ҡуласаһы барлыҡҡа килде баш ҡалала ғына түгел, республиканың бар ҡалаларында, хатта ауылдарында ла.

Ә бит ошо хаталар ҡуласаһынан сығыу өсөн... тиҫтәләп кенә һүҙҙең башҡортса яҙылышын хәтерҙә ҡалдырыу ҙа етә. Бына, ҡарағыҙ әле фотоһүрәттәргә. Ә хәҙер уларҙың дөрөҫ яҙылышына күҙ һалығыҙ һәм күңелегеҙгә киртеп ҡуйығыҙ: тәнәфесһеҙ; ял көндәрһеҙ ("ялһыҙ" тиергә лә була); эш ваҡыты; көн һайын; рәхим итегеҙ; эшләү ваҡыты; сәғәт, сәғәткә тиклем һ.б.

**Илдар ҒӘБИТОВ фотолары.**

БАШ ЭШЛӘТМӘК



**Горизонталь буйынса:** 2. Үҙйөрөшлө хәрби техниканың ҙур төркөмө. 5. Заповедник. 10. .... музыка ҡоралы. 15. Бер башҡорт ырыуының исеме. 18. Алла, тәңре. 19. Ниҙәндер һаҡланыу өсөн эшләнгән ҡоролма. 20. Кеше торлағында йәшәгән ерән төҫтәге оҙон мыйыҡлы бөжәк. 21. Он менән һатыу иткән кеше. 22. Ҡәбер ҡаҙа торған ҙур салыр. 24. Ай. 25. Набор шрифты кассаһы өҫтәле. 26. Йәше бәләкәй ҡыҙ йәки малай. 27. Үҙ сифаты, рәүеше булған зат. 28. Төтөн тейгән нәмәләге йоҡа ғына ҡором. 29. Ойошмалағы хеҙмәткәрҙәрҙең даими составы. 31. Алла рәхмәте булып тормошта ҡылған игелектәрең өсөн үҙеңә ҡайта торған әжер. 34. Һыйыр малы. 36. Берәй есем алып торған арауыҡ, ер. 37. Ырғаҡ рәүешендә бик, элгес. 38. Әйтелеше тап килеп, мәғәнәһе тап килмәгән һүҙ. 40. Айырым торған, хеҙмәткә яраҡһыҙ туғандарына түләнгән аҡса. 41. Кешеләрҙе ҡытыҡлап үлтерә торған мифик зат. 45. Көслө сағыу тауышлы, баҫмаҡһыҙ тынлы музыка ҡоралы. 47. Нәҙек ағасты өс буй кәртәгә шаҡарып яһаған ҡойма. 48. Йәрминкә. 49. Башҡортостандың Рус дәүләтенә ҡушылыуы тураһындағы монография авторы Ә. Усмановтың тыуған ауылы. 51. Ер йөҙөнөң ике меридиан араһындағы өлөшө. 52. Һаҙлы ер. 55. Уны йәй әҙерләйҙәр. 56. Йәш бәрәс тиреһе. 57. Шыйғаҡлап торған ҡуйы шыйыҡса. 58. Һан. 60. Мунсала менеп сабыныу өсөн эшләнгән бейек урын. 64. Ҡояш календары буйынса алтынсы айҙың ғәрәпсә исеме. 69. "Ай ҡалҡһа, төн (...)" Т. Йәнәби. 71. Ут тоҡандырып ебәреү өсөн йоҡа ғына итеп ярғыслаған ҡоро ағас. 72. Африканың төп халҡы исеме. 73. Урта Азия халҡының үләң әйтеүсеһе. 75. Һыу ҡошо. 76. Караптарға юл күрһәтеүсе. 78. Емеш-еләктән шәкәр менән ҡайнатып яһалған ҡуйы варенье. 79. Ҙур бәлә, һәләкәт. 81. Һемәк. 82. Оло, өлкән. 83. Нимәнелер тигеҙ итеп икегә бүлгән өлөш. 85. Телмәрҙең йәки яҙманың айырым урындарына ҡарата бирелгән өҫтәмә аңлатма. 89. Һәр ырыу символикаһындағы дүртәүҙең берәүһе. 90. Киҫеп алынған урындың йөҙө. 91. Кеше хеҙмәте менән эшләнгән нәмә. 92. Ҡыр хайуаны. 93. Ата ҡор. 94. Яй ғына хәрәкәт итә торған ҡабырсаҡлы әкәмтөкәм. 95. Һүрәтте ҡарағыҙ. 96. Геологтар тормошон сағылдырған "Зәңгәр сатыр" романы авторы.

**Вертикаль буйынса:** 1. Һаҡларға ҡушып бирелгән нәмә. 2. Тауарҙар төрө йыйылмаһы. 3. Йылы яҡта үҫә торған мәңге йәшел цитрус ағасы. 4. Ат егеү ҡорамалы. 6. Электр ҡорамаларына ток үтеп, магнит майҙаны барлыҡҡа килтерә торған сытдар системаһы. 7. Үрмәксегә оҡшаған ағыулы көньяҡ бөжәге. 8. Уйылып, соҡорайып торған урын. 9. Балаҡлы йоҡа кейем. 11. Биҙәүес. 12. Селәндәр ғаиләһенә ҡараған төнгө һаҙ ҡошо. 13. Мөфтөй. 14. Ҡолаҡтың эстән эренләп шешеүе. 16. Көтөүлек. 17. Әрем күп булып үҫкән урын. 23. Эш-хәрәкәттең ваҡыт эсендәге һуҙымы. 29. Һыу, газ һ.б. нәмә ҡыуыу өсөн ҡулланылған көпшә. 30. Йөҙ тингә тиң булған итеп бәйләнгән бүрәнәләр. 32. Польша алпауыты. 33. Күҙҙән сыҡҡан шыйыҡлыҡ. 35. Район. 39. Азатлыҡ. 42. Үҙаллы булыу сифаты. 43. Төрлө ырым-хөрәфәт буйынса даualау өсөн файҙаланылған төрлө нәмәләр. 44. Серетеүгә һыуға һалынған йүкә ҡабығы. 46. Сәнғәт төрө. 50. Кескәйҙәр уны йотлоғоп тыңлай. 53. Киндер һуҡҡанда буйлыҡ ептәрҙе борғосаға беркетеүсе таяҡ. 54. Халыҡ сәсәне. 55. Мөсәл буйынса ун икенсе (быйылғы) йыл. 59. Төрлө хис-тойғоно белдергән һүҙ. 61. Йәш мал йәки үҫемлек үҫтерә торған урын. 62. Балыҡ ҡатын. 63. Бит йәки бер нәмәнең ҡабырға яҡ күренеше. 65. "Тау башында балҡый бер ҡала" (йырҙан). 66. Һикереп йөрөгән ҡан һурғыс бөжәк. 67. Дағстан халыҡтарының береһе. 68. Ботаҡ ҡырҡа торған ҙур баҡса ҡайсыһы. 69. Йәрәхәт. 70. Төймә рәүешендәге дарыу. 74. Аренда. 77. Яманлыҡ менән танылған исем. 80. Тотош нәмә өҫтөндәге уйылып йәки үтәнән-үтә асыҡ булып торған урын. 81. Бүрек. 84. Ауырлыҡ тағылған бау. 86. Фин-уғыр телдәренә ҡараған халыҡтарҙың береһе. 87. Театр галереяһы. 88. Ҡош тота торған ау.

**Фәрит РӘМОВ.**

**36-сы һандағы кроссвордтың яуаптары:**

**Горизонталь буйынса:** 2. Ситлек. 5. Балҡантау.10. Гранат. 15. Уҡыу. 18. Егет. 19. Префикс. 20. Адаптер. 21. Тире. 22. Ысынлыҡ. 24. Полк. 25. Рәис. 26. Маяҡ. 27. Ысул. 28. Эшсе. 29. Мәте. 31. Кшыҡ. 34. Руна. 36. Трос. 37. Киле. 38. Тиресе. 40. Планета. 41. Йыуата. 45. Шәре. 47. Шприц. 48. Ваҡыт. 49. Ритм. 51. Дилбәр. 52. Бармаҡ. 55. Әтәл. 56. Бәбәк. 57. Сауҙа. 58. Аҙан. 60. Зөлмәт. 64. Туйраут. 69. Армада. 71. Оран. 72. Ҡорт. 73. Әшнә. 75. Тапма. 76. Үпкә. 78. Тәке. 79. Ятыу. 81. Анод. 82. Реал. 83. Әмзә. 85. Йыртҡыс. 89. Әсас. 90. Ималлыҡ. 91. Тротуар. 92. Һоло. 93. Онсо. 94. Ватман. 95. Аллағыуат. 96. Состав.

**Вертикаль буйынса:** 1. Әклимә. 2. Суверенитет. 3. Төпкилде. 4. Емеш 6. Айсык. 7. Ҡаҙы 8. Наил 9. Араҡы. 11. Рота. 12. Нарыштау. 13. Температура. 14. Реглан. 16. Низамов. 17. Бабурин. 23. Нәшан. 29. Миләш. 30. Ете. 31. Ҡол. 32. Ҡот. 33. Бей. 35. Артым. 39. Сәпелдәтә. 42. Ыҙырмыҙыр. 43. Ниғәмәт. 44. Ҡарабай. 46. Әлхәт. 50. Тырта. 53. Әлмөхәмәтов. 54. Байдәүләтов. 55. Әҙибә. 59. Нөсхә. 61. Марксист. 62. Тоҙ. 63. Шафталы. 65. Урт. 66. Рапат. 67. Уша. 68. Боролош. 69. Ата. 70. Метеорит. 74. Шомлоҡ. 77. Крансы. 80. Уйҡыл. 81. Астра. 84. Бажа. 86. Рига. 87. Ҡаҡы. 88. Руно.

*✓ Үҙ ихтыярың менән етәкселек итә алмаһаң, башҡалар менән дә етәкселек итә алмаҫһың.*

*(Гарриет Стоу).*



СМСНАМӘ - ШИҒРИ ӘЙТЕШ

# БАХЫРЛЫҠМЫ ФӘҠИРЛЕК?

**Конкурс иғлан итеп, гәзит уҡыусыларыбыҙға шиғри һорау биреүебеҙ булды, күп һандағы СМСяуаптар алырға ла өлгөрҙөк. Артабан конкурста ҡатнашыусыларҙың күп булыуын иҫәпкә алып, беҙ уларға тахаллус-псевдоним бирергә ҡарар иттек. Был юлы шиғри әйтештә 4 сәсән ҡатнаша. Улар: АҠЫҠ, БУЛАТ, САЯН һәм ЭТҠОЛ, редакция исеменән әйтеште КӨФӨ сәсән алып бара. АҠЫҠ атлы сәсәнебеҙ бер һорауға - ике, ЭТҠОЛ атлы сәсәнебеҙ өс яуап ебәреп өлгөрҙө. Шулай итеп, шиғри әйтеш түбәндәгесә килеп сыҡты:**



КӨФӨ: Замандың был күренешен
Ни тип, нисек әйтерлек:
Үтә байҙар артҡан һайын,
Арта бара фәҡирлек?

БУЛАТ: Замандың был күренешен
Фашлау юлы бик ябай:
Кәрәк "фекер төйөнө" -
Беҙ фекергә үтә бай.

АҠЫҠ: Нинә арта фәҡирлек?
Нинә артмай изгелек?
Изгелектә донъя матур,
Артта ҡалһын фәҡирлек.
Донъя матур - бөйөклөктә,
Яманлыкта - насарлыҡ.
Изгелектең сиге юҡтыр,
Булмаһасы фәҡирлек.

ЭТҠОЛ: Эх, замана, тип уфтандым,
Тормош шулай ауырмы?
Ләззәтләнеп йәшәгәнгә
Күп бисәләр ауырлы...

САЯН: Нинә арта фәҡирлек?
Аҡса ла юҡ фатирлыҡ!
Ҡасан бөтөр бахырлыҡ?
Бирсе, Хоҙай, сабырлыҡ!

АҠЫК: Ни эшләһен ябай кеше,
Урлаша ла алмай ул.
Ғәҙеллектә йәшәй икән,
Шуға арта фәҡирлек.
Ғәмһеҙлектә, хәлһеҙлектә,
Битарафлыҡ ялҡаулыҡта,
Хәмерҙәрҙән, йәберләүҙән -
Шунан килә фәҡирлек.

ЭТҠОЛ: Һарай тулы мал-тыуар,
Юлдар тулы машина.
Булғанына шөкөр тимәй,
Әҙәм хәҙер шашына.
Һыйыр эсә шишмәнән,
Ирҙәр эсә шешәнән.
Бисәләр ҙә ҡалышмайҙар,
Оялмайҙар кешенән.
Пособие алалар,
Самагонға һалалар.
Заманалар ауыр тиеп,
Һәр саҡ сәбәп табалар.

КӨФӨ: Аҡыҡ әйтте: "Ғәҙеллектә
Йәшәгәндәр фәҡир", тип.
Саян әйтә: "Фәҡирлектә
Йәшәүселәр бахыр", тип.
Улай булғас, әйтегеҙ һуң:
Бахырлыҡмы фәҡирлек?
Фәҡирлекме бахырлыҡ?

**ШУЛАЙ ИТЕП...**
**Шиғри әйтеш дауам итә. Уға башҡаларҙың да дәррәү ҡушылыуын көтәбеҙ.**

РУХИӘТЕБЕҘ

# ГӘРӘ ЫРЫУЫ БАШҠОРТТАРЫ

## шәжәрә байрамы аша үҙен таныта

**Тамырһыҙ ағас булмаған кеүек, милләт тә тамырһыҙ булмай. Ағас нисек тамырҙары аша һут алып, ныҡынып, күккә үрләһә, милләттәр ҙә шулай ата-бабаларынан мираҫ булып ҡалған ныҡлы тамырҙары аша йәшәү көсө ала, ныҡына, яңынан-яңы бейеклектәргә күтәрелә. Ағастың тамырына балта сапһаң, ул йә ҡорой, йә зәғиф булып ҡала. Тәбиғәт ҡанундарын был тормоштағы бөтөн нәмәгә ҡайтарып ҡалдырырға була: тамырын бөтөрһәң, бер нәмә лә булмаясаҡ. Шуға ла республикабыҙҙа нисәмә быуаттар дуҫ һәм татыу йәшәгән милләттәрҙең асылын һаҡлап ҡалыу буйынса ҙур эштәр башҡарыла. 17 сентябрҙә Краснокама районында уҙасаҡ "Шәжәрә байрамы" ла бының асыҡ миҫалы.**

Һәр байрамдағыса, майҙан йәйғор төҫтәрендә балҡыр, моғайын, сөнки конкурста ҡатнашыусы һәр ғаилә үҙенең тирмә-йортон ҡорасаҡ, уны милли йыһаз менән биҙәйәсәк һәм милли ризыҡтар әҙерләйәсәк. Тирмә-йорттар алдында,



әлбиттә, ғаиләләрҙең бай шәжәрәһе урын аласаҡ. Программала ҡаралыуынса, һәр ғаилә бер йола күрһәтеп, концерт номеры менән сығыш яһаясаҡ. Яңы Уразай ауылынан Харисовтарҙың ғаилә династияһы Алтын туй тантанаһын сәхнәләштерһә, Яңы Хажы ауылынан Закировтар ырыуы бәпес ҡойманығына саҡырасаҡ. Яңы Ҡабандан Шәмсетдиновтар буҙа эсереп, шәл бәйләү серҙәренә өйрәтһә, Яңы Нуғай ауылынан Ғәлиевтар нигеҙ ташы һалыу йолаһын тәҡдим итәсәк. Был дүрт ғаилә лә гәрә ырыуы башҡорттарынан. Шулай уҡ йәнәй ырыуы башҡорттарынан булған Сауыҙбаш ауылынан Ғәзизовтар "Тарих төбө - ғүмер ебе" тигән программа тәҡдим итһә, Иҫке Мошты ауылынан Солтановтар баллы сәй эсергә табын артына саҡырасаҡ. Николо-Березовканан Сюткиндарҙың рус ғаиләһе өй туйлаһа, Тимеровтарҙың мари ғаиләһе туҡыу серҙәре менән бүлешәсәк. Сарала Тәтешле, Яңауыл, Илеш, Ишембай райондарының һәм Татарстан Республикаһының Актаныш районынан гәрә ырыуы вәкилдәре лә ҡатнашасаҡ.

Башҡортостан Республикаһы Фәндәр академияһының Гуманитар тикшеренеүҙәр институты һәм Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты менән берлектә әҙерләгән "Гәрә ҡәбиләһе башҡорттары: тарихы һәм хәҙерге заман" тип аталған республика ғилми-ғәмәли конференцияһы ла байрамдың төп өлөшөн тәшкил итәсәк. Был мөһим сарала шулай уҡ Үзбәкстан, Ҡаҙағстан республикаларының һәм Төньяҡ Кавказдың фәнни үҙәктәренән ғалимдар һәм тикшеренеүселәр ҡатнашасаҡ.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ҠАБЫҠ ҺУҒЫП...

## ҡарға ҡурҡытып булмай

Тышлығына ҡарап китап тураһында фекер йөрөтмә.
**(Инглиз халыҡ мәҡәле).**

Күптәр тормошта үҙ эсенә бикләнеп, бары тик үҙ үҙе менән генә була һәм... бик тиҙ яуызға әйләнә.
**(Фридрих Ницше).**

Гонаһтарҙың күләгәһе оҙон.
**(Ирланд мәҡәле).**

Үҙ ихтыярың менән етәкселек итә алмаһаң, башҡалар менән дә етәкселек итә алмаҫһың.
**(Гарриет Стоу).**

Һарауһыҙға һалам бирһән, һорай-һорай һорога ҡалдырыр.
**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Алға ҡарамағандар... артта ҡала.
**(Мексика халыҡ мәҡәле).**

Бәләләр тимерсенең сүкешенә оҡшаш: тәүҙә емереп ташлай, шунан яңынан сүкеп барлыҡҡа килтерә.
**(Карлина Бови).**

Идеялар үҙе түгел, ә тойғоға әйләнгәс кенә донъяны үҙгәртә ала.
**(Густав ле Бон).**

Барыһы ла уйҙарыбыҙҙан тора: ул тормошобоҙҙо йә тамуҡҡа, йә ожмахҡа әйләндерә ала.
**(Марк Аврелий).**

Шәмендә өрөп һүндергән ел мейесендә ҙур ут тоҡандырыуы ла бар.
**(Пьер Бомарше).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Кояш байығанын күҙәтеп, тирә-йүн менән һоҡланып ултырған бер мәлдә Уҡытыусыға бер кеше килә һәм үҙ эҙмышына зарлана башлай. "Минең эҙмышым тормош мәшәҡәттәре диңгеҙендә батып барган тишек кәмәгә оҡшаған", - ти ул. Уҡытыусы, ҡарашын диңгеҙ киңлегенә төбәп, былай ти:**

**- Ошо диңгеҙҙә күпме кеше батып һәләк булған, ә һин тере. Ошондағы балыҡтарға ем булған кешеләр һинең эҙмышыңа көнләшер генә ине...**

**Ҡояштың һуңғы нурҙары байығас, Уҡытыусы урынынан тороп, ҡалаға табан атлай. Теге кеше лә һүҙһүҙ генә уның артынан эйәрә. Уның уйлана биргәнен һәм һүҙҙе йомғаклап ҡуйырға кәрәк икәнен аңлап, Уҡытыусы дауам итә:**

**- Һыуға сумған кеше түгел, ә йөҙә алмаған кеше батып үлә. Ҡайһы бер һыуға сумған кешеләр хатта алтын балыҡ тешләп алып та йөҙөп сығалар..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Таһир ИШКИНИН,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**
«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 9 сентябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 5203
Заказ 3569